ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кiске Өфө

8-14 август (урағай) 2020

№32 (918)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Һәр кеше, һәр бер ҡәүем һәм милләттең бәхетле булыуының төп сәбәбе белемдер. Ашлыҡтар өсөн ямғыр ни ҡәҙәр кәрәк булһа, әҙәм балаһы өсөн белем шул тиклем кәрәк. Кешеләрҙең дә белемдәре менән белемһеҙҙәре шәриғәт алдында бер тигеҙ түгел.*

**Ризаитдин ФӘХРЕТДИН.**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Тағы ла битлекһеҙ битһеҙҙәр хаҡында



3

Редакцияларға шылтыратмайҙар, килмәйҙәрме?



Тимәк, хәбәрселәр ҡыҙыҡлы мәҡәләләр ижад итә белмәй.

8-9

Халыҡ тойғоһонан ваз кисмәм!



11

Заман икенсе,



ләкин тәрбиә мәктәбе икенсе була аламы?

13

ТВ-программа 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Никотин менән мауығыусыларҙың ҡылығы хаттин ашты, хатта һуңғы ваҡытта ҡалаларҙа йәмәғәт урындарында, парктарҙа кальян тарта башлағайнылар. БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары тартмаған кешеләрҙең мәнфәғәтен, һаулығын һаҡлау маҡсатында бындай күренештәрҙе сикләү, йәғни транспорт туҡталыштарында, парктарҙа, асыҡ һауала уткәрелгән төрлө саралар мәлендә тәмәке тартыуҙы тыйған закон ҡабул итте. Был хәбәр һеҙҙе шатландырамы?

*Рима ЙӘҒӘФӘРОВА, Ейәнсура районы:* Кальян тартыуға ҡағылышлы яңы закондың ҡабул ителеүенә, һис шикһеҙ, бик күптәр ҡыуанғандыр. Азия илдәренән килгән был мәҙәниәт һуңғы йылдарҙа беҙҙә лә ныҡ таралды. Хатта уны хуплап, тәмәкегә ҡаршы ҡуйырға маташыусылар барлыҡҡа килде. Йәнәһе лә, сигаретҡа ҡарағанда уның зыяны, уныһынан да бигерәк, тартыусыларҙың йәмғиәткә зарары юҡ. Медицина хеҙмәткәре булараҡ, шуны әйтә алам: уларҙың икеһе лә организм өсөн берҙәй хәүефле. Күптәр кальян тартҡанда һыу никотинды үткәрмәй, тулыһынса фильтрлай, шуның менән сигаретҡа ҡарағанда ҡурҡынысы юҡ, тип уйлай һәм бик яңылыша. Уның төтөнөндә генә лә әллә күпме канцероген, тәмәкелә булмаған токсиндар бар. Мин уны хатта наркотикка тиңләр инем.

Йылытыу өсөн файҙаланылған күмерҙең ағыулы һөрөм бүлеп сығарыуы ла күптән билдәле. Тап шуныһы менән тартмаған кеше өсөн дә, йәғни уның янынан үтеп киткәндә лә хәүефле ул.

Тағы ла шул мәғлүм ки: кальян йоғошло сирҙәрҙең таралыуына ла булышлыҡ итә, сөнки уның төрөпкәһен түңәрәк буйлап, бер-береһенән алып тарталар. Был иһә туранан-тура бактерияларҙың, вирустарҙың ауыҙҙан-ауыҙға күсеүенә булышлыҡ итә. Быйылғы коронавирус инфекцияһы таралған ваҡытта айырыуса ҡурҡыныс ул. Хатта туберкулез, гепатит В кеүек дауалауға ауыр бирелгән сирҙәрҙе йоҡтороу осраҡтары ла бар. Киҙеү һәм микоплазмоз кеүек ауырыуҙарҙы әйтергә лә түгел.

Ҡайһы бер рекламаларҙа кальянды маҡтап, хатта файҙалы тип ебәргәндәрен ишеткәнегеҙҙә, күргәнегеҙ ҙә барҙыр. Ышанырға ярамай, уны тартыусылар тәмәжниктәр кеүек үк яман шешкә дусар. Сит ил мәҙәниәте беҙҙә дөрөҫ йүнәлеш алмаусын да билдәләп үтеү зарур. Мәҫәлән, кальяндың тыуған яғында уны тартҡан ваҡытта сәй генә эсәләр. Ә беҙҙә йәштәребеҙ бер үк ваҡытта кальян да тартып, шул уҡ ваҡытта һыра ла һемерергә мөмкин. Был осраҡта организм икеләтә ағыулана.

Тынсыу бүлмәлә кальян тартыу тағы ла хәүефлерәк, уның төтөнө кеше организмына ҙур зыян килтерә. Уны беренсе тапҡыр тартҡас та беленә. Үпкә юлына ыҫмала ултыра, һөҙөмтәлә ҡанға кислород етмәй. Ошо халәтте йәштәр ял итеү тип иҫәпләй.

Шуға күрә, шәфҡәт туташы һәм ике бала тәрбиәләгән әсәй булараҡ та, үҙебеҙҙең депутаттар ҡабул иткән законды тулыһынса хуплайым. Әгәр ҙә ул үҙ көсөнә инһә, яҡын киләсәктә сәләмәтлектәренә зарланыусылар бер аҙға ғына булһа ла, кәмер, тип ышанам.

(Дауамы 2-се биттә).

АФАРИН!

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ УҠЫТЫУСЫҺЫ...

## Рәсәй кимәлендәге конкурста еңде

**Ошо көндәрҙә Мәскәүҙә "Рәсәй халыҡтары туған телдәрен уҡытыуҙың иң яҡшы педагогик тәжрибәләре" Бөтә Рәсәй конкурсы үтте. Унда Башҡортостан данын Өфөнөң 2-се шифахана мәктәп-интернатының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Мирас Ишдәүләтов (һүрәттә) яҡланы һәм "Туған телде уҡытыу методикаһы һәм практикаһы" номинацияһында I урын яуланы. Конкурс барышы, тәьҫораттары тураһында Мирас Рәшит улының үҙенән һораштыҡ.**




- Ҡағыҙәләр буйынса, конкурстың беренсе турына дәрестең конспект планын ебәрергә, икенсе турға шул конспект нигеҙендә оҫталыҡ дәресе әҙерләү талап ителә ине. Унан алда ғына 6-сы синыф уҡыусылары менән Башҡорт дәүләт университетында уҙғарылған туған телдәргә арналған бер фестивалдә ҡатнашҡайныҡ һәм мин шуның нигеҙендә балаларға күрһәтмә дәрес үткәрергә әҙерләнгәйнем, конкурсҡа шул дәресте ебәрҙем дә инде. Конкурс эшем "6-сы синыфта интеграцияланған туған тел дәресен методик әҙерләү" тип аталды. Мин ҡатнашҡан номинацияға йөҙҙән артыҡ эш ебәрелгәйне, ун кеше финалға үттек. Бынан тыш, тағы төрлө номинацияларҙа барлығы 30 педагог конкурс финалында оҫталығын һынағайны, һәм коллегам, Әбйәлил районы Аҫҡар ауылы Т.Кусимов исемендәге гимназияһының башланғыс синыфтар уҡытыусыһы Йондоҙ Хисаметдинова үҙ номинацияһында III урын яуланы. Финалға үткән уҡытыусылар барыһы ла 24-30 йыл эшләгән тәжрибәле педагогтар булды, ә минең был өлкәлә хеҙмәт стажым 5 йыл ғына. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, жюри ағзалары конкурсҡа тәҡдим иткән эшемде юғары баһаланы.

(Дауамы 5-се биттә).

12+

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ТИРӘ-ЯҠ НИҢӘ БЫСРАҠ?

**Булһа була бит ул матур ҡатын-ҡыҙҙар. Маршруткала ҡаршымда ултырған ханыма һоҡланып барам: бешкән арыш башағы төҫөндәге ҡыҙғылт-һары ҡуйы сәсен өҫкә күпертеп өйөп ҡуйған. Күҙҙәре, әйтерһең дә, төпһөҙ зәңгәр күл, ә керпеге - шул күлде уратып алған ҡуйы ҡамыш. Подиумдарҙа ғына йөрөй торған буй-һын. Минең генә түгел, ҡаршыһындағы бөтәһенең дә һоҡланыулы ҡарашын тойоп, сейә ҡыҙыл төҫкә буялған тырнаҡтарына текәлде ҡатын. Бер туҡталышта сығырға тура килде беҙгә.**

-Бәләкәй ҡаланың шуныһы миңә оҡшамай: кешене күрәләтә күҙҙәре менән "сисендерәләр". Үҙемде ҡайҙа ҡуйырға белмәй ултырҙым, - тип һүҙ ҡушты ул, бәлки, минең дә ҡарап ултырғаныма төрттөргәндер. - Мәҙәнилек тә, тәрбиә лә юҡ...

"Мәҙәниәтһеҙлегемә" уңайһыҙланып, ни тип әйтергә лә һүҙ таба алмай, ыҡ-мыҡ иткәнсе, матур ҡатын, бей-ек үксәләре менән асфальтты үтә тишерҙәй булып, тыҡ-тыҡ баҫып китеп тә барҙы. Тик ул ырғытып киткән һыу шешәһе, билеты сүп һауытына барып етмәй, кеше күпләп йөрөгән туҡталыштарҙың береһен тағы ла нығыраҡ ҡыйлап ятып ҡалды.

Әле генә күптәр өсөн, шул иҫәптән миңә лә, гүзәллек алиһәһе булып тойолған ҡатындың нәзәкәтлелегенән, матурлығынан бер нәмә лә ҡалманы. Ауыҙ тултырып мәҙәнилек, тәрбиә тураһында әйткән булды, ә үҙенең артынан сүп-сар һәм асыу тирә-яҡҡа сәселде...

Урамдар, туҡталыштар, биҫтәләр бысраҡ булыуы, сүплеккә әйләнеүе тураһында күп зарланабыҙ. Уның өсөн етәкселәрҙе лә, йыйыштырыусы ойошмаларҙы ла әрләйбеҙ. Экология, тирә-яҡ мөхит бысрана, тип һөрәнләйбеҙ, яр һалабыҙ. Тик үҙебеҙ йәшәгән урыныбыҙ таҙа, һулар һауабыҙ саф булһын өсөн нимә эшләйбеҙ һуң? Йыйыштырылған урында түгел, ә ҡыйламаған ерҙә таҙа булыуын һаман аңламайбыҙ.

Билдәле булыуынса, йыл һайын республика районҡалалары үҙ территорияһын сүп-сарҙан таҙартыуға, рөхсәт ителмәгән сүплектәрҙе бөтөрөүгә ярайһы ҙур ғына сумма аҡса тотона. Уға киткән финанс сараларын башҡа маҡсатта ҡулланыу отошлораҡ булмаҫ инеме?

Эйе, сүплек мәсьәләһе һаман да иң төп проблемаларҙың береһе булыуын дауам итә. Көнкүреш ҡалдыҡтары башлыса баҡса йорттары, коттедждар биҫтәһе, урман һыҙаттарында, йәғни кешеләр йөрөгән, дөрөҫөрәге, кеше үҙен иректә тойған, бер ниндәй контроль, күҙәтеү юҡ тип иҫәпләгән ерҙә осрай. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң? Нимә сәбәпсе быға? Тәрбиәһеҙлекме, әллә тейешле урында сүп һауыттары булмауымы? Ә, бәлки, үрҙә атап кителгән ҡатын кеүек, урна ситенә ырғытҡан өсөн яза сараһы ҡаралмауылыр?

Бынан бер нисә йыл элек сүп һауытында эҙләнгән асарбаҡ менән һөйләшергә тура килгәйне. Ул бөгөн кешеләрҙең бай, етеш йәшәүен билдәләне. "Кисә һатып алған икмәген бөгөн ашамайҙар, былтыр алған кейемен лә шкафта урын юҡ, бөтәһен дә сығарып ташлайҙар", - тигәне хәтерҙә ҡалған. Эйе, бөгөн кешелә әйбер күп, береһенән-береһе уҙҙырып байыраҡ йәшәргә ынтылалар. Тик матди байлыҡ йыйған һайын, күңелдәре ярлыланмаһа ине...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Никотин менән мауығыусыларҙың ҡылығы хаттин ашты, хатта һуңғы ваҡытта ҡалаларҙа йәмәғәт урындарында, парктарҙа кальян тарта башлағайнылар. БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары тартмаған кешеләрҙең мәнфәғәтен, һаулығын һаҡлау маҡсатында бындай күренештәрҙе сикләү, йәғни транспорт туҡталыштарында, парктарҙа, асыҡ һауала үткәрелгән төрлө саралар мәлендә тәмәке тартыуҙы тыйған закон ҡабул итте. Был хәбәр һеҙҙе шатландырамы?***



**(Башы 1-се биттә).**

***Алик БАЙНАЗАРОВ, Өфө ҡалаһы:*** Бик күп кафеларҙың, һыра барҙарының "кальянная"ларға әйләнеүе, ысынлап та, бөгөн илдә, шул уҡ ваҡытта беҙҙең республикала ла кальян тартыу мәҙәниәтенең ныҡ таралыуы хаҡында һөйләй. Был биналарҙа бөгөн төрлө йәштәгеләрҙе осратырға мөмкин. Ҡатын-ҡыҙҙар ҙа йыш ҡунаҡ унда.

Бындай биналарға күберәк эсмәгән, йәғни алкоголле эсемлек ҡулланмаған, дөрөҫөрәге, үҙҙәренсә сәләмәт тормош алып барам, тип уйлаған кешеләрҙең йөрөүенә иғтибар иткәнем бар. Улар башлыса бындай урындарға ял итеү, аралашыу өсөн килә. Бер яҡтан ҡараһаң, музыка тыңлап, тыныс ҡына һөйләшеп ултырыу өсөн яҡшы урын. Икенсе яҡтан, оҙағыраҡ ултырһаң, ул бик ауыр тәьҫир итә. Хатта икенсе көнөнә лә "бахмур синдромы"н кисергәнем бар. Был нимә тураһында һөйләй? Беҙҙең ҡанда кальян никотинына ҡаршы торорлоҡ көс юҡ. Организмдың ҡаршылыҡ күрһәтерлек ҡеүәте булмағанға ла алкоголь, тәмәке кеүек зарарлы ғәҙәттәргә тиҙ бирешәбеҙ. Бәйләнгәнлек барлыҡҡа килә. Шуға күрә бер нисә тапҡыр тартып ҡараным да, ундай урындарға бармаҫҡа булдым.

Һуңғы ваҡытта йәмәғәт урындарында, мәҫәлән, кеше күпләп йөрөгән Ағиҙел яры буйында йәштәрҙең кальян тартып тороуы менән дә бер ҙә килешмәйем. Берҙән, бында балалар, йәш әсәйҙәр күп. Ә кальяндың төтөнө зарарлы булыуын бер кем дә инҡар итмәй. Икенсенән, тегендә-бында төтәгән кальяндар баш ҡалабыҙҙың матур майҙансыҡтарын йәмһеҙләй, тип уйлайым. Ҡоролтай депутаттары ҡабул иткән закон үҙ көсөнә инһә, был күңелһеҙ күренештәргә, һис шикһеҙ, сик ҡуйыласаҡ. Штраф ҙур түгел, әлбиттә. Туҡталышта, паркта тартҡан ваҡытта күрһәләр, 500 һум түләйәсәкһең. Тағы тотолһаң - 1000 һум аҡсаңды әҙерләргә. Нисек кенә булһа ла, боҙ урынынан ҡуҙғалды, тип өмөтләнергә урын бар.

Беҙҙә бит үҙебеҙҙең йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе инҡар итеп, сит мәҙәниәтте үҙләштерергә генә торалар. "Кальянная" урынына ҡымыҙ эсеү урыны йәки ҡымыҙхана асһаң, унда Башҡортостандың төрлө райондарында етештерелгән ҡымыҙҙы килтерһән, яҡшы итеп рекламалаһаң, халыҡ барыбер яйлап йөрөргә ғәҙәтләнер ине ул. Ни тиһәң дә, был эсемлекте, уның файҙаһын беҙҙә, кальянға ҡарағанда, һәйбәтерәк беләләр бит. Үҙебеҙҙең милли эсемлегебеҙҙе һатыу йәһәтенән бик тә отошло булыр ине.

Ә кальян тураһында егерме йыл тирәһе элек беҙҙә бер кем дә ишеткәне лә булмағандыр әле. Халыҡ күпләп Мысырға, Төркиәгә йөрөй башлағас ҡына "мода"ға инде ул. Бынан бер нисә быуат элек уны солтандар ғына тартҡан. Тик улар ваҡланған ынйы, әфиүн һәм хуш еҫле үләндәр файҙаланған. Аҡсаһыҙҙар ғына, бөгөн беҙҙәге кеүек, тәмәке ҡушҡан. Ә беҙҙә нисек? Аңын-тоңон белмәйенсә, мода артынан ҡыуырға ғына тора шул халыҡ.

***Айтуған ИБРАҺИМОВ, Өфө ҡалаһы:*** Кальян һәм тәмәке - бер төрлө. Организмға зарары буйынса ла, тәғәйенләнеше йәһәтенән дә икеһе лә бер тиң. Уның да, сигареттыҡы кеүек актив (үҙе тартҡан) һәм пассив (тартҡан кеше эргәһендә тороп зыян алған) тартыусылары була. Шулай булғас, тәмәке тартыуға ҡарата булған сикләүҙәр кальянға ла ҡағылырға тейеш, тип уйлайым.

Югиһә, һуңғы осорҙа был ғәҙәткә үҙ итеүселәр шул тиклем үҙен иркен тота башланы. Улар ҡайҙа теләй, шунда йыйыла. Дим биҫтәһенә ингән урында, Ағиҙел ярында йыш ҡына күрергә мөмкин уларҙы. Машиналар менән киләләр ҙә, багажниктарын асып, музыка аҡыртып, быҫҡыталар ғына. Йәштәрҙең ваҡыт үткәреү сараһына әүерелде, тиһән, бер ҙә артыҡ булмаҫ. Элекке кеүек тәбиғәткә сығып, йылға буйында балыҡ тотоп, йырҙар йырлап ял итеүгә етмәй инде.

Үҙем шәхсән араҡы, һыра эсеп, ғауғалап, һуғышып йөрөгәндәр менән сағыштырғанда, кальян тартыусыларға ҡарата лояль мөнәсәбәттәмен. Әммә ҡатын-ҡыҙҙарҙың төтөн һурыуына ҡырҡа ҡаршымын, сөнки уның репродуктив ағзаларға кире йоғонтоһо бик ҙур икәнен яҡшы беләм. Башҡортостанда тартмаған кешеләрҙең һаулығын һәм мәнфәғәтен һаҡлау маҡсатында ҡабул ителгән ҡануниәтте лә шул сәбәптән сығып хуплайым. Кеше күпләп йөрөгән, балалар, үҫмерҙәр күргән урында тартыу тыйылыуы бик ваҡытлы.

Федераль закондың төбәктәргә үҙенең өҫтәмәләрен индерергә мөмкинлек биреүе бик яҡшы. Шуға ярашлы, беҙҙең республикала туҡталыштарҙа, спорт ярыштары, мәҙәни саралар барған урында кальян тартыу күренештәре сикләнер, тип уйлайым.

**Ләйсән СӘЛИХОВА**
**яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓6 авгусҡа мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда 6 955 кешелә коронавирус инфекцияһы теркәлгән. Һуңғы тәүлектә COVID-19 йоҡтороусылар һаны 35-кә артҡан. Коронавирустан вафат булғандар һаны 24 кеше тәшкил итә. Рәсәйҙә пандемия башланғаны бирле 871 894 кеше коронавирус менән сирләгән, һуңғы тәүлектә сир 5 267 кешелә асыҡланған. Барлығы 14 606 кеше үлгән.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Бәйләнештә" социаль селтәренең 30 иң популяр рус авторҙары исемлегенә инде. Рейтинг "Brand analitics" компанияһы тарафынан 2020 йылдың июль айы өсөн төҙөлгән. Радий Хәбиров 28-се урында тора, уның сәхифәһендәге хәбәрҙәр 86 мең лайк, 16 меңдән ашыу комментарий йыйған.

✓Рәсәй Хөкүмәте балаларға түләү өсөн тағы 18,4 миллиард һум бүлде. Бойороҡҡа ил хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйҙы. Башҡортостан Республикаһына өс йәштән ете йәшкә тиклемге балаһы булған ғаиләләргә айлыҡ түләүҙәр өсөн 660 миллион һум бүленде. Аҡса Рәсәйҙең Ғаилә, хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығына йүнәлтелде. Документҡа ярашлы, ғаиләләргә 718 меңдән ашыу бала аҡса алырға тейеш. Рәсәй Федерацияһының Хеҙмәт министрлығы 2021 йылдың 1 февраленә тиклем был аҡсаның нисек тотонолоуы хаҡында отчет бирә.

✓БР Торлаҡ-коммуналь хужалығы министрлығы 2021 йылға йәмәғәт урындарын төҙөкләндереүгә субсидия бүлеүгә ғаризалар ҡабул итә башланы. Субсидияға республиканың халыҡ һаны 1 меңдән ашыу булған тораҡ пункттары дәғүә итә ала, бюджетта бергә финанслауға аҡса булырға тейеш. Бынан тыш районда заманса ҡала мөхитен булдырыуҙың муниципаль программаһы халыҡ тарафынан раҫланған булыуы мотлаҡ. Документтар 14 авгусҡа тиклем ҡабул ителә.

✓Рәсәйҙәге йылҡы һанының 9 проценты - республикала, бейә һөтөнөң 45 проценты ошонда етештерелә, тип иҫкә төшөрҙәләр Ауыл хужалығы министрлығында. Бөгөнгә республикала 8 мең баш йылҡы аҫралған 170 ҡымыҙ фермаһы йыл һайын 3,7 мең тонна шифалы эсемлек етештерә. Был өлкәлә милли традицияларҙы һаҡлау һәм тармаҡты артабан үҫтереү өсөн республикала "Башҡортостан Республикаһында йылҡысылыҡты үҫтереү" ярҙамсы программаһы раҫланған. 2020 йылға 8,5 миллион һум күләмендә ярҙам бүленгән.

✓ *Ә бөгөн иһә, үҙ ҡурсаланыу осоро бушатылғандан һуң бөтөнләй туғарылды халыҡ: магазинда, дауаханала булһын йәки транспорттамы - элементар тәртип ҡағиҙәләрен үтәүҙән баш тартыусылар - аҙым һайын...*



УЙЛЫҒА - УЙ

# ТАҒЫ ЛА БИТЛЕКҺЕҘ БИТҺЕҘҘӘР ХАҠЫНДА

**Үпкәләһә, үпкәләр инде ҡай берәүҙәр, тик шулайтып әйтергә тура килә, башҡа сара юҡ. Хәйер, коронавирус башланып киткән осорҙа ла бар ине ундай "ҡыйыуҙар ", йәғни битлек кейеп йөрөргә тигән мотлаҡ күрһәтмәне һанға һуҡмай, үҙ "туҡһанын туҡһан" итеп иркенләп йөрөргә яратыусы эгоистар.**



Ундайҙар, әлбиттә, башҡаларҙы бар тип тә белмәй. Үҙ ҡылыҡтарын аҡлап, ниндәй генә сәбәптәр уйлап тапмайҙар: йәнәһе, битлек кейеү файҙаһыҙ, ул вирус йөрөтөүселәрҙән генә талап ителергә тейеш. Бының нигеҙһеҙлеге назан кешегә лә хатта билдәле. Йәшертен вирус йөрөтөүсенең маңлайына яҙылмаған, был турала ул хатта үҙе лә белмәҫкә мөмкин. Хатта хәҙер аҙым һайын һатылған был һаҡланыу сараһын һатып алмай, уны бушлай таратыуҙы талап итеүселәр ҙә осрай. Бушлай ҙа күпләп таратылды, ләкин ул саҡта ла тәртипкә буйһонмағандар күп булды. Ә бөгөн иһә, үҙ ҡурсаланыу осоро бушатылғандан һуң бөтөнләй туғарылды халыҡ: магазинда, дауаханала булһын йәки транспорттамы - элементар тәртип ҡағиҙәләрен үтәүҙән баш тартыусылар - аҙым һайын, улар араһында бер үҙенә битлек кейеп йөрөүе лә хатта унайһыҙыраҡ тойола башлай...

**Был сир, уйлап ҡараһаң, йәмғиәтебеҙҙең мәҙәни кимәле күрһәткесе лә булды ла ҡуйҙы түгелме? Әле пандемия ҡатмарлаша төшөп, пневмония менән сирләүселәр күбәйеп киткәс, республикабыҙ Башлығы Радий Хәбиров йәмәғәт урындарында, транспортта вирустан шәхси һаҡланыу сараларын ҡулланыу режимын көсәйтеүҙе талап итте. Ғөмүмән, төбәк етәксеһенең был мәсьәләне даими иғтибар уҙғендә тотоуы, халыҡ һаулығы өсөн борсолоуы, йәрәгенә яҡын алыуы ҡайһы бер туң күңел битарафтар бәгерен дә эретерлек тә бит хатта, ләкин, күренеүенсә, күптәр быны баһалау түгел, аңлау һәләтен дә юғалтҡан, ахыры инде...**

Күрәһең, бөгөн бөтөн нәмәне инҡар итергә ғәҙәтләнеп киткән халыҡ рәсми статистиканы ла һанға һуҡмай һәм ул турала ишетергә лә теләмәй. Ә бит һуңғы ике айҙағы динамика ҡотто алырлыҡ. 21 майға ҡарата ғына әле коронавирус йоҡтороусылар республикала бөтәһе 2514 кеше булһа, ни бары 2 ай ҙа 10 көн эсендә уларҙың һаны 4231 кешегә артып киткән һәм 1 авгусҡа 6745 сирле тәшкил итә. Йәғни, ай һайын ике меңәрҙән ашыу кеше зарарлана башлаған, тигән һүҙ был. Бына шуның өсөн дә бөгөн республикала битлек кейеп йөрөү режимын көсәйтергә ҡарар ителде. Әлеге баҡытта Өфөлә генә түгел, районларҙа ла шәхси һаҡланыу саралары менән файҙаланыу мәсьәләһе контролгә алынды. Баш ҡалала, мәҫәлән, магазиндарҙа, дауаханаларҙа һәм йәмәғәт транспортында битлекһеҙ йөрөгән кешеләргә штраф санкциялары ҡаралған. Ошо көндәрҙә генә ишетелеүенсә, хатта N тигән бер ауылда район үҙәгенән килеп төшкән тикшереүселәр әхирәте янынан сәйләп ҡайтып килгән бер әбейҙән дә, уның әхирәтенән дә штраф түләтеп киткән, имеш, тип көлдөрҙөләр. Тик был анекдот та, шулай уҡ көлкө лә түгел: ауылдарҙы ла инләй сир, сөнки тыуған төйәктәренә ялға ҡайтыусылар, туй, башҡа төр мәжлес үткәреүселәр күп, өҫтәүенә, әлеге вахтасылар һаман булһа ҡайтып-китеп йөрөүҙән туҡтамай. Күптәр был сирҙе үҙҙәренә ҡағылмай йә уны урап үтер, тип уйлай, күрәһең: бөтөнләй һаҡлыҡ саралары күрмәй; магазинға икмәк алырға йә дауаханаға инеп сыҡҡан арала ла күҙмә-күҙ осрап тора ундайҙар. Касса янына хисаплашырға килһәң, бер ни уйламаҫтан, елкәңә тынын бөркөп, эргәңә үк сираҡа килеп тә баҫа мәғәнәһеҙҙәр - социаль ара (дистанция) тигәнде ишеткәндәре лә юҡ, күрәһең.

Магазиндарҙың да күбеһендә быңдай булем билдәләре, башҡа төр иҫкәртеүҙәр бөтөнләй юҡ, хатта кассирҙар үҙҙәре лә битлекһеҙ ултыра башланы - бына ғәжәп! Үҙҙәре һүҙ күтәрмәй: берәй иҫкәртеү ишараһы яһап ҡара - ҡолаҡ япраҡтарың һулырлыҡ әрепләшеү ишетерһең. Ә "Башавтотранс" водителдәре менән меҫкен кондукторҙар ниндәй генә хәлгә ҡалып бөтмәне шундай моңһоҙҙар арҡаһында. Әйе, тап шулар арҡаһында ла республикала сирҙең киҫкен көсәйеп китеүе сәбәпле 31 июлдә БР Дәүләт Йыйылышы депутаттары Ғәҙәттән тыш режим хаҡындағы БР законына үҙгәрештәр индерергә мәжбүр булды ла инде. Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев әйтеүенсә, төҙәтмәләр COVID-19 менән бәйле хәл арҡаһында ғәмәлгә аткарыла. Уға ярашлы, республика хөкүмәте ғәҙәттән тыш хәл режимын техноген һәләкәт йә тәбиғәт стихиялары сәбәпле генә түгел, ә хәүефле йоғошло сир - пандемия осоронда ла иғлан итә ала.

**Битлек режимы ҡәтғиләштерелеү сәбәпле, әлеге "Башавтотранс" һаҡлыҡ саралары булмаған пассажирҙарҙы хеҙмәтләндермәйәсәк: салонда битлек киймәгәндәр булһа, кондуктор уларға билет һатмаясаҡ һәм автобустан төшөп китеүҙәрен талап итә аласаҡ. Автобустарға пассажирҙарҙың бөтәһе лә битлек кейеп ултырғас ҡына маршрут буйынса ҡуҙғалып китергә рөхсәт ителә. Быңдай тәртип, әлбиттә, бөтөн юлаусыға ла оҡшап та етмәҫ, законға ҡаршы килеп, әрепләшеүселәр ҙә буласаҡ, тик ундайҙарға һүҙ әрәм итеп, оҙаҡ һатыулашып торорға ла кәрәкмәҫтер, полиция саҡыртыу ҙа етә йә булмаһа, яуаплы кешеләр тарафынан кирегә бөткәндәргә мул ғына штраф та сәпәләсәк. Шуға күрә штраф түләтеү хоҡуғын кондукторҙарҙың үҙҙәренә йөкмәтеү ҙә урынлы булыр ине, тимәксемен.**

Иң мөһиме: ҡаты тәртип кешегә ҡаршы түгел, киреһенсә, уның мәнфәғәтен ҡайғыртып эшләнә икәнен аңлаһын ине ул әҙәм балаһы. Бер аҙ ғына уйлана төшһәндәр, хаталарын аңлаһындар һәм башҡаса ҡабатламаһындар өсөн генә түгел, ә уларҙың сәләмәтлеген, ғүмерен аяп эшләнә бит бөтәһе лә. Юғиһә, тыйылғанды һанламау үҙҙәренә үк ҡиммәткә төшәсәк.

Йәнә лә мин-минлеккә барыуҙы яҙып иткәндәрҙе сир менән ярышып сүпләүсе тағы бер хәүеф һағалай. Иҫкәртеүҙәргә ҡолаҡ һалмайынса, рөхсәт ителмәгән урындарҙа һыу инеп батып үлеүселәр быйыл бигерәк күп һәм бында көндәрҙең ғәҙәттән тыш эҫе тороуын һылтау итеү дөрөҫ түгел. Төп ғәйеп - әлеге лә баяғы тәртипте, ҡабул ителгән дөйөм талапты һанламау, үҙһүҙлелек касафаты. Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 20 июлгә ҡарата быйыл 162 кеше батып үлгән. Шуны ла әйтеп китеү кәрәктер: һыу инеүселәр ҙә, яр буйында ҡыҙыныусылар ҙа бик күп йыйылып китә һәм, әлбиттә, бында бер кем дә битлек тә киймәй, социаль араһыҡты ла күҙәтмәй. Бынан алдараҡ әле БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы үткәргән брифингта Республика Гигиена һәм эпидемиология үҙәгенең баш табибы урынбаҫары Марина Скотарева әйтеүенсә, улар ведомствоһы ягынан һыу инеүҙәрҙә тыйыу ҡаралмаған, сөнки, тип аңлата ул, коронавирус һыу аша йоҡмай. Ошоға ҡағылышлы, Роспотребнадзорҙың матбуғат хеҙмәтенә һылтанып, "РИА Новости" агентлығы ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр килтерә: COVID-19-ҙың күпселек өлөшсәләре 24 сәғәт эсендә бүлмә йылылығындағы һыуҙа һәләк була, ә 99,9 проценты 72 сәғәт эсендә юҡҡа сыға. Ә бына диңгеҙ һыуында һәм хлор ҡатышмаһы кәметелгән һыуҙа вирус үрсемәй, ләкин йәшәү һәләтен юғалтмай, ә инде ҡайнатылған һыуҙа коронавирус тулыһынса юҡҡа сыға. Был мәғлүмәттәр ҡыҙыҡлы һәм файҙалы булһа ла уның һыу инеүселәр тәртибе һәм батып үлеүселәр статистикаһына бер ниндәй ҡағылышы ла юҡ һымаҡ. Ләкин был Гигиена һәм эпидемиология үҙәге белгестәрен халыҡтың күпләп һыу инеү урындарын билдәләүҙән һәм махсус контролгә алыу бурысынан азат итмәй. Һыу инеү урындары ла бит уларҙың инфекция сығанағы булыу-булмау йәһәтенән сығып ҡаралырға тейешле түгелме ни һуң? Эҫе көндәрҙә пляждарҙа ла, һыу эсендә лә алма төшөр урын булмай, ә быны нисек күҙҙән ысҡындырмаҡ кәрәк? Дөрөҫ, әйтелеүенсә, иҫкәртеүҙәргә лә, тыйыуҙарға ла бөгөн бер кем иғтибар бирмәй, ә шулай ҙа административ яза сараларының аныҡ документҡа нигеҙләнгән булыуы хәйерлерәктер.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓8 августа Грозный ҡалаһында уҙасаҡ АСА лигаһының 108-се турнирында Венер "Башҡорт" Ғәлиев чечен "Йыртҡыс"ы Әмирхан Адаевҡа ҡаршы һуғышасаҡ. Венер Ғәлиев карьераһын 2000 йылда башлай, ул 42 алышта ҡатнашҡан, 31-ендә еңгән. Ә АСА лигаһында ул икенсе тапҡыр сығыш яһай, быға тиклем 102-се турнирҙа ҡаҙаҡ алышсыһы Ермек Тлауовты техник нокаутҡа ебәреп еңгән.

✓Башҡортостандың балалар баҡсаларында уҡытыу 5 телдә алып барыла. Башстат мәғлүмәттәренә ярашлы, 2019 йыл аҙағында урыҫ телендә 217,5 мең, башҡортса - 23,3 мең, татарса - 3,9 мең, сыуашса - 200, удмуртса - 100 бала һөйләшкән. Дөйөм алғанда республикала 100 урынға 115 бала тура килә. Мәктәпкә тиклем йәштәге балаларҙың 77 проценты нығ тулыландырылған төркөмдәргә йөрөй. Республика буйынса бер төркөмдә уртаса 26 бала шөғөлләнә.

✓Билдәле ютуб-каналында итальяндар ҡатнашлығында сираттағы видео сыҡҡан, унда улар башҡорт аш-һыуын тәмләп, тәьҫораттары менән бүлешә. Ҡатнашыусыларҙың күбеһе Башҡортостан тураһында тәүгә ишетә һәм хатта "Ufa" итальян телендә "күңелһеҙ" тигәнде аңлата, тип билдәләйҙәр. Традицион башҡорт аш-һыуын тәмләп ҡарағас, төрлө фекерҙәр яңғыраһа ла, "Бик тәмле!" тигәне йыш ишетелде.

✓"Отрада" компаниялары төркөмө акционерҙары Патрик Хоффман һәм Антуан Менделович Башҡортостан Башлығын башҡорт балын Европа һәм Азия илдәренә һатыуға сығарыуға арналған халыҡ-ара инвестиция проекты менән таныштырҙы. Республикала 5 йыл эсендә 50 мең оя бал ҡортонан торған етештереү базаһы булдырыу, халыҡ-ара кимәлдәге лаборатория төҙөү ҡаралған һәм маҡсатлы рәүештә "Бәхетле бал ҡорто" компанияһы асылған. Проект республика етәкселеге тарафынан хупланды.

✓Башҡортостанда шәхси һаҡланыу әйберҙәрен үтилләштереүҙе үҙәкләштерергә кәрәк, тигән тәҡдим индерә Йәмәғәт палатаһы ағзаһы Рәсих Хәмитов. Уның фекеренсә, тәғәйен дәүләт органдары битлек һәм бирсәткәләрҙе йыйыу, махсус заводтарға үтилгә тапшырыу схемаһын төҙөргә, уны ҡулланыусыларға ҡәтғи ҡағиҙәләр булдырырға тейеш. Ул медицина ҡалдыҡтарын йыйыу һәм үтилләштереү системаһын миҫал итеп килтерҙе. "Ошо системаны киңәйтергә йә медицина учреждениеһынан айырып берәй нәмә уйлап табырға кәрәк. Халыҡ пластик, полиэтилен әйберҙәрҙе һаҡ ҡулланырға тейеш", - тине Рәсих Хәмитов.

ҠЫҪҠАСА

# СҮП-САР СЫҒАРЫУ...

✓**Сүп-сар сығарыуға тарифтар ҡайтанан ҡарала һәм иҡтисади нигеҙләнгән кимәлгә еткереләсәк. Был турала республика Хөкүмәтенең оператив ултырышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте.** Башҡортостанда сүп-сар сығарған өсөн түләүҙәр йыйымы 85 процент тәшкил итә. Радий Хәбиров билдәләүенсә, төбәк операторҙары бынан элегерәк тә тарифтарҙы арттырыу тураһында тәҡдимдәрен әйтә килде, сөнки сүп-сар сығарыу өсөн әлеге түләү күләмен иҡтисади яҡтан нигеҙле тип әйтеп булмай. "Реформаның эшкәртеү буйынса беренсе фазаһын үтәбеҙ. Икенсе фаза - сүп-сарҙы үтилләштереү һәм сорттарға айырыу. Полигондар һәм сүп-сар сортировкалау станциялары хаҡында уйларға кәрәк. Иҡтисади нигеҙләнгән тариф буйынса тәҡдимдәрҙе ҡарарға әҙермен, был хаҡта фекерләшә башлағыҙ", - тине Радий Хәбиров.

✓**Башҡортостанда грипка (киҙеүгә) ҡаршы халыҡты вакцинациялау башлана. Эпидемия миҙгелендә профилактик прививкаларҙың милли календары сиктәрендә 1 830 000 кешене, шул иҫәптән 418 000 балаға, 1 405 000 өлкән кешегә һәм 7 000 ауырлы ҡатынға прививка эшләнәсәк.** БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән әйтеүҙәренсә, COVID-19 таралыуы менән бәйле эпидемиологик хәлдә куҙҙә тотоп, шулай уҡ йоғошло сирҙе иҫкәртеү йәһәтенән күберәк халыҡты прививкалауға йөләп итеү маҡсатында грипка ҡаршы өҫтәмә рәүештә 195 000 доза вакцина һатып алынасаҡ. Алты айлыҡтан алып йәш балаларға, уҡыусыларға һәм студенттарға, айырым һөнәрҙәр буйынса эшләп йөрөүсе өлкәндәргә, ауырлы ҡатындарға, 60 йәштән өлкәндәргә, хәрби хеҙмәткә саҡырыласаҡ үҫмерҙәргә, хроник үпкә, шулай уҡ йөрәк-ҡан тамырҙары, матдәләр алышыныуы боҙолған сирлеләргә һәм һимеҙлектән яфа сигеүселәргә вакцина яһатыу ҡаралған.

✓**Республика райондары һәм ҡалаларында йорт алды территорияларын һәм подъездарын, урамдарҙы, квартал араларын һәм тротуарҙарҙы дезинфекциялау дауам итә.** Коронавирус инфекцияһының таралыуына юл ҡуймау өсөн ошо маҡсатта эшмәкәрлек алып барған идара итеү компанияларына һәм ойошмаларына бюджеттан аҡса бүленә. "Башфармация" аша муниципалитеттарға 15 мең битлек, комбинезон, бирсәткә, 10 мең пар итек һәм күҙлек, 2 мең һиптергес һәм 16 мең литр дезинфекция сараһы бүленгән. Ул муниципалитеттарҙың дезинфекциялау ихтыяжын йыл һуңынаса ҡәнәғәтләндерергә етә, сөнки шыйыҡлатып ҡулланғанда, унан 15 миллион литр дезинфекция сараһы алырға була. Башҡортостан Республикаһының Госжилнадзоры йорттарҙы дезинфекциялауҙы даими күҙәтеп тора. Шулай уҡ республиканың Торлаҡ-коммуналь хужалығы министрлығы вәкилдәре лә тикшереүҙәр үткәрә.

✓**Рәсәй 1 августан халыҡ-ара авиабәйләнеште тергеҙә, тип хәбәр итте "РИА Новости" Рәсәй Федерацияһы Премьер-министры Михаил Мишустиндың белдереүенә һылтанма менән.** Рейстар Мәскәүҙән, Мәскәү өлкәһенән, Санкт-Петербургтан һәм Донҙағы Ростовтан башҡарыла. "Халыҡ-ара авиабәйләнеште тергеҙеү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Шул уҡ ваҡытта беҙ эпидемиологик хәл, сир күрһәткесе һәм уртаҡлыҡ принциптарынан сығып эш иттек. 1 августан Мәскәү, Мәскәү өлкәһе, Санкт-Петербург һәм Донҙағы Ростов аэропорттарынан рейстар башҡарыла", - тине Мишустин Рәсәй Хөкүмәтендә. Премьер-министр билдәләүенсә, был ҡарар рәсәйҙәрҙең сит илдән ҡайтыуын да тиҙләтергә тейеш. Авиабәйләнеш тәү сиратта Бөйөк Британия, Төркиә һәм Танзания менән тергеҙеләсәк. Төркиәлә 1 августан рәсәйҙәр өсөн Анкара һәм Истанбул, 10 августан Анталья, Бодрум һәм Даламан курорт ҡалалары аэропорттары асыла. Бынан тыш, Танзания, атап әйткәндә, Занзибар менән авиабәйләнеш тергеҙелә. Мәскәү, Петербург һәм Ростов аэропорттары өсөн килгән пассажирҙар һаны буйынса сикләү бөтөрөлә, тип белдерҙе транспорт министры Евгений Дитрих.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

# ЯЛДАН ҠАЙТТЫҢМЫ?

**Башҡортостанда Рәсәйҙең көньяҡ курорттарынан ҡайтыусыларҙы аэропортта, авто- һәм тимер юл вокзалында, шулай уҡ автомобилдә сәйәхәт итеүселәр өсөн өйҙә коронавирусҡа тикшерә башлайҙар. Башҡортостан Республикаһында коронавирус инфекцияһының таралыуына юл ҡуймау буйынса оператив штаб ултырышында ошондай ҡарар ҡабул ителде. Уны республика Башлығы Радий Хәбиров уҙғарҙы.**

Хәҙер барлыҡ курорттарҙа ла ял итеүселәр күп, социаль дистанция һаҡланмай, кешеләр битлек киймәй - был инфекцияның таралыуына булышлыҡ итә, тип билдәләнде Штаб ултырышында. Шулай уҡ Рәсәйҙең көньяғындағы бер нисә ҡала һәм районда коронавирус инфекцияһы сығанағы бар. Айырыуса Краснодар крайы (Сочи, Адлер, Анапа һәм башҡа), Ҡырым (Ялта, Алушта, Евпатория) курорттарында ял итеп ҡайтҡандарҙы тикшерәләр. Оператив Штаб быйыл Башҡортостанда йәшәүселәргә курорттарға барыуҙан тыйылып торорға кәңәш бирә, сөнки коронавирус инфекцияһы таралыу хәүефе һаҡлана, ә курорттарҙа ул юғары.

# НИ ӨСӨН АҠСА ТҮЛӘНМӘГӘН?

**Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры Ленара Иванова халыҡҡа мөрәжәғәт итеп, ни өсөн 3 йәштән 7 йәшкә тиклем балалары булған ҡайһы бер ғаиләләрҙең түләүҙәр алмауына аңлатма бирҙе.**

Мәғлүм булыуынса, 23 июлгә ҡарата бирелгән ғаризаларҙың һаны 140 меңгә еткән, шуларҙың 64 мене әле ҡарала, 40 меңе буйынса түләүҙәр башҡарылған, 31 мең ғариза кире ҡағылған, сөнки уларҙа йә йән башына килем билдәләнгәндән артыҡ булған, йә ғаилә тураһында тулы мәғлүмәт бирелмәгән. "Беҙ эҙләү бюроһына әйләндек, ғариза биреүсе тураһында әллә күпме мәғлүмәт эҙләргә тура килә. Был эште ведомство-ара хеҙмәттәшлек юлы аша, электрон рәүештә, граждандарҙы борсомай ғына башҡарабыҙ", - ти Ленара Иванова. Уның һүҙҙәренсә, серверҙар көсөргәнеште күтәрә алмай, йыш ҡына система туҡтап ҡала.

"Ахырҙа, белгестәр күп ата-әсәләргә шылтыратып, ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе асыҡларға (алименттар, суд ҡарарҙары, эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге, ғаилә составы һ.б.) мәжбүр. Был телефондарҙың буш тормауына килтерә, шул уҡ ваҡытта күптәргә шылтыратып та алып булмай. Һәр шылтыратыу кәмендә 10 минут ваҡытты ала", - ти ул.

Түләүҙәр билдәләнмәгән барлыҡ хәл-торошто ведомство бергә туплай һәм һуңынан ғариза биреүсегә шылтыратып, аңлатасаҡтар. "Хәҙер Рәсәйҙең Хеҙмәт министрлығы менән ғаилә килеменән инвалидтарға һәм инвалид балаларҙы ҡараған кешеләргә ай һайын бирелгән түләүҙәрҙе һәм компенсацияларҙы алыу мәсьәләһен ҡарайбыҙ. Шулай уҡ ғаилә килеменә берҙәнбер торлаҡты һатҡандан килгән аҡсаны индермәү тәҡдиме буйынса эшләйбеҙ. Беҙ мәсьәләләрҙе ғариза биреүселәр файҙаһына мөмкин тиклем тиҙерәк һәм файҙалыраҡ итеп башҡарырға тырышабыҙ", - ти Ленара Иванова.

# ПНЕВМОКОКТАН...

**Бөгөн Башҡортостанда 21 меңдән ашыу кеше, шул иҫәптән хеҙмәткә саҡырылыусылар һәм 60 йәштән өлкәндәр пневмониянан прививка алды.**

Быйыл республика ошо инфекциянан вакцина һатып алыуҙы биш тапҡырға арттырҙы: федераль бюджет иҫәбенә бер йәшкә тиклемге 43 800 балаға һәм 40 500 сабыйға ҡабаттан вакцина һалыу өсөн 95 600 доза һатып алынды. "Эпидемиологтар менән кәңәшләшеп, республикала дауахананан тыш пневмониянан өҙлөгөү сәбәпле үлем осраҡтарын кәметеү өсөн тиҙ бирешеүсән төркөмдәр араһында ныҡлы иммунитет булдырырға ҡарар ителде, - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Артабан да оло быуынды ошо хәүефле инфекциянан тулыһынса яҡлау өсөн вакцинация темпын шул уҡ кимәлдә һаҡларбыҙ. Тикшеренеүҙәр раҫлауынса, өлкәндәрҙә пневмококтан иммунитет биш йылдан ашыу һаҡлана".

Республика өлкән йәштәгеләрҙә иммунитет булдырыуҙы 15 августа тиклем тамамларға ниәтләй. Бөтәһе 40 мең кешегә прививка яһау күҙаллана. Был күрһәткес былтырғынан дүрт тапҡырға күберәк. Башҡортостанда үпкә сирле 60 йәштән өлкән 68 989 кеше медицина ойошмаларында иҫәптә тора. Ҡалған 18 989 кешегә прививка эшләү 2021 йылға планлаштырыла. Шулай уҡ башҡа хәүеф төркөмдәре өсөн пневмококк вакцинаһын һатып алыу күҙаллана. "Хроник үпкә сиренән яфаланған 60 йәштән өлкән граждандарға вакцина яһау мөмкинлеге һәм кәрәклеге мәсьәләһен хәл итеү өсөн йәшәгән урын буйынса поликлиникаға мөрәжәғәт итергә кәңәш бирәбеҙ", - тип хәбәр иттеләр Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан. Шул рәүешле Башҡортостан пневмония менән ауырыу хәүефен һәм COVID-19 йоҡтороу мөмкинлеген кәметергә ниәтләй.

# ЭШҺЕҘҘӘР ҘӘ ИҪӘПЛЕ

**Башҡортостанда эшһеҙҙәр һаны былтырғы тәүге ярты йыллыҡ менән сағыштырғанда 4,3 тапҡырға артты, тип хәбәр итә республика статистиктары.**

2020 йылдың июнь ахырына төбәктә барлығы 88 мең эшһеҙ иҫәпкә алынды. Ошо йылдың тәүге алты айында Башҡортостандың халыҡ мәшғүллеге хеҙмәтенә эш эҙләп 114 мең кеше мөрәжәғәт итте. Уларҙың 17 проценттан ашыуы мәшғүллек хеҙмәте ярҙамында эш табыуға өлгәште.

Сағыштырыу өсөн: 2019 йылдың ғинуар - июнендә мәшғүллек үҙәктәренә 52 мең кеше мөрәжәғәт итте, шуларҙың 70 проценттан ашыуы эш тапты. Быйыл мөрәжәғәт итеүсе эш юллаусыларҙың 26 проценттан ашыуының эш стажы юҡ ине.

Рәсми эшһеҙҙәрҙең күпселеге, йәғни 61 проценты, - ҡатын-ҡыҙ, 23,8 проценты - 16-29 йәшлек йәштәр. Башстат мәғлүмәттәре буйынса, төбәктә теркәлгән эшһеҙлек кимәле июндә эшсе көстәр һанының 4,65 процентын тәшкил итә. Эшһеҙҙәрҙең белем кимәле юғары ҡала килә, тип билдәләй статистиктар. Мәҫәлән, Башҡортостанда теркәлгән күпселек эшһеҙҙәр юғары һәм урта һөнәри белемгә эйә (56,2 процент). Республикала эшһеҙҙәр һаны арта барған һайын, эш урындары, киреһенсә, кәмей бара. Июнь ахырына төбәктә 40 мең эш урыны иҫәпләнә ине. Был 2019 йылдың июненә ҡарағанда 22,5 процентҡа кәмерәк. Эш урындарының күпселеге - эшсе һөнәрҙәре буйынса.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө мэрияһы "Кала мәҙәниәт һарайы" туҡталышындағы "Имәндәр" скверында яңы "Бейеүсе торналар" фонтаның эшләү режимы үҙгәреүе тураһында хәбәр итте. Билдәләнеүенсә, фонтан ике - ғәҙәти һәм музыкаль режимда эшләүен дауам итә. Әгәр элек фонтан төнгө 12-гә тиклем эшләһә, хәҙер уның графигы ике сәғәткә - киске 10-ға ҡәҙәр ҡыҫҡартылды.Фонтандың музыкаһы шулай уҡ киске сәғәт 10-сы 30 минуттан киске 10-ға тиклем уйнай,тип белдерҙеләр мэрияла.

✓2020 йылда шағирә, уҡытыусы, ғалимә Рәсимә Ураҡсинаның тыуыуына 70 йыл тула. Башҡорт теле йылына арналған Рәсимә Ураҡсина исемендәге конкурс ошо дата уңайынан ойоштоРола. Конкурста республикала һәм унан ситтә йәшәгән мәктәп йәшендәге балалар ҡатнаша ала. Ҡатнашыу өсөн башҡорт телендә шиғыр яҙырға, уларҙы rasimaa-pai@mail.ru йәки akbuzat-journal. yandex.ru адресы буйынса ебәрергә кәрәк. Конкурс 2020 йылдың 15 сентябренә тиклем дауам итә.

✓Башҡортостанда яҙыусы Нәжиб Асанбаевтың 100 йыллығын билдәләргә әҙерләнәләр. Әлеге ваҡытта Башлыҡтың тейешле указ проекты килешелә. 2021 йылда Нәжиб (Николай) Асанбаевтың тыуыуына 100 йыл тула (1921-2013). Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы лауреаты, РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, күренекле башҡорт прозаигы, шағир, драматург, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы, йәмәғәт эшмәкәре.

✓Билдәле башҡорт кинорежиссеры Булат Йософов V Халыҡ-ара төрки донъяһының документаль кино фестивале жюрийына саҡырылған. Сара быйыл көҙ Төркиәлә уҙғарыла. Фестивалдә ойоштороусылар төрки телле халыҡтар режиссерҙарына ярҙам күрһәтеү, яңы исемдәр асыу, тамашасыларҙы Рәсәй, Төркиә, Әҙербайжан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан, Босния һәм Герцеговинаның юғары сифатлы фильмдары менән таныштырыу маҡсатын ҡуйған.

✓Башҡортостан юғары туристик миҙгелдә иң популяр 10 ял итеү урыны исемлегенә инде, тип хәбәр итте ТурСтат. "Рәсәй шифаханалары.рф" сервисы мәғлүмәттәре буйынса, тәүге унау иҫәбендә - Ҡырым, Сочи, Анапа, Кисловодск, Ессентуки, Геленджик, Пятигорск, Железноводск, Башҡортостан һәм Мәскәү өлкәһе.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Өфө моторҙар эшләү берекмәһе хеҙмәткәрҙәре "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһын Өфөнөң төньяҡ өлөшөндә, Беренсе Май урамы скверында, Еңеү паркына ингән урындың ҡаршыһына ҡуйыу өсөн сығыш яһаны.*



*АФАРИН!*

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ УҠЫТЫУСЫҺЫ...

## Рәсәй кимәлендәге конкурста еңде

**(Башы 1-се биттә).**

Оҫталыҡ дәресемдә төрлө милләт вәкилдәренән торған класта башҡорт телен өйрәтеүгә бағышланым. Беҙҙең мәктәптә 6-сы синыфта башҡорт, урыҫ, татар, таджик, мари һәм үзбәк балалары - 6 милләт вәкиле белем ала. Бөтәһенә лә дәрес ҡыҙыҡ булһын өсөн был халыҡтарҙың теле, мәҙәниәте, тарихы нигеҙендә сағыштырма мәғлүмәттәргә таянып дәрескә әҙерләнергә тура килә. Был юлы ла милли яҙ байрамдарының - Науруз һәм Масленицаның үзбәк һәм мариҙарҙа нисек уҙғарылыуы тураһында, татар-башҡорт-мари телдәрендәге исемдәргә арналған ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәрҙе туплап, дәрес күрһәттем. Оҫталыҡ дәресемдән һуң "Башҡа милләт балаларына был ҡыҙыҡмы?" тигән һорау ҙа бирҙеләр әле. Әлбиттә үҙенең туған телен уҡымаһа ла, республиканың дәүләт телдәренең береһен өйрәнеп, урындағы халыҡтың мәҙәниәте, тарихы менән танышҡанда үҙенең милләтенә ҡағылышлы мәғлүмәттәрҙе лә белгәндән уҡыусыларҙа бер-береһенә һәм башҡа халыҡтарға ҡарата ихтирам тойғоһо уяна. Бер ниндәй ҙә кәмһенеү йәки башҡорт балаларында үҙҙәрен бүтәндәрҙән өҫтөн тойоу юҡ. Киреһенсә, һирәкләп булһа ла ойошторолған ошондай параллелдәр үткәреүгә ҡоролған дәрестәрҙә улар бер-береһе менән яҡындараҡ танышып ҡала.

Башҡа коллегаларым да туған тел дәрестәрен шулай мәҙәниәт, тарих һәм әҙәбиәтте бергә үрелдереп уҡытыуҙары тураһында һөйләне. Пермдән килгән уҡытыусы, мәҫәлән, Себер татарына туған тел дәресен уҡытыуҙа урындағы музейҙар менән хеҙмәттәшлек бик һөҙөмтәле булыуын күрһәтте. Дағстандан килгән педагог милли кейем, фольклор, йыр-бейеү менән үрелдереп дәрес үткәреү оҫталығы менән бүлеште. Коми республикаһы уҡытыусыһы башланғыс синыф уҡыусыларының белем кимәлен дөрөҫ баһалау, аңлашылмаған темаларҙы асыҡлау өсөн ҡулайлы контроль эштәр, төрлө күнегеүҙәр тураһында бик фәһемле оҫталыҡ дәресе күрһәтте. Ошолай итеп тәжрибә уртаҡлашыуҙан тыш, сараның дөйөм өлөшөндә туған тел уҡытыусыларын борсоған проблемаларҙы уртаға һалып, фекер алышыу форсаты ла тейҙе. Бөтәһенең дә тәү сиратта балаларҙа туған телдәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу кәмеүе хафаға һала, Рәсәйҙең күп кенә төбәктәрендә туған телдәрен өйрәнергә һәм шул телдә уҡырға теләүселәр һирәгәйә. Күп осраҡта был, әлбиттә, йәмғиәттә шул телдә аралашҡан мөхит булмауына ла бәйле. Бынан тыш, туған рус теле дәрестәре дөрөҫ үткәрелмәүе, яңы әсбаптар талап ителеүе хаҡында ла һүҙ ҡуҙғатылды. Миңә Дағстан педагогтарының ауыл һәм ҡала балаларын бер класҡа туплап уҡытыу тәжрибәһе оҡшаны. Ауыл балалары туған телен яҡшы белә, аралаша бит, ә ҡалала үҫкәндәр уҡыуға ынтылышлы, үҫешкән була. Дағстанда ошоноң менән файҙаланып, тәжрибә рәүешендә уларҙы бергә уҡытып ҡарағандар ҙа инде. Бына шулай, туған тел уҡытыусыларының Бөтә Рәсәй кимәлендәге был конкурсы үҙемде һынау йәһәтенән дә, һөнәри оҫталығымды арттырыу һәм тәжрибә туплау яғынан да бик әһәмиәтле булды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йөрөгән таш шымара, ти. Һәр кемгә лә һөнәри үҫеш өсөн бер туҡтауһыҙ хәрәкәт итеү - фекерҙәш, ижадташ, хеҙмәттәш кешеләрҙең эшмәкәрлеген, йәшәйешен күреп-белеп йөрөү, тәжрибә туплау кәрәк. Был йәһәттән Рәсәй кимәлендә лә, республика сиктәрендә лә педагогтар өсөн мөмкинлектәр сикһеҙ - йыл әйләнәһенә һөнәри конкурстар даими рәүештә ойошторолоп тора. Бына был Бөтә Рәсәй конкурсының да ошо маҡсаттарға өлгәшергә булышлыҡ итеүе күренә.**

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ҠАЙҺЫ УРЫНҒА КИЛЕШӘ?

**Башҡортостанда Өфөлә "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһын ҡуйыу урынын һайлау буйынса онлайн-тауыш биреү башланды. Мемориалды урынлаштырыу өсөн халыҡҡа ике вариант тәҡдим итәләр.**

Ҡала мэрияһынан хәбәр итеүҙәренсә, тәүге вариант - Еңеү аллеяһына ингән ерҙәге майҙансыҡ. Ул Беренсе Май урамында Еңеү паркына ингән урын янында урынлашҡан. Икенсеһе - Ленин һәм Зәки Вәлиди урамдары сатында паркка ингән урындағы майҙансыҡ. Өфө моторҙар эшләү берекмәһе хеҙмәткәрҙәре "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһын Өфөнөң төньяҡ өлөшөндә, атап әйткәндә, Беренсе Май урамы скверында, Еңеү паркына ингән урындың ҡаршыһына ҡуйыу өсөн сығыш яһаны. Стеланы Черниковка биҫтәһенә ҡуйыу, ысынлап та, тарихи әһәмиәткә эйә. Өфө моторҙар заводы тап ошонда эшләгән, һуғыш йылдарында СССР-ҙа сығарылған һәр өсөнсө хәрби самолетта әлеге заводтың двигателдәре торған. Фронтты автомобиль һәм юғары октанлы авиация бензины менән тәьмин иткән нефть эшкәртеү заводтары комплексы ла ҡаланың төньяҡ өлөшөндә урынлашҡан. Мемориал һигеҙ ҡырлы колонналы, иң өҫтә алтын ялатылған Өфө гербы тора, бейеклеге - 20 метр. Авторҙары - Константин Донгузов һәм Дамир Мәғәфүров. Тауыш биреү "Берҙәм Рәсәй"ҙең сайтында онлайн уҙғарыла. 13 сентябргә тиклем һайларға мөмкин.

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ХӘҮЕФҺЕҘЛЕК МӨҺИМ



**Баш ҡала халҡының хәүефһеҙлеге өҫтөнлөклө булыуы Өфө ҡала хакимиәтендә уҙғарылған сираттағы кәңәшмәлә тағы бер тапҡыр һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Баш ҡала мэры Өлфәт Мостафин үткән аҙнала халыҡ күп йыйылып уҙғарылған байрамдар - Ҡорбан ғәйете һәм Һауа-десант ғәскәре көнө сараларында барлыҡ шарттар теүәл үтәлеүе тураһында хәбәр итте. Унан һуң республикала әлегәсә битлек кейеп йөрөү мотлаҡ булыуын телгә алды һәм илдәге эпидемиологик хәл тураһында һуңғы мәғлүмәттәрҙе тыңлағандан һуң, коллегаларына баш ҡала халҡының грипп ауырыуына ҡаршы иммунитетын булдырыуға ҙур иғтибар бүлергә, кешеләргә был турала аңлатыу эштәрен башларға ҡушты.**

Артабан кәңәшмәлә ҡаланың Граждандарҙы яҡлау идаралығы етәксеһе Рафаэль Әхмәтов, Ҡаланың йәшәү эшмәкәрлеген тәьмин итеү буйынса идаралыҡ етәксеһе Антон Тристан, Транспорт һәм бәйләнеш идаралығы етәксеһе урынбаҫары Владимир Петров, Янғын һағы идаралығы етәксеһенең беренсе урынбаҫары Рәсүл Кәримов сығыш яһаны. Владимир Петровтың докладынан һуң Өлфәт Мостафин 1 сентябргә ҡарай Өфөлә йәмәғәт транспорттарында пассажирҙар һаны артыуы күҙәтеләсәген билдәләне һәм тағы бер тапҡыр һәр маршрут буйынса хәүефһеҙлек тәьмин итеүҙе тикшерергә ҡушты. Был теманы дауам итеп, 2020 йылдың тәүге яртыһында баш ҡалала юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген ойоштороу хаҡында Илдар Ханбиков түбәндәгеләрҙе еткерҙе: "Үткән 6 ай эсендә Өфө ҡалаһы территорияһында юл-транспорт ваҡиғалары һаны кәмеүе теркәлгән (785; -32), уларҙа 12 кеше һәләк булған һәм 994-е төрлө кимәлдәге йәрәхәт алған. Быға юлдарҙағы бәрелештәр, йәйәүлеләрҙе һәм юл ситендә торған транспорттарҙы төкөү сәбәп булған. Ваҡиғаларҙың өстән бер өлөшө тиерлек йәйәүлеләрҙе бәреп китеүгә бәйле, һөҙөмтәлә 8 кеше үлгән һәм 227-һе йәрәхәтләнгән". Билдәләнеүенсә, балалар һәм үҫмерҙәр ҡатнашлығында 67 юл-транспорт ваҡиғаһы булған, уларҙа 73 балиғ булмаған бала йәрәхәтләнгән. Был осраҡтарҙың 83,5 процентында ололар ғәйепле тип табылған.

Шул уҡ ваҡытта Өфөлә автомобилдәр һаны арта ғына бара, хатта уларҙың ихаталарҙа йәйәүлеләр өсөн тәғәйенләнгән юлдарҙа теҙелешеп тороуҙарына ла күнегеп бөттөк. Автомобилдәр өсөн махсус парковка урындары булдырыу буйынса Өфөнөң Октябрь һәм Орджоникидзе райондары хакимиәттәре башлыҡтары Сергей Плотников һәм Марат Ғәлиуллин, Калинин районы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Дмитрий Миронов эшләнгән эштәрҙе барланы.

Быйыл ҡала юлдарын төҙөкләндереү эштәре лә яҡшы бара, был турала Өфө ҡала хакимиәтенең Юлдар һәм яһалма ҡоролмалар төҙөү, ремонт идаралығы етәксеһе Радмил Мөслимов доклад яһаны.

Баш ҡалала "Уфаводоканал" предприятиеһының ҡала халҡын һыу менән тәьмин итеү системаһы эшмәкәрлеге ышаныслығын арттырыу буйынса ла даими эш алып барыла. Был турала оператив кәңәшмәлә ойошманың генераль директоры урынбаҫары Ленар Йосопов хәбәр итте. "Һыу сығанаҡтарында һыуҙың сифаты даими рәүештә тикшерелә, кәрәкле химик реактивтар запасы булдырылған. 80 мең өлгөнө тикшереү һөҙөмтәһендә һыуыҡ һыу һәм эсәр һыу тулыһынса санитар ҡануниәт нигеҙҙәренә тап килә", - тип билдәләне Ленар Йосопов.

Оператив кәңәшмә һуңында Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин яңы уҡыу йылы башланырға һанаулы көндәр ҡалыуы хаҡында иҫкәртте һәм ошо арала мәктәптәрҙә лә бөтә төр ремонт эштәрен тамамларға ҡушты.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тырнаҡтар һынһа

❖ Тәндә минераль матдә етмәһә, тырнаҡтар һыныусан. Шуға күрә иртәнсәк тырнаҡтарға лимон һуты һөртөргә һәм күберәк тимер, фосфор булған ризыҡ ашарға кәрәк. Кишер ҙә файҙалы.

### Йөрәк һәм бөйөрҙәр ауыртһа

❖ Бер ҡалаҡ гөлйемешкә (япраҡ йыйылғаны булһа, 100 грамм алына) ҡайнап торған бер стакан һыу ҡойола, 10 минут ҡайнатыла, 12-24 сәғәт төнәтелә. Емештәрен һөҙөп алғас, бер ҡалаҡ бал һалып болғатырға, ҡайнаған һыу өҫтәргә лә була. Көнөнә 2-3 мәртәбә яртышар стакан эселә. Өлкәндәргә лә, балаларға ла файҙалы.

### Күҙгә арпа сыҡһа

❖ 1 балғалаҡ укроп орлоғон яҡшылап төйөп, кәстрүлгә һалырға ла, өҫтөнә 2 стакан һыу өҫтәп, һүрән утта ҡайнатып сығарырға. 5 минут төнәтеп һөҙөргә. Мамыҡты шул төнәтмәлә сылатып, ауыртҡан күҙ ҡабағына көнөнә бер нисә мәртәбә ҡуйып торорға.

### Бала төшөүҙән һаҡланыу

❖ Бала табыуға 3 ай ҡалғас, андыҙ тамырын онтаҡлап (порошок) бал йәки шәкәргә болғап, көнөнә 3 тапҡыр 3 өлөшкә бүлеп ашарға. Шулай уҡ календула һәм һары мәтрүшкә сәскәләрен тигеҙ миҡдарҙа үлсәп, 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, йылыға төрөп 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Бала табырҙан бер ай алда көнөнә 2-3 стакан эсергә.

### Һары һыу ауырыуы

❖ Был ауырыуҙан халыҡ медицинаһы көнөнә 2 ҡалаҡ һуған һуты эсергә кәңәш итә. Уны әҙерләү өсөн уртаса ҙурлыҡтағы ике һуған башын кискеһен йоҡа ғына өлөштәргә ҡырҡып, саҡ ҡына шәкәр һибергә һәм һуғандың һуты сыҡһын өсөн төнгөлөккә ҡалдырырға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Изге Ҡөрьән-Кәримдә буйҙаҡлыҡ хупланмай. Ғүмер бер генә мәртәбә бирелгәнлеге хаҡында ла иҫеңә төшөрөп китәйем, ҡустым. Ҡарт көнөмдә барып йәшәргә "ҡарттар йорто" бар әле, тип үҙеңде тынысландыраһың да ул...*



ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Күскенсе башҡорттарҙың художестволы мәҙәниәтендә хисаплы ҡайыу һәм орнаменталь мотивтарҙың барлыҡҡа килеү мәсьәләһен аныҡ ҡына аңлатып булмай, шулай ҙа. Башҡорт халҡына ҡушылып киткән айырым ырыуҙар, булғарҙар кеүек, Уралға килеүгә тиклем үк был оҫталыҡҡа эйә булыуы мөмкинлеген дә иҫәптән сығарырға ярамай.

Ҡыҙғаныҫҡа күрә, киндергә ҡайыу бөтөү, ғәжәйеп сәнғәт өлгөләрен юғалтыу менән бергә Урал арьяғы декорының стиле лә ҙур үҙгәреш кисерә. XX быуатта көнсығыш башҡорттарында киртләс шыма нағыш техникаһы йышыраҡ ҡулланылған, шуға бәйле геометрик формаһына баҫым яһалған ваҡ, айырымланып торған, һыҙаттар эсенә инделгән орнамент хас булған. Был рәүешле ашъяулыҡ, таҫтамал, ҡатын-ҡыҙ һәм ирҙәрҙең туй кейеме ҡайылған: ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар күлдәге, алъяпҡыс, ҡушъяулыҡ, билбау, ойоҡ һәм сылғауҙар. Был әйберҙәр фабрикала эшләнгән бер төҫтәге туҡымаларҙан тегелгән, йышыраҡ ҡыҙыл төҫтәгеһе ҡулланылған, асыҡ төҫтәге туҡымалар иһә (аҡ, зәңгәр, йәшкелт, һары, алһыу, көл төҫлө), һирәк осраҡта ойоҡ, сылғау, алъяпҡыстар өсөн тотонолған.

Көнсығыш Урал арьяғында хисаплы шыма нағыш традициялары һуңғы осорға тиклем ҡабартма ҡайыу традициялары менән аралаштырып киленгән. XX быуат уртаһында ҡайһы бер ғаиләләрҙә байрам кейеме бер нисә комплект булған: берәүҙәре ҡабартма ҡайыу, икенселәре хисаплы шыма нағыш менән биҙәлгән. Ирҙәр ҡушағындағы геометрик биҙәктәр киртләс шыма нағыш менән дә, һыҙатлы элмә (контурный тамбур) ярҙамында ла ҡайылған.

Әлеге ваҡытта Көнсығыш Урал арьяғында ҡайыу оло йәштәге ҡайһы бер оҫтабикәләрҙең күңел һалып башҡарған шөғөлө булып тора.



*Хисаплы шыма нағыш менән ҡайылған алъяпҡыс (Ҡурған өлкәһе, Сафакүл районы, Оло Солтан ауылы).*
*Т.К. Сурина фотоһы. 1997*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ИР-ЕГЕТ ҠОЛАҒЫНА*

# ҮҘЕҢДЕКЕ - ҮҘЕҢДЕКЕ БУЛЫР...



## йәки Буйҙаҡтарға әйтер һүҙ

**Гәзитебеҙҙең 30-сы һанындағы "Кәләш алмайым, йәки Буйҙаҡ монологы" тип аталған мәҡәләне уҡып, уның авторын ныҡ ҡына йәлләп ҡуйҙым. Ысын. Әле дүртенсе тиҫтәһен ваҡлап барған авторыбыҙ был донъяның иң ләззәтле бер (хатта бер нисә) нәмәһенән мәхрүм дә баһа.**

Беренсенән, был егетебеҙҙең "мине өҙөп ал" тип тулышып бешеп торған сейәләй гүзәлдәребеҙҙең наҙын, йылыһын татып йәшәй генә торған мәле. Әле үҙенең дә ошо нәфис заттарға "ҡаршы торорлоҡ" ҡарыулы сағы бит. "Дары запасы" бөтмәҫ элек, кемделер (иң беренсе нәүбәттә үҙеңде) бәхетле итеүҙән баш тартып, монах һымаҡ ғүмер кисереп йөрөү - эш түгел, тимәксемен. "Нишләп мин монах булайым ти!" тип уның үпкәләргә әҙер тороуын да күҙаллайым. Әлбиттә, "монах" тиеүем шартлы ғыналыр инде. Сөнки буйҙаҡлыҡ тормошон йәшәү рәүеше итеп алған гүзәлдәребеҙ ҙә юҡ түгел. Авторыбыҙҙы тап ана шулар әленән-әле "ауыр хәлдән" ҡотҡарып торалыр хәҙергә. Әммә бындай тормоштоң да һис кенә ыңғай яғын күрмәйем. Әлегәрәк мин кәләш алырға йыйынып йөрөгәнемде ишеткәс (мин үҙем егерме йәштә генә өйләндем), бер ағайҙың: "Дөрөҫ, ҡустым, үҙеңдеке - үҙеңдеке була ул", - тип шаяртҡаны хәтеремдә. Тап шуның һымаҡ, унда-бында-тегендә осраҡлы ғына "һыуһыныңды ҡандырып" йөрөүҙең күркәм яғы юҡтыр, тимәксемен. Сөнки "бер көнлөк" партнерың - һинеке генә түгел бит, бына нимә! Нисек йөрәгең әрнемәҫ... Икенсе яҡтан, төптәнерәк уйлап ҡарағанда, һәр саҡ "ажар айғыр" һымаҡ ғәйрәтле булып та булмай бит. Бишенсе, алтынсы тиҫтәләреңде ҡыуып бара башлаһаң, әсе үкенес тойғолары ла килер үҙеңә. Әммә, һинең күңелеңә ятҡан гүзәл заттар инде һине үҙ итмәй башлауы ла мөмкин. Тормош үҙенекен итә.

Өсөнсөнән, бынамын тигән уландар йә ҡыҙҙарыңды тупылдатып һөйөп ғүмер итмәгәс - был яҡты донъяла йәшәүҙең ни йәме бар? Алтындай ваҡытың үтеп китһә, бала һөйөрҙәй булырһың да, әммә һуң булыр. Терһәк яҡын ғына һымаҡ тойолоп торһа ла, уны тешләп булмағандай, үкенерһең, хатта ер тырнап иларҙай булырһың, әммә үткән гүзәл мәлде ҡабат ҡайтарып булмаҫ. Бала-сағалары буйтым үҫеп килгән ҡатынға өйләнеп, ят балаларҙы тәрбиәләй ҙә башларһың, бәлки, тик улар һинең үҙеңдеке булмаҫ. Улар өсөн һин дә ҡәҙерле атай була алмаясаҡһың - бына нимә!

Изге Ҡөрьән-Кәримдә буйҙаҡлыҡ хупланмай. Ошо хаҡта ла белеп ҡуйыу кәрәк. Ғүмер бер генә мәртәбә бирелгәнлеге хаҡында ла иҫеңә төшөрөп китәйем, ҡустым. Ҡарт көнөмдә барып йәшәргә "ҡарттар йорто" бар әле, тип үҙеңде тынысландырырға тырышаһың да ул. Эш йортта ғына түгел бит әле. "Атай, һиңә кәңәшкә килдем әле, бына шуны нисегерәк итһәм яҡшыраҡ булыр икән?" йә "Әсәй менән икегеҙҙе ял йортона алып барып киләйем тигәйнем", тип, йә иһә хәл белешер өсөн генә булһа ла яныңа килерҙәй, имәндәй ныҡ уландарың булыу шатлығын татығың килмәйме ни?

Бына шулай, буйҙаҡ ҡустым. Бөгөндән үк үҙеңдең алдағы бәхетеңде хәстәрләй башла. Иғтибар ит: күрше йортта ғына кейәүгә сығырғамы-юҡмы, тип икеләнеп, тап һинең үҙең һымаҡ буйҙаҡ тормошон хуп күрергә тырышып, алданып ултырған гүзәлдәрҙән гүзәл зат йәшәй. Хәйер, һин уны үҙең дә күреп йөрөйһөң. Бәлки, үҙенең өлөшөнә тейешле "Алтын аттағы принц"ты көтөп тыныс ҡына йәшәп яталыр ул. Тик тыныс булыу ҡайҙа?.. Ситтән ҡарағандарға ғына шулай тойола. Ә ысынында иһә, уның да һөйөп һәм һөйөлөп йәшәгеһе килә. Нәҡ һинең һымаҡ уҡ, йыш ҡына наҙға һыуһап, ғазаплы төндәрен үткәрә бит ул. Тәне һау-сәләмәт булған был нәфис заттың да бөтмәҫ-төкәнмәҫтәй энергияһы ташып тора. Тик әлеге буйҙаҡлыҡ тигән нәмәнең диуарын емереп сығыуға тәүге аҙам яһарға ғына баҙнат итмәйерәк йөрөй, (һинән айырмалы) намыҫ һаҡлап, егет-елкенсәк менән дә яҡын аралашмай ғүмер итә был күршең. Уның менән тормош ҡорған хәлдә, фатирым бер бүлмәле генә (уныһында ла әсәйем йәшәй), ҡайҙа торорбоҙ, тип уйланаһың? Аңлайым. Баштараҡ, кемдеңдер буш фатирын арендаға алып булһа ла тормош башлаһаң, артабан йәшәйешең яйлап-яйлап үҙ юлы менән тәгәрәп китер. Күптәр шулай башлай. Бына күреп торорһоң: бала-сағағыҙ тыуғас та үҙегеҙҙе донъяла иң бәхетле кеше итеп хис итерһегеҙ. Нисек уны туйҙырырмын, тип һис кенә лә алдан бошонма. "Бүрәнә аша бүре күреү" ҙә яраған эш түгел, һәр сабый үҙ ризығы менән донъяға килә. Үҙеңде үҙең бәхеттән мәхрүм итмә, ҡустым. Бына шул.

"Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла", тигәндәй, ошо мөрәжәғәтем тулыһынса әлеге "күрше гүзәлгә" лә ҡағыла. Икегеҙгә лә Аллаһы Тәғәлә бәхетле тормош насип итһен. Амин!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ЙОРТ ҺАТЫП АЛМА,

## күрше һатып ал



**Журналист һуҡмаҡтары йыш ҡына төрлө ғаиләләр, көнүҙәк проблемалар менән күҙмә-күҙ осраштыра. Бөгөнгө шарттарҙа ла юғалып ҡалмай, бына тигән итеп донъя көткәндәргә һоҡланаһың. Ғибрәт алған күренештәр ҙә етерлек.**

Бер ауылдан ике күршенең әрләшкән ваҡытына тура килеп, кәйеф ҡырылып ҡайтҡайным. Оло ғауғаның шаһиты булыуыма бер уңайһыҙланһам, күрмәмеш булып сығып китеү икеләтә ҡыйын ине. Һуғышыуға тиклем барып етмәһәләр ҙә, ике яҡтан да зәһәр һүҙҙәр яңғыраны. Сәбәбе, әлбиттә, береһенең һыйыры икенсеһененең ҡура артындағы бесәнен ашауҙа ғына түгел ине. Үҙ-ара ыҙғыш байтаҡ йылдар дауам итә, тинеләр.

Ике йорт бер-береһенә һыйынып ҡына ултыра. Араларында ҡасандыр ел ҡапҡаһы ла булған. Тик уны сырмалтып, ғүмерҙә лә һүтеп булмаҫлыҡ итеп тимер сыбыҡ менән бәйләп ҡуйыуҙарынан уҡ күршеләрҙең бер-береһенә инмәүе аңлашыла. Бер-береһенә ялыу яҙышып, олоғайған көндәрендә хатта судҡа тиклем барып еткәндәр. Ауылдаштары әйтеүенсә, йәш саҡтарында бик татыу йәшәгәндәр. Береһенең ире - балыҡсы, икенсеһенеке һунарсы булып, табыштарын уртаҡлашып, йорт эштәрендә ярҙамлашып, береһе яҡҡан мунсаға икенсеһе йөрөп, бик татыу көн иткәндәр. Береһе йорт яңыртҡас ҡына араларынан ҡара бесәй үткән. "Тейешле сикте үткән" тип, буралып бөткән өйҙө һүттертеү менән дә тынысланмағандар...

"Хәҙер тораҡ пункттарҙан килгән ялыуҙарҙың күбеһе күршеһенә зарланыуға бәйле", - тип күптән түгел ауыл биләмәһе хакимиәтендә эшләгән бер хеҙмәткәр аптырап һөйләгәйне. "Күрше хаҡы - Тәңре хаҡы" тигән әйтем Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең хәҙисендә лә теркәлгән. "Йорт һатып алма, күрше һатып ал" тигән хатта боронғолар. Күршең һәйбәт булһа, ишегеңә асҡыс та кәрәкмәй, тигән аҡыл да бар. Ошо аҡылдарҙы иҫкә төшөрмәксе генә булғайным был яҙмам менән...

**Лена БАРЫЕВА.**

**✓ Был урында осман төрөктәре дәүләтен төҙөгән каи ҡәбиләһенең төрөк тарихындағы ролен хәтергә алып була. Әйткәндәй, Ә.-З.Вәлиди Туған үҙенең "Хәтирәләр" китабында үҙ ырыуының ҡайлыларға ҡарауы хаҡында яҙып үтә.**



*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ЙЫЛАН ЫРЫУЫНАН,

## боронғо башҡорт затынан беҙ



Ҡытай хроникаларында хи исемле халыҡтың үҙҙәрен "кучженьхи", тип атай башлауы хаҡында ла әйтелә. "Кучженьхи" атамаһының "кумо-хи" формаһы ла осрай. Тикшеренеүсе П.Пельо быны ҡумыҡ этнонимы менән бәйләһә, С.М. Ахинжанов ошо ҡәүем кешеләренең кимаҡтарҙың ата-бабалары булыу мөмкинлеген фаразлай. Әммә был осраҡта К.Г. Менгестың фекере дөрөҫөрәк булыуы ихтимал: ҡытайҙарҙың kuo-muo, йәғни кумо һүҙе боронғо төркиҙәрҙең куба, ҡоба һүҙенең ҡытайса әйтелешенән барлыҡҡа килеүе бар.

XI быуат телсеһе Мәхмүт Ҡашғариның "Диван лугат ат-турк" исемле һүҙлегендә ҡоба һүҙе асыҡ-көрән, ә Будаговтың "Сравнительный словарь турецко-татарских наречий" тигән китабында асыҡ-һары мәғәнәләрендә ҡулланылыуы теркәлгән. Башҡорт телендә лә ҡоба һүҙе аҡһыл, асыҡ төҫтө белдерә. Тап шуның өсөн дә "Кобчаҡ - кибчак - ҡыпсаҡ " этнонимының рус телендәге "половец" атамаһы (ерән, һары кеше) боронғо төрки телендәге ҡоба һүҙе нигеҙендә барлыҡҡа килеүен билдәләргә була. Был боронғо этноним башҡорттарҙың Ҡобау ырыуы исемендә һаҡланған. Шулай итеп, хәҙерге йылан (ҡытайса хи - һаи, кай) һәм ҡобау ырыуҙары башҡорттарының боронғо ата-балары ҡытай хроникаларында иҫкә алынған Ҡоба-Ҡай (Кумо-хи) этносәйәси берләшмәһе составында йәшәгән, ул VI-VII быуаттарға тиклем һуҙыла. "Синь-Таншу" хроникаһында Суй династияһы осоронда (581- 618 й.й.) кучжендарҙың берләшмәнән сығып, хи халҡының үҙе генә ҡалыуы хаҡында хәбәр ителә. Артабан боронғо ҡобау һәм ҡай ҡәүемдәренең айырым тарихы башлана, әммә бик күп быуаттар уҙғас, уларҙың вариҫтарының бер өлөшө башҡорт исеме аҫтында киң билдәлелек табасаҡ халыҡ составына ингән үҙаллы ырыуҙар булараҡ таныла. Был урында төрки халыҡтарының иң күп һанлыһы - осман төрөктәре дәүләтен төҙөгән каи ҡәбиләһенең төрөк тарихындағы ролен, уның юлбашсыһы, полководецы Эртугрулдың фәһемле яҙмышын хәтергә алып була. Әйткәндәй, Башҡортостан автономияһына нигеҙ һалыусыларҙың иң абруйлыларынан булған Ә.-З.Вәлиди Туған үҙенең "Хәтирәләр" китабында үҙ ырыуының ҡайлыларға ҡарауы хаҡында яҙып үтә.

VI быуатта Ҡай кенәзлеге Төрки ҡағанаты составына инә. "Синь-Таншу" хроникаһында уларҙың тормош рәүеше бына нисек тасуирлана: "Хи биләмәләре төньяҡ-көнсығышта кидандарға, ә көнбайышта тукюестарға сиктәш. Ғәҙәттәре тукюестар менән бер төрлө. Хи кешеләре бер урындан икенсеһенә күсеп йөрөй, үлән һәм һыу етерлек булғанына ҡарап; кейеҙ тирмәләрҙә йәшәйҙәр, арбаларҙан табор ҡоралар. Уларҙың хужаһының торағын һәр саҡта ла 500 ҡораллы кеше уратып тора. Башҡа кешеләре тау үҙәндәрендә таралып, күсеп йөрөй. Яһаҡ түләмәйҙәр. Йәнлек тотоп көн итәләр. Келәйе күп булмаған тары сәсәләр; уны тау итәктәрендәге соҡорҙарҙа һаҡлайҙар. Ағас олоно киҫәгенән киле яһайҙар; балсыҡ йәйпәк бешеренеү өсөн ҡулланыла. Һыуыҡ һыу менән бутҡа ашайҙар. Һуғышырға һәм алыштарҙа ҡатнашырға теләп торалар. Ғәскәрҙәре биш полкҡа бүленә; һәр полк менән бер сыгинь идара итә... Хи кешеләренең аттары тауҙарҙа бик еңел йөрөй; һарыҡтары ҡара".

Тау-урман зонаһында йәшәгән ҡай ҡәбиләһе ярым күсмә тормош алып бара, был осорҙа малсылыҡ уларҙың төп шөғөлө булмай. Улар үҙҙәренең йәйге лагерҙарын арбалар менән уратып алып, көтөлмәгән һөжүмдән һаҡланыу сараһын күрә. Ғәскәрҙәренең биш полктан тороуы уларҙың эске бүленеше менән аңлатыла. Суй династияһы тарихында ошо хаҡта былай тиелә: "Тәүҙә си (хи. - **Ред. иҫк.**) туцзюэларҙың хеҙмәтсеһе булды, шунан улар көсәйеп китеп, биш йәйләүгә бүленде: жухеван, цигэ, мугунь һәм шидэ. Һәр йәйләү башында сыцзинь тора. Биш йәйләү араһында иң уңышлыһы булып Ахуэй ырыуы иҫәпләнә, уға барыһы ла буйһона".

VII быуатта төркиҙәр үҙҙәрен Ҡытай вассалы итеп таный, шул саҡтан бирле ҡай ҡәбиләһе лә Урта донъя (Срединная) империяһына буйһоноп, Тан династияһы һарайына үҙҙәренең илселәрен ебәрә башлай. "Суй-шу" хроникаһында бына ниҙәр әйтелә: "Кумоси һәм кидандар бер-береһенә даими һөжүм итеп тора, кумосилар мөлкәт һәм малдарҙы ҡулға төшөрә һәм быны өсөн бүләктәр ала. Мәйеттәрҙе ҡамыш менән уратып бәйләп, ағасҡа аҫып ҡуялар".

Көнсығыш Төрки ҡағанаты тергеҙелгәс, Ҡай кенәзе Дафу 712 йылда 120 меңлек ҡытай армияһын тар-мар итә, Ҡапаған ҡағанға әсир алынған ике ҡытай сардарын алып килә.

Ҡай ҡәбиләһенең тарихы ла үтә ҡыҙыҡлы. Улар биләгән территория кидандарҙан (боронғо монгол ҡәбиләләре) көнбайыштараҡ, төркиҙәр еренән көнсығыштараҡ була. Ҡытай хроникаларына ярашлы, си-хи (ҡай) ҡәүеме сюнну, йәғни һундарҙың бер айырым тармағы булып тора. Тикшеренеүсе Ю.А. Зуев фекеренсә, ҡай ырыуы ҡытай хроникаларындағы юйвэнь, йәки сюнну-һундарҙың ҡәбиләләр союзына ингән була, әммә улар үҙҙәре һун сығышлы түгел. Ҡытай хроникаларына ярашлы, ҡайлылар кидандарға ҡәрҙәш булып, улар бер-береһенең телен яҡшы аңлай. Кидандар һәм ҡайлылар бер этник тамырҙан булып, бер халыҡтың ике тармағы булыуы ихтимал. Ошо юҫыҡта фекер йөрөткәндә, ҡай һәм ҡатай (кидан сығышлы) ырыуҙары туғандаш ҡәүемдәрҙән бар булған. Ләкин был уларҙың ике үҙаллы халыҡ булыуын инҡар итмәй. Ҡытайҙарҙың "Цидань го чжи" китабында былай әйтелә: " Тәүҙә си (сисцы) халҡы кидань халҡы менән бер тигеҙ мөнәсәбәттә ине, әммә һуңғылары аҙаҡ уларҙы үҙҙәренә беркетте, ә уларҙың ерҙәрендә си, кидань, ҡытай һәм бохай халыҡтары аралашып йәшәй башланы. Си халҡының алты генерал-губернатор идараһы бар, улар идара эштәрен алып бара. Телдәре, ғөрөф-ғәҙәттәре кидандарҙыҡынан айырыла. Улар ер эшкәртеү һәм йәйәү көйө уҡтан атыу оҫталары. Тауҙарға һунарға баралар һәм осоп тигәндәй шәп йөрөйҙәр".

IX быуаттың икенсе яртыһында Үҙәк Азияла кидандар гегемонияһы башлана. Көнсығыш ҡайлылары, ҡаты ҡуллы кидандарҙан һаҡланыр өсөн Ҡытай менән союзға инергә тырыша. Ҡайлыларҙың бер өлөшө Кюйчжу старейшина етәкселегендә Ҡытайҙың төньяҡ тарафындағы таулы территорияға күсеп китә. Шунан башлап ҡай ҡәбиләһе ике төркөмгә - көнсығыш һәм көнбайыш ҡайлыларға бүленеп йәшәй башлай. Тора-бара ҡасандыр үтә ҡеүәтле ҡай ҡәбиләһе составында бер нисә айырымланған этник төркөмдәр хасил була: 1) Уғыҙ конфедерацияһы составындағы "аҡ ҡайлылар"; 2) көнсығыш һәм көнбайыш ҡайлыларына бүленгән төп ҡайлылар; 3) Уран ҡайлылары (уранҡайҙар).

Ҡай ҡәбиләһенең XI быуат башына тиклемге артабанғы тарихы буйынса мәғлүмәт юҡ тиерлек. Ғәрәп авторы, географ Мөхәммәт әл Бируни (973-1048) төрки халыҡтарының Ҡытайҙан Каспий диңгеҙенә тиклемге киң территорияла көн итеүсе халыҡтарын барлап, теркәп ҡалдырған: "Алтынсы климат көнсығыш төркиҙәренән булған лемен ҡай, кун, ҡырғыҙ, кумак, туғыҙ уғыҙ, төркмән ерҙәре, Фараб, хазар иленән башлана".

Тимәк, ҡай ырыуы ошонда күрһәтелгән ҡәүемдәрҙән көнсығыштараҡ урынлашҡан территорияла йәшәгән. Кумак, йәғни кимактарҙың Иртыш буйында көн итеүе билдәле, ҡырғыҙҙар - Енисейҙа, ә кундар һәм ҡайлылар ерҙәре ошо йылғаларҙан көнсығыштараҡ ерҙәргә хужа була. Ғалим В.Ф. Минорский ҡайлы төйәген Байкал күленә яҡын ерҙәрҙә булған, тип иҫәпләй. Географик күҙлектән ҡарағанда, ул замандағы ҡәүемдәрҙе көнсығыштан көнбайышҡа табан ошондай тәртиптә һанап сығырға була: ҡай - кун - шары (сары) - төркмән - уғыҙ - бәшәнәк.

Ғәрәп авторы Шәрәф аз Замана әл Марвази кундарҙың Ҡытай (кидань) ханынан ҡурҡып, ҡай исемле халыҡтың баҫымы һөҙөмтәһендә элекке йәшәгән ерҙәрен ташлап китеүе хаҡында хәбәр итә. Ҡай ҡәбиләһе үтә көсәйеп китеп, Кимак ҡағанатында ҡуҙғалыш тыуҙыра, ҡыпсаҡ, йемек, баяндур кеүек ҡәүемдәрҙе берләштергән ҡағанат тарҡала башлай. Шул уҡ ваҡытта кимактар составында ла ажлад-ажлар исемле ҡәүем булыуы билдәле, был хаҡта Гардизи яҙмаларында иҫкә алына. Ә "аж" һүҙе фарсы телендә йылан мәғәнәһендә ҡулланыла. Тимәк, Евразия тарихында йыланға табыныусы, тотемдары йылан булған халыҡ төрлө телдәрҙә хи (си), ҡай, аж, джилан кеүек этнонимдар барлыҡҡа килеүенә сәбәп булған.

Кимак ҡағанатының тарҡалыуы арҡаһында быға са көнсығыш тарафтарҙа көн иткән күсмә ҡәүемдәрҙең көнбайышҡа табан күслө хәрәкәте башлана. Көнбайышта улар Византия (Рим) империяһы сиктәренә тиклем барып етә. XI быуат ғалимы Мәхмүт Ҡашғари ошо ҡәүемдәрҙең ниндәй тарафтарҙа көн итеүен бына нисек билдәләй: "Беренсе (Византияға яҡын ҡәбилә) - баджанак, унан һуң ҡыпсаҡ, унан - уғыҙ, унан - йемек, унан - башгирт, унан - басмыл, унан - ҡай, унан - ябаку, унан - татар, унан - ҡырғыҙ, һәм былары (һуңғылары) - Синаға яҡын, - барса ҡәбиләләр Румдан көнсығышҡа табан таралып ята". Был осорҙа ҡайлылар Көнсығыш Төркөстан территорияһында йәшәгән басмылдарҙан көнсығыштараҡ урынлашҡан, тип иҫәпләнә.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Башҡорттар артҡа сигенмәй

Ауылдан сыға башлаған совет яугирҙарын немецтар ҙа күреп ҡала, улар атакаға ташлана. Яугирҙарыбыҙ уларға ҡаршы контратакаға бара, ҡул һуғышы һис тынмай. Бер мәлдә кесе лейтенант А. Абдрахманов дошмандың пулемет расчетын юҡ итеп, ошо пулеметтан атакаға ташланған фашистарҙы ҡырып һала. Ошо мәлдән файҙаланып, байтаҡ ҡына боецтар ауыл артынан уҡ башланған арыш баҫыуына сығып өлгөрә. Яралы командир Гәрәй Нафиҡов һәм шулай уҡ ауыр яраланған штаб начальнигы Иван Юренко ла улар менән бергә була. Сержант Ибраһим Ғәбсәләмов, рядовойҙар Зыя Ғәлиәхмәтов һәм Хәким Юлдашбаевтар командирҙарын нисек итеп булһа ла ҡотҡарырға тырыша. Әммә фашистар ҙа уларға төбәп атыуҙарын дауам итә. Полк командиры тәүҙә тубыҡланып, шунан ергә ятып, үҙенең автоматынан дошманға ут аса, бер нисә дошман һалдатын ҡолата. Әммә ул тағы ла яралана, ә инде һалдаттары алып китә башлағас, дүртенсе мәртәбә үлемесле яра ала. Йүгереп килеп еткән Колесник башҡа яугирҙар менән уны арыш баҫыуы буйлап арыраҡ алып китә. Үлер алдынан Гәрәй Нафиҡов үҙенең исемле пистолетын Никон Колесникка бирә, ул ҡорал майорға өлгөлө хеҙмәте өсөн бүләк итеп бирелгән була. Командирҙың кәүҙәһен арыш баҫыуында ашығыс ҡына ерләгәндәй итеп, фашистар тапмаҫлыҡ итеп йәшереп китәләр.

Һәләк булған майорҙы полктың штаб начальнигы ярҙамсыһы, өлкән лейтенант Александр Курмакаев алмаштыра, ул иҫән ҡалған яугирҙарҙы ағаслыҡтың көньяғына, 1-се һәм 4-се эскадрондар урынлашҡан позицияларға алып сыға.

Ә 11 июлгә ҡаршы төндә 275-се полк командиры Таһир Кусимовҡа һәм 313-сө полк командиры Ғариф Макаевҡа комдив Шайморатовтан яңы приказ бирә: "Лобановка ауылын ҡайтанан алырға һәм һәләк булған майор Нафиҡовтың кәүҙәһен алып сығырға". Төнгө алышта шайморатовсылар яратҡан командирҙарының үлеме өсөн дошмандан үс ала. 313-сө кавполктың 3-сө эскадроны командиры, өлкән лейтенант Әнүәр Хатип улы Насыров ошо төнгө налетты бына нисек хәтерләй: "Төн ҡараңғылығында 300-400 метр үттек. Әммә немецтар беҙҙе һиҙеп ҡалып, пулеметтарҙан трассерлы пулялар менән көслө ут асты. Беҙ ҡыйыу рәүештә алға табан барҙыҡ. Эскадрон подразделениеларының береһе бер бесән эҫкертенә юлыҡты, унда дошмандың уҡсы батальоны штабы маскировкаланып ҡуйылған булған. Беҙҙең ҡулға эләккән ҡиммәтле документтарҙы, башҡа трофейҙарҙы дивизия штабына ебәрҙек". Төнгө бәрелештә Лобановка ауылында байтаҡ ҡына фашистың ғүмере ҡыйыла, ә майор Нафиҡовтың кәүҙәһе, үҙебеҙҙең частар урынлашҡан позицияларға алып ҡайтылып, хөрмәтләп ерләнә.

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

# РЕДАКЦИЯЛАРҒА ШЫЛТЫРАТМАЙҘАР,

## Тимәк, хәбәрселәр ҡыҙыҡлы мәҡәләләр

**"Беҙҙең быуындың иң шәп журналисы, күптәргә остаз, уҡытыусы булған шәхес һәм дөйөм алғанда ла бик белемле, уҡымышлы, юғары интеллектлы кеше менән осрашыу һеҙҙең өсөн бер һөнәри дәрес буласаҡ", - тине баш мөхәрриребеҙ Гөлфиә Янбаева уның хаҡында. Һәм бына беҙ редакцияға ғүмерен журналистикаға бағышлаған һүҙ оҫтаһы, ике тиҫтәләгән китаптар авторы, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Шәһит Хоҙайбирҙин һәм Әбйәлил районының Ким Әхмәтйәнов исемендәге премиялар лауреаты, Салауат Юлаев орденына лайыҡ булған танылған публицист Марсель ҠОТЛОҒӘЛЛӘМОВты саҡырып, уның журналислыҡ һабаҡтарын тыңланыҡ. Журналистарға ғына түгел, уҡыусыларыбыҙға ла ҡыҙыҡлы һәм фәһемле булыр был әңгәмә, тип ышанабыҙ.**

**Марсель Әксән улы, һеҙ күптән хаҡлы ялда, әммә гәзит биттәрендә һаман да мәҡәләләрегеҙ баҫылып тора. Бындай әүҙем эшмәкәрлек ҡайҙан килә? Һәм яҡшы журналист булыу өсөн ниндәй төп ҡағиҙәләрҙе белергә кәрәк?**

- Унын ҡағиҙәләре - һөнәренде яратыу, белеү һәм уға тоғро ҡалыу. Һеҙ минән ниндәйҙер айырым ғына күрһәтмәләр, инструкциялар көтмәгеҙ. Мин инде үткән быуат публицисы, бәлки, бөгөнгө көнгә ауаздаш та булып етмәйемдер. Һәм журналистика ла - шул уҡ яҙыусылыҡ, уҡытыусылыҡ, артислыҡ кеүек үк, тәбиғи талант икәнен белеү кәрәк. Уны эш, һөнәр итеп кенә ҡабул итеү ярамай.

Мин үҙ эшемдә һауалағы ҡош, һыуҙағы балыҡ кеүек булдым. Пенсияға сыҡҡандан һуң да әүҙем яҙыштым. Бер туҡтаманым. Эш араһында рус һәм башҡорт телдәрендә 24 китап сығарҙым. "Осҡон" район гәзитенең баш мөхәррире, "Совет Башҡортостаны" гәзитендә үҙ хәбәрсе, баш мөхәррир урынбаҫары, партияның Башҡортостан өлкә комитеты секторы мөдире, Башҡортостан телевидениеһының баш мөхәррире, "Известия Башкортостана" гәзитенең баш мөхәррире, республика матбуғат һәм киң мәғлүмәт министры урынбаҫары булып эшләгән осорҙарым булды, төрлөһөндә төрлө яуаплылыҡ, вазифалар һалынды, әммә ҡулымдан ҡәләм төшөрмәнем. Арып та, ялҡып та китәм һымаҡ бөгөн, тик күңел һаман яҙышыуҙы талап итә.

**Журналистикаға ниндәй юл алып килде һеҙҙе? Ябай ауыл балаһында ҡайҙан тыуҙы бындай теләк-амбициялар? Публицистика - ул үҙең йәшәгән заман өсөн генә ҡыҙыҡлы жанр түгелме? Ғүмере бармы ул был жанрҙың? Шул уҡ ваҡытта һеҙҙең мәҡәләләр нәфис әҙәбиәт өлгөләре лә була ала һымаҡ...**

- Бишенсеме, алтынсымы класта уҡығанда район гәзитендә тәүге мәҡәләм баҫылып сыҡты. Клуб мөдиренең эшен тәнҡитләп яҙғанмын инде. Шул мәҡәләгә ғорурланып, ауыл буйлап велосәпиттә елдерәм. Ә клуб мөдире үҙемдән бер-ике генә йәшкә ҙурыраҡ ҡыҙыҡай. Бик ныҡ үпкәләне. Аҙағыраҡ, аҡыл ултыра төшкәс, юҡҡа ғына рәнйеткәнмен шул ҡыҙҙы, юҡ менән булғанмын, тип, был эшем өсөн үкендем. Публицистикаға килеү шундай юҡ ҡына материалдарҙан башлана икән. Тота килеп оҫтарып һәм аналитик мәҡәлә яҙа һалып булмай. Унын өсөн оҫталыҡтан тыш, тәжрибә лә, донъяға ҡарашындың формалашыуы ла, ниндәйҙер йәштәрҙе ашатлау, шәхес булараҡ үҫеү ҙә фарыз. Мин үҙем һикһәненсе йылдарҙың урталарында ғына етди публицистикаға өлгәрәп еттем.

Башҡорт ауылында тыуып үҫкән һәм тик башҡортса ғына аралашып йәшәгән кешемен. Бәләкәй саҡта беларус милләтенән булған еңгәм бар ине. Һуғыш ваҡытында фашистарҙан ҡасып, беҙҙең яҡҡа килеп ҡалған ғаиләлә үҫкән ҡыҙ. Беҙгә май заводына эшкә юлланған. Әсәйемдең ҡустыһы өйләнде уға. Ап-аҡ йөҙлө, аҡ сәсле сибәр еңгә. Сатан ағайыма тормошҡа сығып, башҡорттар араһында ерегеп, дүрт малай, ике ҡыҙ үҫтерҙе. Шул Маруся еңгәм бәләкәйҙән мине руссаға өйрәтте, диктант яҙҙырҙы, китаптар уҡытты. Еңгәмдең үҙен яҡын күреү, уға мөкиббән булыу миндә рус теленә лә һөйөү уятҡан, күрәһең, һуңынан рус телен үҙаллы махсус өйрәндем. Һәм рус теле миңә еңел бирелде. Был үҙе үк күп кенә мөмкинлектәрҙе лә асты. Хатта китаптарымды ла русса яҙҙым. Тел белеү бары тик файҙаға ғына, әммә эш, асылда, ниндәй телдә түгел, ә нимә хаҡында яҙыуында ул.

Мине берәү ҙә "шуны яҙ, быны яҙ" тип мәжбүр итмәй, задание бирмәй. Темаларҙы үҙем һайлайым. Үҙемә оҡшаған, күңелемә ятҡан темаларҙы ғына һайлайым.

Яҙышыу өсөн белем кәрәк. Юғары белем әле бер нимә хаҡында ла һөйләмәй, ул белемгә гарантия түгел. Өйөндә телефон китабынан башҡа әсбап тотмаған, телевизорҙан башҡа мәғлүмәт инеше булмаған әҙәмдәр белемле була алмай. Китап уҡыу минең сир булды. Еңгәгеҙ ҙә шулай ине. Йоҡлар алдынан мотлаҡ икебеҙ ҙә бер-ике сәғәт китап уҡымайынса ятмай инек.

Публицистикаға килгәндә инде, публицистика - ул нәфис әҙәбиәткә юл ярыусы жанр. Был өлкәне "Үҙ заманын яҙыусы" тип ябай ғына итеп нарыҡлаһалар ҙа, ул әҙәби стилдең, әҙәбиәттең нигеҙе лә икәнде онотмайыҡ. Әммә публицист менән әҙәби әҫәр яҙыусы икеһе ике донъя, быларҙы бутап ташларға ла ярамай. Әҙәби әҫәрҙә публицистик мотив өҫтөнлөк итә икән, тимәк, был яҙыусы оҙаҡ журналист булып эшләгән һәм шул ҡалыпҡа инеп ултырған, әҫәрҙә арбап алып китеү маһирлығы тыумай, ул мәғлүмәт кенә бирә. Бындай әҫәрҙәрҙең актуаллеге билдәле ваҡытҡа ғына тәғәйенләнгән, заманы үтте икән, уның ҡиммәте лә юғала.

Публицист менән әҙәби әҫәр тыуҙырыусылар был ике арала сикте белергә һәм торорға тейеш, тип тағы ла бер ҡабатлап әйтәм. Юғиһә, хисле һәм эмоциональ яҙыусылар, шағирҙар мәҡәлә яҙғанда артыҡ йор һүҙләнеп, фантазияларын ҡушып ебәрә торған. Күп кенә миҫалдар ҙа килтерә алам, әммә берәүҙең дә йөҙөн йыртҡым килмәй. Ошо тәртипте үҙ сиктәрендә тота белеү ҙә оҫталыҡ ул.

**Тәбиғәт тарафынан яҙыу һәләте бирелеү, белемгә ынтылыш, маҡсатлы булыу, хеҙмәтеңде һөйөү - һеҙҙең журналистика юлы, шулай бит? Ошо юл хаҡында тәфсирләберәк һөйләгеҙ әле...**

- Унынсыны Әбйәлил районының Амангилде ауылы мәктәбендә тамамланым. Мәктәптең етди гәзитен дә, сатирик гәзитен дә - бөтә стена гәзиттәрен дә бер үҙем сығара торғайным. Унан район гәзитенә лә яҙып өлгөрәм. Мине берәү ҙә көсләп, өгөтләп эшләтмәй. Үҙ белдегем һәм теләгем менән башҡарам быларҙы. Шул уҡ ваҡытта комсомол ойошмаһының да етәксеһемен.

Башҡорт дәүләт университетының тарих һәм филология факультетына маҡсатлы рәүештә килдем. Беҙгә шундай ҙур бәхет эләкте - Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың ҡулында уҡыныҡ. Уны бер изге йән һымаҡ итеп күрҙек. Һәм ул ысынлап та бик бөйөк кеше, быуатҡа бер генә тыуа торған аҡыл эйәһе ине. Тотош униферситетҡа яңғыҙ профессор булды. Үҙе полиглот. Немец, инглиз, мадьяр телдәрен белде. Башҡорт теленең сағыштырма грамматикаһы буйынса беҙгә лекция һөйләй. Шул тиклем мауыҡтырғыс итеп һөйләй, яҙырға ла онотоп, ауыҙҙы асып тыңлайбыҙ. Ә ағай ҡаты һәм талапсан булды, еңел-елпелекте, яуапһыҙлыҡты яратманы. Ялҡауҙарҙы әрләй торған бер ҡыҙыҡ һүҙе лә булды, "Виртуозно нахалдар" тиер ине бик көйһә. Студенттар менән бер ҡатар уҡыған аспиранттарына ла эләгә ине был шелтә. Ә унын ул саҡтағы аспиранттары Марат Зәйнуллин, Марат Минһажетдинов ағайҙар, улар үҙҙәре беҙҙең өсөн ҙур кешеләр ине.

Өсөнсө курста "Ленинсы" һәм "Ленинец" гәзиттәрендә мәҡәләләрем баҫыла башланы. Университетты яҡшы ғына тамамланым, ғилми етәксем Кирәй Мәргән ине. Диплом яҙырға өс ай ваҡыт бирелһә, мин уны ике аҙнала яҙып та бөттөм. Комиссия ағзалары ла бик маҡтаны ла, йүнәлтмә буйынса Йылайыр районына уҡытыусы итеп ебәрмәксе иттеләр. Ә минең күңел тыуған яҡҡа тарта. Үҙ белдегем менән ҡайтып китеп, Әбйәлил район гәзитендә эш башланым. Унда кадрҙар етешмәй, башта ауыл хужалығы мөдире итеп ҡуйҙылар ҙа, бер нисә айҙан баш мөхәррир урынбаҫары итеп ултырттылар. Шунда еңгәгеҙҙе осраттым бит, бәхеткә. Ул комсомол райкомында бүлек

*Публицистикаға килгәндә инде, публицистика - ул нәфис әҙәбиәткә юл ярыусы жанр. Был өлкәне "Үҙ заманын яҙыусы" тип ябай ғына итеп нарыҡлаһалар ҙа, ул әҙәби стилдең, әҙәбиәттең нигеҙе лә икәнде онотмайыҡ. Әммә публицист менән әҙәби әҫәр яҙыусы икеһе ике донъя, быларҙы бутап ташларға ла ярамай. Әҙәби әҫәрҙә публицистик мотив өҫтөнлөк итә икән, тимәк, был яҙыусы оҙаҡ журналист булып эшләгән һәм шул ҡалыпҡа инеп ултырған, әҫәрҙә арбап алып китеү маһирлығы тыумай, ул мәғлүмәт кенә бирә. Бындай әҫәрҙәрҙең актуаллеге билдәле ваҡытҡа ғына тәғәйенләнгән, заманы үтте икән, уның ҡиммәте лә юғала. Публицист менән әҙәби әҫәр тыуҙырыусылар был ике арала сикте белергә һәм торорға тейеш, тип тағы ла бер ҡабатлап әйтәм. Юғиһә, хисле һәм эмоциональ яҙыусылар, шағирҙар мәҡәлә яҙғанда артыҡ йор һүҙләнеп, фантазияларын ҡушып ебәрә торған.*

***✓ Иртәнге туғыҙҙан киске сәғәт бишкә тиклем генә журналист булып эшләү һеҙҙән һөнәрмән яһай алмаясаҡ. Һеҙ ялда ла, өйҙә лә, ҡунаҡта ла, телевизор ҡарап ултырғанда ла эҙләнеп, ҡыҙыҡһынып, күҙәтеп йөрөргә өйрәнегеҙ.***

# КИЛМӘЙҘӘРМЕ?

## ижад итә белмәй.

> ***Әле лә ҡайһы бер гәзиттәргә материал алып барһам: "Ағай, тәнҡит-фәлән, ҡаты һүҙ юҡмы?" - тип һорашып китәләр. "Э-эй, ҡуян икәнһегеҙ, ҡустылар!" - тип ҡуям үндәйҙәргә. Бындай баҫмалар менән хеҙмәттәшлек итеү ҡыҙыҡ түгел һәм уларҙы уҡыу ҙа ҡыҙыҡ булмай ул. Ҡоро маҡтауға, хуплауға һәм ҡабартып тәфсирләүгә ҡоролған мәҡәләләр журналист булып йөрөгәндең дә, баш мөхәррирҙең дә баһаһын күрһәтеп тора. Гәзиттәр - улар ойоштороусы, дәртләндереүсе, сәмләндереүсе, тәнҡит аша булһа ла алға һөрөүсе булырға һәм унда яҙылғандар уҡыусыла реакция тыуҙырырға тейеш. Бөгөн, белеүемсә, редакцияларға берәү ҙә мәҡәлә буйынса шылтыратмай, килмәй икән. Хатта әрләүселәр ҙә юҡ, ти. Был битарафлыҡ халыҡ гәзит уҡымауҙан ғына түгел, ә хәбәрселәрҙең һөнәрмән, һәләтле, шауҡымлы, белемле, ҡыҙыҡлы мәҡәләләр ижад итә белмәүенән дә килә.***

мөдире икән. Һөйкөмлө, аҡыллы ҡыҙыҡай. Беренсе тапҡыр күргәс тә үк башыма: "Бына ни өсөн мин бында ҡайтҡанмын", - тигән уй килде. Мин яҙмышымды эҙләп килгәнмен, талаптарға ҡаршы барып, ошо аҙымды яһағанмын, тимәк. Әгәр Йылайыр яғына китеп барһам, мөхәббәтһеҙ ҡала инем. Илле йылдан ашыу матур йәшәгән ғаилә булдыҡ, балалар үҫтерҙек. Ҡатыным 47 йыл мәктәптә математика уҡытты.

Унан мине район гәзитенә баш мөхәррир итеп үрләттеләр. Был минең етәкселек вазифаһындағы тәүге сирҡаныҫым ине. Егерме дүрт кенә йәштәмен. Район хакимиәтендәге фронтовик ағайҙар "Булдыраһың" тинеләр ҙә яуаплылыҡ һалдылар һәм уларҙың ышанысын аҡларға тура килде. Ул заманда училище тамамлап килгән егерме йәшлек егет-ҡыҙҙар иңендә тотош мәктәптәр, медпункттар ята ине. Мин үҙем баш мөхәррир саҡта ла, кадрҙар таба алмай, Аҫҡар урта мәктәбен тамамлаған бер нисә һәләтле баланы ҡабул иттем. Һин дә мин эшләнеләр. Үҫтеләр. Береһе район хакимиәте башлығы урынбаҫары, икенсеһе үҙәкләштерелгән китапханалар мөдире булып китте һуңынан. Йәштәргә ышанырға кәрәк. Беҙҙең заманда тап шундай йәштәрҙе үҫтереү, уларға яуаплылыҡ һалыу принцибы бар ине. Йәғни, мин үҙем дә шундай мәктәп уҡыусыһы булдым. Ғүмер буйына уҡыным һәм ғүмер буйына өйрәндем. "Мин барыһын да беләм!" тигәнде бөгөн дә әйтмәйем әле.

**Һеҙҙе был өлкәлә үҫтергән, остаз булған кешеләр кемдәр улар?**

- Егерме йыл "Совет Башҡортостаны"ның баш мөхәррире булған Абдулла Исмәғилев ағай ҡулы аҫтында хеҙмәт итергә тура килде. Уның миңә ышанысы, йөҙөп йөрөп яҙырға, үҙ фекерҙәремде сығарырға рөхсәт биреүе ижадыма оло юл асты. Гәзит аҙнаһына алты тапҡыр сыҡты һәм рәсми органдарға, партия өлкә комитетына бәйле булғас, тәүлек әйләнәһенә эшләнек. Редакциянан төн ауыштырып ҡына сығабыҙ, һирәкләп киске һигеҙ-туғыҙҙарҙа эште тамамлап ҡайта алһаҡ, шатлана инек.

Мостай Кәрим менән яҡындан аралаштым. Ул мине мәрхүм улы Илгизгә оҡшата торғайны. Рус журналистикаһында "Советская Башкирия"ла баш мөхәррир урынбаҫары булып эшләгән Марсель Ғәфүров, "Советская Россия"ның үҙ хәбәрсеһе Мәргән Мырҙабәков үрнәк булды. Василий Перчаткин, Серафим Вайсман, Лидия Нечаева кеүек журналистарҙан да өлгө алдым. Ғөмүмән, үҙ фекере булған һәм мәҡәләһендә, яҙғандарында мәғлүмәт биреп кенә ҡалмаған, ә анализ да яһай алған ҡәләмдәштәрҙең барыһын да уҡыным, ижадтарын күҙәтеп барҙым.

Беҙҙең дәүерҙә тәнҡит тигән төшөнсә булды. Һәм бик көслө булды ул. Редакцияларҙа мәҡәләләрҙе баһалау мотлаҡ була торғайны. Туғыҙ йыл "Известия Башкортостана" гәзите редакцияһын етәкләнем, көн дә иртәнге һигеҙҙә башҡа редакцияның баш мөхәррирҙәре менән гәзиттәребеҙ һәм ундағы тотоп тороусы мәҡәләләр тураһында хәбәрләшеп алабыҙ. Ситтән күҙ һалыусыларҙың, баһалай белеүселәрҙең фекерен ишетеү бик мөһим ине. Республика эсендәге генә түгел, хатта Ташкент гәзите менән дә бер-беребеҙҙе күҙәтеп, фекеребеҙҙе белдереп торҙоҡ. Остаз булған кешеләр - улар беҙ ҡарап өйрәнергә теләгәндәр генә түгел, ә һинең ижади процесыңа булышлыҡ итеүселәр ҙә бит.



**Журналист менән баш мөхәррирҙең хеҙмәти мөнәсәбәте нисек ҡоролорға тейеш? Баш мөхәррир ҡуша - журналист эшләйме, әллә журналист тәҡдим итә - баш мөхәррир ҡабул итә йәки итмәйме?**

- Баш мөхәррирҙең ҡушҡанын, талап иткәнен көтөп ултырыу шәп түгел, әлбиттә. Һөнәренә эш урыны итеп кенә ҡараған, үҙаллы ижад итә алмағандарҙың ҡылығы был. Һин баш мөхәррирге үҙең нимәләрҙер тәҡдим ит, яҙғандарындың ҡыҙыҡлы һәм файҙалы булыуын дәлилла. Баш мөхәрриребеҙ Абдулла Исмәғилев, талапсан булғанда ла, журналистарының теләгенә ҡаршы килмәне, сикләмәне, киреһенсә, ана шулай үҙ белдегебеҙ менән яҙышҡанды, темалар алып килгәнде хупланы. Һине ниндәйҙер бер әйбер тулҡынландырмай йәки шатландырмай икән, яҙған мәҡәләндең рәте булмай. Кешенең хисләнгәндә ысынды, хаҡты яҙа. Битарафлыҡтан ысын ижад тыумай. Ижад тик хистәр ҡайнауында ғына яралa ала. Яҙғандарың өсөн тәнҡит, әр булырға мөмкин осраҡта ла яҙырға кәрәк. Әгәр һин дөрөҫтө яҙаһың икән, яуап биреүҙән ҡурҡма. Бына мине ғүмер буйына түпәләнеләр. Өлкә комитет та, етәкселәр ҙә, яҙғандарым менән килешмәгәндәр ҙә. Ләкин был мине сыныҡтырҙы, тағы ла сәмлерәк, таҫыллыраҡ итә генә барҙы.

Әле лә ҡайһы бер гәзиттәргә материал алып барһам: "Ағай, тәнҡит-фәлән, ҡаты һүҙ юҡмы?" - тип һорашып китәләр. "Э-эй, ҡуян икәнһегеҙ, ҡустылар!" - тип ҡуям үндәйҙәргә. Бындай баҫмалар менән хеҙмәттәшлек итеү ҡыҙыҡ түгел һәм уларҙы уҡыу ҙа ҡыҙыҡ булмай ул. Ҡоро маҡтауға, хуплауға һәм ҡабартып тәфсирләүгә ҡоролған мәҡәләләр журналист булып йөрөгәндең дә, баш мөхәррирҙең дә баһаһын күрһәтеп тора. Гәзиттәр - улар ойоштороусы, дәртләндереүсе, сәмләндереүсе, тәнҡит аша булһа ла алға һөрөүсе булырға һәм унда яҙылғандар уҡыусыла реакция тыуҙырырға тейеш. Бөгөн, белеүемсә, редакцияларға берәү ҙә мәҡәлә буйынса шылтыратмай, килмәй икән. Хатта әрләүселәр ҙә юҡ, ти. Был битарафлыҡ халыҡ гәзит уҡымауҙан ғына түгел, ә хәбәрселәрҙең һөнәрмән, һәләтле, шауҡымлы, белемле, ҡыҙыҡлы мәҡәләләр ижад итә белмәүенән дә килә.

**Һеҙ совет осоронда, коммунистар партияһы ваҡытында формалашҡан һәм шул идеяларға хеҙмәт иткән кеше. Унан һуңғы һынылыш йылдарын нисек кисерҙегеҙ һәм бөгөнгө тормошҡа яраҡлаша алдығыҙмы? Нимәләр хаҡында яҙаһығыҙ бөгөн?**

- Мин Башҡорт дәүләт университетында дүртенсе курста уҡығанда уҡ партияға индем, комсомол булдым, унда ла яуаплы вазифалар биләнем, әммә ул идеяға хеҙмәт итмәнем. Мәскәүҙә юғары партия мәктәбенең журналистика бүлеген тамамлап ҡайтҡас, өлкә комитетҡа матбуғат секторы етәксеһе итеп эшкә алғайнылар, ике йылға етте түҙемлегем. Ундағы бюрократтар хеҙмәте күңелемә хуш килмәне. Ахырҙа, өлкә комитеттың идеология буйынса секретары Таһир Ахунйәновҡа: "Ҡайтарығыҙ мине ҡабаттан гәзиткә..."- тинем. Ул аңланы - ҡайттым. Ҡыҫҡа ғына итеп әйткәндә: мин үҙ йөрәгемә генә хеҙмәт итеп йәшәнем һәм йәшәйем.

**Һеҙҙең хәтирәләрҙә башҡорт, татар, рус журналистарының эскерһеҙ дуҫлығы, хеҙмәттәшлек, дуҫлыҡ сағыла. Милләт-ара айырмалыҡ, ниндәйҙер ошо юҫыҡтағы сыйыштар, конфликттар булманымы?**

- Беҙҙең заманда улайтып милли конфликт сығарыусыларҙы иң йүнһеҙ кеше тип иҫәпләйҙәр ине. Халыҡты, милләттәрҙе бер-береһенә ҡаршы ҡуйыу эске комплекстары булған, үҙен башҡаларҙан өҫтөн тип һанаған йәки башҡа төрлө яҡтан үҙен күрһәтә алмағандарҙың ғына эше. Ябай халыҡ борон-борондан үҙ-ара татыу йәшәгән, бер-береһен айырмаған. Был айырыу һәм сәкәшеүҙәр интеллигенцияның ауырыуы.

Мин бала саҡта Әбйәлил районында бөтә белгестәр, табиптар, зоотехниктар, уҡытыусылар, агрономдар сит милләт вәкилдәре ине. Килгән ҡыҙ-ҡырҡынды ағайҙар алып ҡалды. Беҙ уҡымышлы, белемле булған был ситтән килеүсе сит милләт вәкилдәренә хөрмәт менән ҡарап өйрәндек. Улар ҙа башҡорттоң йолаларын, тәртиптәрен боҙмай, бер нәмә менән айырылмай, киреһенсә, кеселекле булып, матур аралашып йәшәп китәләр ине.

Бер милләт тә беҙҙең телде, мәҙәниәтте, рухты бөтөрә лә, кәметә лә алмай. Беҙ уларҙыҡына зыян итә алмаған кеүек. Шунлыҡтан, ғәйепте икенселәргә япһарырға түгел, ә үҙебеҙгә белемле, ҡыйыу, егәрле, әүҙем булырға кәрәк. Телдәрҙе өйрәнергә, үҙ һөнәреңдә профессионал булырға, үҙ милләтең, республика сиктәре менән генә сикләнмәҫкә, ә үҫергә, ил, донъя масштабына үрелергә кәрәк. Белемле кешене бөтә ерҙә лә, ниндәй халыҡтар ҙа һанлай.

**Журналист булараҡ, һеҙҙәге иң көслө сифат ниндәй тип уйлайһығыҙ?**

- Ҡыҙыҡһыныусанлыҡ. Бер ваҡытта ла ҡыҙыҡһыныуҙан, эҙләнеүҙән туҡтаманым. Был сифатым арҡаһында яҡшы эштәр ҙә, күңелһеҙ ваҡиғалар ҙа булып торҙо, әммә донъя менән, кешеләр менән, хәл-ваҡиғалар, тарих, серҙәр һәм башҡалар менән ҡыҙыҡһыныуҙан туҡтаманым.

Иртәнге туғыҙҙан киске сәғәт бишкә тиклем генә журналист булып эшләү һеҙҙән һөнәрмән яһай алмаясаҡ. Һеҙ ялда ла, өйҙә лә, ҡунаҡта ла, телевизор ҡарап ултырғанда ла эҙләнеп, ҡыҙыҡһынып, күҙәтеп йөрөргә өйрәнегеҙ.

Журналист үҙенең геройҙарын яратырға, хатта уларға ғашиҡ булырға тейеш. Шунһыҙ, кешеләр яҙмышы, уларҙың хеҙмәте һәм тарихы хаҡында ҡыҙыҡлы яҙмалар тыуҙырып булмай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәҡәләләренән үк һиҙелеп торған ғорур характер, тәрән фекер йөрөтә белеү, белем һәм ҡыйыулыҡ - бына ошоларҙы тойҙом мин ағай менән аралашҡанда. Һәм нисәнсе тапҡыр ошо сифаттарҙың ижадсы яҙмалары аша уҡыусыға ла йоғонто яһағанын аңланым. Ысынлап та бер һабаҡ булды был осрашыу.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**✓ Апайыбыҙҙың бәхетенән өлөш алып, уның йылыһында йылынып, ҡот, йәмгә ҡойоноп йәшәп ятҡан бер көндө Зилә апайыбыҙ эшкә килмәне лә ҡуйҙы. Уның урынына өсөнсө ҡаттан берәүҙе төшөрөп ултырттылар.**

# Хыялый

Лена ХӘЙРУЛЛИНА

(Хикәйә)



–Һаумыһығыҙ, ҡыҙҙар! - Эш сәғәте башланып та өлгөрмәҫтән кабинетыбыҙға ҡосаҡҡа һыймаҫлыҡ гөлләмә тотоп бер егет килеп инде. - Ошо бүлмәләге иң сибәр ҡатынға тапшырырға ҡушҡайнылар.

Ҡаршымда ултырған Зилиә менән берберебеҙгә ҡарашып аптырашабыҙ.

- Һиңәләр, - тим Зилиәгә, сөнки үҙем бер кемдән дә сәскә көтмәйем. - Йә Миҙхәтовнаға.

Хеҙмәттәшем гөлләмә араһына ҡыҫтырылған яҙыуҙы тартып сығара:

- Шуға инде. Кемгә булһын...

Ундағы "Донъялағы иң сибәр ҡатынға. Үбәм! Яратам!" тигән һүҙҙәрҙе икәүләп бер тауыштан ҡыҫҡырып уҡыйбыҙ ҙа һәр ҡайһыбыҙ үҙ урынына барып ултыра. Компьютерымды ҡабыҙып ҡуйһам да, эшкә тотона алмай бер булам. Күҙҙәрем һаман күрше өҫтәлдә хуш еҫ бөркөп ятҡан теге гөлләмәнән айырыла алмай. Бигерәк тә анау "Донъялағы иң сибәр ҡатынға" тигән һүҙҙәре әллә ниндәй хыялый уйҙарға тарыта, ә "Үбәм! Яратам!" тигәне иһә, бер туҡтамай күңел төбөн ҡытыҡлай. Ысын мөхәббәттең барлығына тамам ышанып, шул гөлләмәне үҙемдекеләй ҡабул итеп, иләҫ-миләҫләнеп ултырған еремдән Зилиәнең тауышы ысынбарлыҡҡа һөйрәп ала:

- Хәтәр, ивет? Миҙхәтовнаны әйтәм. Донъялағы иң матур ҡатын, имеш.

Хеҙмәттәшемдең тауышында көнсөллөк ноталары тойоп, йылмайып ҡуям. Тимәк, тим, кем өсөндәр ул иң матуры. Һөйләшеүебеҙ ошо урында өҙөлөп ҡала, сөнки кабинетҡа Зилә Миҙхәтовна үҙе килеп инә. Инеү менән теге гөлләмәне ҡосағына алып, онотолоп еҫкәй, ундағы һәр сәскәне тотоп ҡарай, ҡағыҙҙағы яҙыуҙы уҡығанда иһә, йәш ҡыҙҙар ише хисләнеп, шашып-шашып көлөп ҡуя. Беҙ уның был ҡыланыштарынан эшебеҙҙе генә түгел, бөтә донъябыҙҙы онотоп, һәйкәл ише ҡатҡанбыҙ. Ошо минутта, моғайын, Зилиә лә, минең кеүек, бар бит ул ер йөҙөндә бәхетле ҡатындар, тип уйлап ҡуйғандыр.

Сәскәләрҙе һыулы вазаға урынлаштырып, бер аҙ тынысланғас, башты баҫып эшкә керешәбеҙ.

- Миҙхәтовна, кемдән ул был сәскәләр? - тип, тынлыҡты шаталаҡ Зилиәбеҙ боҙа.

Мин унайһыҙланып китәм, сөнки хәбәрен уйламайыраҡ һөйләгән, шул арҡала йыш ҡына үҙен дә, беҙҙе лә унайһыҙ хәлдәргә ҡалдырған Зилиәнең был һорау менән генә сикләнмәҫен яҡшы беләм.

- Һөйәркәгеҙҙәнме әллә? - Шаталаҡтың һорауы тамам шаңҡыта. Ялп итеп күрше өҫтәл артындағы Зилә Миҙхәтовнаға ҡарайым. Ул иһә тып-тыныс, йөҙөндә минеке ише аптырау ҙа, асыуланыу ҙа юҡ. Әллә һаман теге шауҡымдан айный алмай ултыра инде?

- Иремдән, - ти ул үҙенә генә хас иплелеген һаҡлап. - Сәскәне һөйәрҙәр генә бүләк итә тиме?

Зилиә минә тексәйә:

- Ыстағый! Алай ҙа була икән ...

Эш көнөнөң төшкәсә ваҡыты мәңгелек мөхәббәт, ысын бәхет, ҡатын-ҡыҙ һәм ир мөнәсәбәте кеүек төшөнсәләр тирәләй әйләнеп үтә. Миҙхәтовна һөйләгән һәр һүҙгә илереп, күңелдәребеҙҙе әллә ниндәй үҙебеҙгә лә аңлашылып бөтмәгән татлы хистәргә йылытып ултыра бирәбеҙ. Ул иһә иренең үҙенә булған иң киткес яҡшы мөнәсәбәтен, уртаҡ һөйөүҙәрен экиәттәгеләй итеп һөйләй, ул һөйләгән һайын әллә ниндәй сихри донъяларҙы урап ҡайтабыҙ.

- Ул мине йыш ҡына шулай ҡыуандырып тора. - Өлкән хеҙмәттәшебеҙ серле йылмайып, теге гөлләмәгә ымлай. - Сюрприздар яһарға ярата.

"Сюрприз" һүҙен ишеткәс, Зилиә тағы ла йәнләнә төшә, хас бәләкәй бала ише усын-усҡа ыуып ала:

- Уларҙы кем дә ярата инде ул!

Башҡаларына оҡшамаған, серле генә башланған көнөбөҙ күтәренке кәйеф, матур хис-тойғолар солғанышында үтеп китә.

Өйөмә ҡайтҡас та шулар тәьҫиренән айный алмай бер булам. "Булһа була бит ул донъяла ирҙәр" тигән уй ҡорт ише елегемде һура. Утыҙ йылға яҡын бергә йәшәлә, һаман ҡатыныңа гөлләмәләр бүләк итеп, "яратам" тип яҙып ят инде! Зилиә әйтмешләй, хәтәр бит әй! Романтика!

Бығаса эшләгән еремдә ундайҙы күргәнем булмағас, аптырап бер булам. Ундағы ҡатындар ирҙәренә зарланып, шуларын эттән алып этҡә һалып әрләп ултыралар ине. Зилә Миҙхәтовна менән эшләүемә бер ай, шул ваҡыт эсендә ире хаҡында бер алама һүҙ ишеттергәне юҡ. Гел маҡтап, яратып ҡына телгә ала. Хәйер, ундай ирҙе ҡалайтып яманлап ултырмаҡ кәрәк? Ул бит алтын биҙәүестәр алып бирһенме, ресторандарға саҡырһынмы, ә бүләк ителгән күлдәк-итектәрҙең иҫәбе-һаны ла юҡ. Улары гел сифатлы, ҡыйбатлы бит әле! Шәшке тундың да әллә бишенсеһе, әллә унынсыһы, хәтеремдә түгел, ти бит ана. Ә телефонына килгән смс-тарын уҡыһаң! Ундағы баллы-татлы һүҙҙәрҙән уның түгел, үҙемдең башым әйләнеп туҡтай. Үәт яҙа бит, ә! Аҡҡошом да аппағым, һағындым да яратам...

"Әй, ҡартлас, - тигән була апайыбыҙ унайһыҙланып, - әллә ниҙәр яҙып бөтә инде ошо!" Шулай тиһә лә, йөҙөнән йылмайыу китмәй, күҙҙәре йәш ҡыҙҙарҙыҡы ише көлөп тора. Шул смстағы һүҙҙәргә шаҡ ҡатып, беҙгә лә күрһәтә, йәнәһе, шул йәштә кеше ошоларҙы яҙамы?

- Нишләп яҙмаһын? - Ултырған еребеҙҙән Зилиә менән ҡушарлап ҡалҡабыҙ. - Яҙа инде яратҡас!

Ә Миҙхәтовнабыҙ һаман, китегеҙ, кит, ҡыҙҙар, тигән була. Ярата тиһәң дә инде, һағына тиһәң дә инде, тип шаҡ ҡата.

Булһа була бит донъяла ирҙәр! Ябай ғына, бертөрлөлөк баҫып барған тормошондо шау байрамға әйләндереп, гөлсәскәләргә күмеп ташлаған тормош юлдаштары бик һирәк булалыр инде ул...

* * *

Икенсе көндө апайыбыҙ күҙҙең яуын алып торған бейек үксәле туфлиҙарҙа килеп инде. "Бына, - ти ул, - кисә ҡайтһам, ишек төбөндә ошолар ултыра..." Лампочка яҡтыһында әле бер, әле икенсе тәҫкә инеп ялтлап торған туфлиҙарҙы әйләндереп-әйләндереп ҡарайбыҙ, әйләндергән һайын тел шартлатабыҙ.

- Хаҡы яҙылған ҡағыҙҙы сүп биҙрәһенә ырғытҡан булған, табып алып ҡараһам, саҡ йығылып китмәнем. - Хеҙмәттәшебеҙҙең аҡсаға үтә һаҡсыл ҡарашлы икәнен белгәнгә, был ҡылығына артыҡ иҫебеҙ китмәй. - Ышанаһығыҙмы, юҡмы, егерме биш мең тора ошолар!

Зилиә лә, мин дә ҡараштарҙы ялтыр туфлиҙарҙан йәһәт кенә үҙ аяҡтарыбыҙға күсерәбеҙ. Әстәғәфирулла! Беҙҙекеләр быларҙың ярты хаҡы ла тормай! Кейеп йөрөү ҙә ояТ!

Кәйефебеҙ тамам төшөп, башкөлләй эшкә сумабыҙ. Апайыбыҙ иһә һәр ваҡыттағыса йырлай-көйләй эшен башҡара, шул ыңғайҙа бөгөн кис ире менән парлашып магазиндар буйлап йөрөйәсәген, унан ресторанға барасаҡтарын һөйләй.

- Ҡыҙҙар, - ти ул ҡапыл йәнләнеп китеп. - Шул тиклем бәхетлемен! Һеҙгә лә шуны теләйем.

- Ыһы... - әлеге шул Зилиәбеҙ көрһөнә, - көтөрһөң минекенән бәхетте...

Мин өндәшмәй генә үҙемдекен уйлайым. Иремдең үҙемә бүләк итмәгән гөлләмәләре хәтергә төшөп асыуымды ҡабарта. Ярай инде, алтын-көмөшкә үҙемдең иҫ китмәй, егерме биш меңлек туфли кеймәй ҙә түҙә алам, ул ресторан-маҙарына ла бер инмәһәм дә үкенәһем юҡ, ә бына ошолайтып, исмаһам, ғүмер эсендә бер тапҡыр сәскә ебәрһә, ҡалай шәп булыр ине. Кеше араһында.

Шул саҡ күҙ алдыма хыялым тыуҙырған ҡосаҡ-ҡосаҡ гөлләмәләр килеп баҫа, хатта танауыма шуларҙың башты әйләндерер хуш еҫе килеп бәрелгәндәй була.

- Ҡыҙ-ҙа-ар! - Бер нисә көндән Миҙхәтовнабыҙ йәнә ҡояштай балҡып килеп инә. - Кисә ирем яңы машина алып ҡайтты. - Үҙе өҫтәлгә торт, татлы тәмләкәстәрен теҙә. - Шул хөрмәткә сәй эсеп алырбыҙ, йәме.

- Везет һеҙгә! - Зилиә компьютерының төймәләренә бар көсөн йыйып баҫырға тотона. - Шундай ир менән!

- Иҫән-һау йөрөргә булһын, Зилә апай, - тим мин, көҙгө ҡаршында бөтәрөлгән апайыбыҙға ҡарап. Үҙем эстән генә, их, бер күрһәң ине шул ирҙе, тип уйлап ҡуям. Шул саҡ күҙ алдыма билдәле бизнесмендар, актерҙар, тағы әллә ниндәй күркәм ҡиәфәтле ирҙәр килеп баҫа ла, Миҙхәтовнаныҡын шуларҙың ҡайһыһы менән сағыштырырға белмәй йонсойом.

- Минең "быҙау" инде ун йыл бер машинала йөрөй! - Янымдағы Зилиәнең тауышы һиҫкәндереп ебәрә. - Эшкинмәгән!

Теге ирҙәрҙе ташлап, минең уйҙар ҙа үҙебеҙҙең машина тирәләй әйләнергә керешә. Шуны йөҙ һүтеп һалып, туҡһан тыҙ тапҡыр йыйған иремде уйлап ҡуям.

Сәй артында ла бар хәбәр шул етеш һәм етешһеҙ тормош, булдыҡлы һәм эшкә ашмаған ирҙәр, бәхетле һәм бәхетһеҙ ҡатын-ҡыҙ хаҡындараҡ бара. Шаталаҡ Зилиәбеҙ бығаса асмаған серҙәрен, аһзарын сығарып һалһа, мин уйымда ғына осһоҙ-ҡырыйһыҙ бурыстарҙы, эшләнеп бөтмәгән ремонтты, боҙолоп йонсотҡан машинабыҙҙы һәм магазиндарҙа йылдар буйы мине көтөп арыған шәшке тундарҙы уйлап көрһенәм. Миҙхәтовнабыҙ ғына май ҡояшылай балҡып ултыра бирә. "Өйөбөҙҙөң икенсе ҡатын эшләп йөрөй әле", - тип беҙҙе ирештергәндәй, йәнә шул ире хаҡында һүҙ башлай.

- Берәй көн һеҙгә ҡунаҡҡа барайыҡ әле! - Зилиәнең әйткәненә мин дә елкенеп китәм:

- Саҡырһағыҙ инде.

Апайыбыҙ беҙҙең балалар ише талпыныуыбыҙҙы әллә ысынға алмай, серле йылмайып ултыра бирә. Ныҡымыш Зилиә иһә уртаҡ хыялыбыҙҙы ысынтылап тормошҡа ашырмаҡ булып, унайлы көн, алып барасаҡ күстәнәстәребеҙҙе барлай башлай.

Ҡаршыбыҙҙа беҙҙе тыңлап, шымып ҡалған хеҙмәттәшебеҙ йөҙөндә уға хас булмаған борсолоу ҡатыш ҡурҡыу шәйләп ҡалам, шуға ла барлыҡҡа килгән көсөргәнеште йомшартмаҡ булып:

- Әрһеҙләшеп ултырабыҙсы, - тигән булам.

Бығаса осоп-ҡунған Зилиәм дә тымып ҡала:

- Эйе шул. Алйоттар.

* * *

Бынан ары көндәрҙә ҡунаҡ хаҡында бөтөнләй һүҙ ҡуҙғатмайбыҙ. Эш бүлмәбеҙгә ҡосаҡ-ҡосаҡ гөлләмәләр, ялтыр ҡаптарҙа төрлө бүләк-сюрприздар, Миҙхәтовнабыҙ телефонына андарҙы томалап, өсөбөҙҙө бер юлы һуштан яҙҙырырлыҡ смс-хәбәрҙәр килеүе беҙҙең өсөн гәҙәти хәлгә әйләнеп туҡтай.

Апайыбыҙҙың бәхетенән өлөш алып, уның йылыһында йылынып, ҡот, йәмгә ҡойоноп йәшәп ятҡан бер көндө Зилә апайыбыҙ эшкә килмәне лә ҡуйҙы. Уның урынына өсөнсө ҡаттан берәүҙе төшөрөп ултырттылар. Күркә ише ҡабарынҡы ҡиәфәтле ханым менән эшләү минә лә, Зилиәгә лә оҡшаманы. Ул көндө бүлмәбеҙҙең дә йәме юғалғандай булды. Көнөҙөно Миҙхәтовнабыҙға әле беребеҙ, әле икенсебеҙ шылтыратып торҙоҡ. Тик уның телефоны һүнгәйне.

- Һине хужа саҡырта, - тине теге "күркә" эш сәғәте бөтөп барғанда. - Срочно!

Барып инеү менән етәксебеҙ өлкән хеҙмәттәшем хаҡында һүҙ башланы. Унан бер хәбәр ҙә юҡлығын белгәс, адресын тоттороп, эштән һуң өйөнә барып килеүемде, аҙаҡ үҙе менән бәйләнешкә сығыуымды һораны.

Ҡағыҙ киҫәгенә яҙылған адресты ҡатҡат уҡыйым, үҙем иһә ул урамдың ҡайҙалығын яҡынса ла самалай алмай аптыранам:

- Лесная, 192. Лес...

- Йәһәннәмдә ул урам. Такси алып бар. - Теге ханым хәлемде еңеләйтмәк булыпмы, турһайып ултырған еренән телгә килә. - Былай тапмаҫһың.

Таксист егет мине ҡараңғы шырлыҡта ҡалдырып китте. Ул урамға машина менән инеп булмай,- тине ул, - арьяғына йәйәү барығыҙ.

Теҙелеп киткән эреле-ваҡлы өйҙәр рәтенән Миҙхәтовнаның ике ҡатлы йортон эҙләп йөрөй торғас, ныҡлап ҡараңғы төштө. Лауылдашып өргән эттәр тауышынан ҡотом осоп алға бара торғас, үҙемә кәрәкле адресҡа килеп төртөлдөм дә, күҙҙәремә лә, ҡағыҙҙағы яҙыуға ла ышанмай туҡтап ҡалдым. Сөнки мин эҙләгән ике ҡатлының урынында иҫке генә йорт ишараһы ултыра ине. Яңылыштыҡыма тамам ышаныр өсөн ҡапҡа аша эскә үтәм. Бикле ишеккә ҡаға торғас, эс яҡта аяҡ тауыштары ишетелде. Йөрәгем күкрәгемде емереп сығырҙай булып тибә, үҙем иһә бына-бына берәй эскесе ир килеп сығып, башыма тондорор тип көтәм.

- Ке...кем? - Күңелемә яҡын тауыш бар насар уйҙарымды юҡҡа сығара.

- Мин, мин, - үҙем ишек тотҡаһына тағы ла нығыраҡ йәбешәм, әйтерһең дә, былар барыһы ла төштә генә, ҡулымды саҡ ҡына бушатһам, ошо ишек юҡҡа сығыр ҙа, уның менән бергә бар нәмә юғалыр төҫлө. Ул асылғансы, ҡарашым менән әйләнә-тирәне байҡайым, һаман

✓ Ҡайындарға бағтым. Шундай камил Изгелектәр ҡатыш сабырлыҡ. Һәҙиә апай, Рәми Ғариповтың Рухы аңҡый. Хайран ҡалырлыҡ.



да теге ике ҡатлы йортто, ялтлап ултырған машинаны тапмаҡ булам.

- Миҙхәтовна?- Һөйрәлеп тигәндәй килеп сыҡҡан хеҙмәттәшемде күргәс, сәрелдәп ҡыҫҡырып ебәрәм дә, үҙ тауышымдан үҙем ҡурҡып, тупһаға ултыра төшәм. Ул яныма сүгә. Быларҙың барыһы ла өңдә икәненә тамам ышанып өсөн уның биттәренән, сәстәренән һыйпайым, ҡулдарын тотоп ҡарайым да, түгелеп илап ултырған апайымды ҡосағыма алам. Байтаҡ ҡына шулай ултырғандан һуң ауыр көсөргәнеште ул боҙа:

- Аптыраныңмы?

Ни хаҡында һүҙ барғанын яҡынса самалаһам да, үҙемдә "эйе" йә "юҡ" тип әйтерлек көс таба алмайым. "Асыуланма, йәме", тигәненә яуап итеп баш ҡына сайҡайым.

- Алдаҡсы тип асыуланма. - Ул үҙенә генә хас иплелек менән һүҙен ялғап китә. - Ғүмерем буйы кешесә йәшәргә хыялландым. Ир төҫлө ир, донъя ише донъя күргем килде. Тырыштым, эшләнем, балалар таптым.

Шул саҡ береће Мәскәүҙә, икенсеһе Себерҙә тип һөйләгән балалары иҫкә төшә. Көрәп аҡса табалар, хәлле йәшәйҙәр, тип маҡтай ине уларын.

- Ирҙән дә, балаларҙан да уңманым шул. - Уның әрнеп әйткән һүҙҙәре йөрәгемдең төбөнә үк барып ҡаҙала. - Ир тигәнем ғүмер буйы өҫтөмдән йөрөнө. Донъя көтмәне. Эсте. Һуғышты. - Ай буйына үҙен бер күрергә тип хыялланған, башымдан сыҡмаған, күҙ алдымдан китмәгән күркәм, эшлекле ир ҡиәфәте шул минутта ирep юҡҡа сыға. - Балалары ла...рәхәт күрһәтмәй.

Һүҙ уларына барып еткәс, әсә кеше йәштәренә сәсәп туҡтай. Сумкамдан сығарып дарыу ҡаптырғас, апайҙы өйөнә алып инәм. Сәй ҡуйып, табын хәстәрләйем, көйефен саҡ ҡына булһа ла күтәргем килеп, эштәге хәлдәрҙе, Зилиәбеҙҙең ҡыҙыҡтарын һөйләйем. Сәйләп алғас, ул бер аҙ яҙыла төшә:

- Хыялдарымды ысын итеп һөйләп йөрөнөм бит. Уйҙарымда ғына булһа ла үҙем тыуҙырған матур донъямда йәшәп яттым. Шулай нисектер еңелерәк ине, аңлайһыңмы?

- Ә теге кейемдәр? - Күҙ алдымдан берәм-берәм шәшке тундар, ҡыйбатлы туфлиитектәр, уларға әйәрел алтын-көмөш биҙәүестәр үтеп китә. - Гөлләмәләр? -

Тағы нимәнелер онотоп ҡуймағайым тип теҙәм генә:

- Смстар, ялтыр ҡаплы бүләктәр...

- Кейемдәр, алтындар апайымдыҡы, - ти ул. - Үҙе кейеп, тағып ялҡҡандарын минә бирә. Ире бай, бизнесмен уның. Ә гөлләмәләрҙе үҙ аҡсама һатып алдым. Шау ғазаптан торған донъямды шул сәскәләр менән биҙәп йәшәнем. - Һөйләгәндәренән күңеле тулып үкһеп илап ебәрә.

Бығаса үҙемде фантазияға бай кеше тип һанап йөрөгән мин, быңдайына уҡ башым етмәсен аңлап, тамам шаңғыйым:

- Ә яра...яратам, тип? Һағындым, тип?

- Уларын да үҙем яҙҙым. Икенсе телефонымдан.

Тамам аптырауҙан сумкамды, кейемдәремде һәрмәп алып, ҡайтырға йыйынам. Шул ыңғайҙа ҡаршымда ултырған хеҙмәттәшемдең тукмалыуҙан күгәргән йөҙөнә, шешмәкләнеп торған күҙҙәренә ҡарап, етәксем менән бәйләнешкә сыҡҡас, ниндәйерәк һүҙҙәр һөйләйәсәгемде уйлап ҡайғырам. Үҙемдән башҡа берәү ҙә белергә тейеш булмаған был хәлдә унан нисегерәк итеп йәшереп ҡалырымды самалай алмай ыуаланам.

- Ғәфү ит, йәме. Мин хыялыйҙы...

Үҙ-үҙемдә ҡулға алып, күҙҙәремә мөлдөрәп баҡҡан апайымды аҡларға, яҡларға керешеп китәм.

- Бәхетле булып күренгем килгәйне шул. Кеше араһында...

Аңлайышһыҙ хис-тойғолар солғанышында ҡайтыр яҡҡа юлланам. Инде үҙемдең төштә түгел, ысынбарлыҡта икәнемә тамам ышанып, аҡыл менән күңел бәхәсендә байтаҡ ваҡыт ҡала урамдарын ҡыҙырам. Әй, ҡатын-ҡыҙ, тип уйлайым үҙем, ниндәй көслө зат һин! Бәхетһеҙ ғүмер кисергәндә лә бәхетле булып күренеп, башҡаларҙы ла шуға ышандырып, тормошонда тамсы ла йәм ҡалмаганда, тотош донъяға ҡот бирел йәшәү бары тик һинең ҡулдан ғына килләер ул...

ЗАУЫҠ

# ХАЛЫҠ ТОЙҒОҺОНАН ВАЗ КИСМӘМ!

Тамара ҒӘНИЕВА,
Башҡортостандың халыҡ шағиры



## Туҡыным

Һауаларҙан һулыш иркенәйеп,
Дауалауҙан уҙған йәнгенәм,
Яҙылып та йәмгә хозурлана,
Баҫыла һыҙлау эстән әрнегән.
Офоҡтарҙы кисеп офоҡ таптым,
Ҡабат астым донъя серҙәрен.
Сымырлатып арҡа һөйәгемде
Елегемә үтте ғәжәп тойғо -
Яратыуым тыуған ерҙәрем.
Елегемә үтте ғәжәп асыш -
Халҡым тойғонан ваз кисмәм.
Бейек үлсәм менән тәрән үлсәм, -
Дәүмәл булыуҙарҙан былайыраҡ -
Милләтемә минең тиң икән.
Һулышым да менән булмышымды
Иркенәйткән халҡым, ергенәм,
Ер өҫтәре тарайған саҡ була,
Һулый яҙа тамыр, түлгенәм,
Тик барыбер тылсым шишмәләрҙән
Ҡот ала бит нәҫел-тоҡомом.
Бөгөн йәнә
Башҡорт мәртәбәһен
Юғалтма ла,
Бәгзеләрҙе киҫәт,
Тип үҙемә ҡат-ҡат туҡыным.

## Гармунсым

Минең күңелем, ҡайтыр юл тапмаҫҡа,
Һағыныу илдәренә юлыҡҡан.
Зәңгәр күҙле моңло гармунсынан
Отҡан көйҙәрҙе лә онотам.
Ғүмер үткән һайын нығыраҡ тоям,
Йөрәгемә ишһең, гармунсым.
Һин икәнһең минең хыялымды
Моңландырып көйгә һалыусым.
Табыныуҙың етеп сиктәренә
Тилмерә бит ике күҙ алмаң.
Йөрәгем, тим, һинең мөхәббәттә
Янып бөтмәй нисек түҙалған.
Хәҙер мин саҡ түҙәм иламайса,
Берәү үтһә уйнап, сайратып.
Хәтер ҡайнылығын уятып шул,
Былбылдарын китә һайратып.
Их, күңелем,
Ҡайтыр юл тапмаҫҡа,
Һағыныу илдәренә юлыҡҡан.
Зәңгәр күҙле моңло гармунсынан
Отҡан көйҙәрҙе лә онотам.

## Сер түгелмен

*О женщина! Ты тайна природы.*
*О.Бальзак*

Донъя буйлап мин сер эҙләп киләм,
Кешеләргә, беләм, мин сер түгел.
Күн ишеккә етер тупһаларҙа
Ятып ҡалды минең ғорур күңел.
Ҡат-ҡат тапап бынау тупһаны ла
Инәлеп бит йөрөп эш эҙләнем.
- Аҡылымды һатам тамаҡ яллыҡ...
- Аҡыл кәрәк түгел! -
Мин теҙләндем.
Оялып үтәм хәҙер яндарынан,
Ҡара тирем атыла маңлайымдан.
Был ишекте фатир һорап ҡаҡтым,
Нисә мәтәлләнем буҫағанан.
- Үҙемә ярар, балам хаҡтарына... -
Кем балаһын кемдәр ҡурсалаған...
Тубыҡтарым сыкты ҡара көйөп.
Тупһа, ана, миңә ҡарай көлөп.
Донъя буйлап мин сер эҙләп киләм,
Үҙем сер ҙә, мөгжизә лә түгел.
Күн ишеккә илтер тупһаларҙа
Ятып ҡалды минең ғорур күңел.
Бынынында хистәремә - ҡәбер,
Утанылар күңел гөлдәремде.
Маңлайыма мөгөҙ сәпәнеләр,
Асырлыҡ та итмәй күҙҙәремде.
Көләмһәрәп ҡала бикле ҡапҡа:
"Танауыңды сөймәй генә атла!"
Ғәниева тигән кеше - мин, тип,
Паспорт тотоп баҫтым сираттарға.
Ит, май өсөн...
Текә һатыусының
Яндарынан ғорур үтеп ҡара.
Ҡоллоҡ төҫө минең күҙҙәремдә,
Ризыҡ өсөн торҙом теҙҙәремдә.
Мөгжизәнән башын тартҡан заман,
Йәшәйешкә икән ни дәғүәл?
Мин - ҡатын-ҡыҙ, әммә сер түгелмен
Тупһаларҙа йәнем үрһәләнә.

*1988 йыл.*

## Ҡарурман

Ҡарурманға килеп юлыҡҡанмын,
Ҡарурмандар теле тылсым-сер.
Ҡалай итһәм, юлдар табылыр ҙа,
Ҡалай итһәм, серҙәр сиселер.
Аралыҡтар буйлап иҫкән елгә
Хәбәр һөйләп ҡала япрактар.
Әлдә, тимен, Хоҙай тәбиғәттең
Телен аңлар гәмдә яралтҡан.
Ҡыҙғылт саған көҙгә ялҡынында
Көйрәтмәксе мәллә миләште.
Улар ҡапыл Әхмәт Лотфуллиндың
Рәссам теле менән һөйләште.
Ҡайындарға баҡтым. Шундай камил
Изгелектәр ҡатыш сабырлыҡ.
Һәҙиә апай, Рәми Ғариповтың
Рухы аңҡый. Хайран ҡалырлыҡ.
Ҡарурманға килеп юлыҡҡанмын,
Ҡарурмандар иле - тылсым-сер.
Аҙаштырам типме шырлыҡ һыҙыра,
Былары, тим, мәкер ишелер.
Йүкәләргә ҡатыш ылыҫ еҫе,
Ҡояш ҡатыш болот - һағайҙым.
Үлән үҫкән тауыш, ат кешнәүе -
Күңеле ише Заһир ағайҙың.
Өшөттөрөп йәнде илай өкө,
Үҙенсәләп микән әркөтә.
Быныһы ла таныш. Урын табыла
Күңелдәрҙе китер мәхлүккә.
Аралыҡты телеп елдәр елә,
Сәм өҫтәлә шырлыҡ ярыуҙан.
Уйсандарҙың күңел шәмен яғып,
Юл күрһәтеп тора ҡарурман.

## Көтөү

Ай-һай иркен ине йәнтөйгем,
Сослоҡ һүрелеп ойоп киттемме?
Өңшәнләшеп килеп инмәһенме
Туҡал, һөмһөҙ мөстән көтөүе.
Һоғоналар һүтлы биләмәмде,
Лапылдатып "коймаҡ" ҡоялар.
Кинәнәләр мышнай-мышнай көйшәп.
Уя баҫып та бер булалар.
Һыуалышып бөткән, тыу уҙҙәре.
Иткә асҡаҡ, һәт юк еләндә.
Сыбыртҡылап ҡыуалаһаң инде...
Йәл мәхлүктәр. Беҙҙең күңелдә
Донъя иркен. Болон-болон сәскә.
Улаҡ-улаҡ тере шишмәләр.
Бал тәмәйтә монсол йүкәләрем,
Ҡурайҙарға ҡыраү төшмәгән.
Бер үҙемә күп тә кеүек ине...
Ҡул һелтәнем...
Күрҙем аҙаҡтан
Арлы-бирле алабута ғына
Шыта икән теге "коймаҡ"тан.
Аһ!
Һуң микән?
Нишләп йомартландым?
Тәләфләнә бит һуң йән түрем!
Ниндәй орлоҡ сәсһәм, уңыр икән?
Әле сандау борхой. Күҙ күрем...

## Йәй таңы

Елбер-елбер томан ысыҡ-ысыҡ
Бал тәмләтә сәскәгә.
Һырттан шарлап нур аҡты ла
Бейеп китте сәхрәлә.
Йәй елдәрен ҡосаҡлайым,
Йәйөм дә ҡосағымды.
Йәтеш килдегеҙ. Бергәләп
Терелтербеҙ томан япҡан
Кисәге усағымды.
Таңдарға таң ҡалып бағам
Ҡанған танһыҡ өҫтөнә.
Етте! Елдәр буймағыҙ
Сәсте ҡылған төҫөнә.
Көнләшеп бер булғандар бар,
Һеҙ арбап һынатмағыҙ.
...Йәнә...
Тәкәттән арманһыҙ
(Йөҙөн күрегеҙ, эй, ғорур!)
Йәремде уятмағыҙ!

## Икәү

Аһ, ул төндө!
Күкте йәшен телде.
Дөбөрләтте Бабай арбаһын.
Ә һин асырғанып (Убырмы ни!)
Һемереп эстең дәрүиш юлсы ише,
Күҙҙәремдең йәшел алмаһын.
Аһ, ул төндә
Минең ҡабыныуҙарым
Һыуынып бөткән көлдө терелтте.
Мин - ҡәлгәләй,
Мин ҡулсалай күрҙем
Тамыры ҡыҙған һинең беләкте.
Аһ, ул төндө!
Үҙ-үҙемде өттөм.
Аңды рисуай иттем.
Ә йәнем
Буйһоноулы һеңде иңдәренә.
Һыйындырып күңелең түрҙәренә,
Бығауларға мине теләнең.
Аһ, ул төндә...
Ҡойоп ямғыр яуҙы...
Сараһыҙҙан булдыҡ тәҡәтһеҙ.
Ғәләм эстәрендә - ике яңғыҙ,
Ике асарбаҡ беҙ - иркә-наҙһыҙ,
Ғүмер кисерәбеҙ бәхетһеҙ.

## Тыуған яҡта

Үтә күренмәле саф яҡтылыҡ
Офоҡтарға саҡлым.
Манзараның камил төҫтәренә
Текләнем дә ҡаттым.
Наҡаҫ ҡына - наҡыҫ,
Шишмә тиклем
Сорлап аҡҡан була.
Күнәк батырлыҡ та ятыуы юҡ,
Саҡ яртыһы тула.
Йыуаһынан ауыҙ иттенһәм,
Еләк ҡылтайғандай.
Күкрәгемә илһам ҡаптырайым,
Шәмгә ут алғандай.
Анау яҡта ир-ат, егет-елән,
Һайтылдығын сығып,
Менгеләккә тайзы өйрәтәләр.
Зыңлап ҡуя ҡороҡ.
Офоҡтарҙы ашҡым килеп китте,
Элек кискәнемдәй.
Шаҡарылдым ҡапыл. Зиһен ҡайтты.
Шаңҡып һиҫкәнеүҙән.
Өфө тауҙарының кендегенә
Беркетелгәнмеме?
Бик оҙонға һуҙмай бушата ла
Ҡайыра теҙгенемде.
Таҫма юлым йәнә тәгәрмәскә
Уралырмы икән?
...Әнтәкләнгән ауылым тәнтерәкләй,
Торалырмы икән?

**✓ Мал аҫрайбыҙ, баҡсабыҙҙа бил бөгәбеҙ, шуға ла итһеҙ, майһыҙ, картуф-йәшелсәһеҙ ултырғаныбыҙ булманы, шөкөр. Түләүҙәрҙе лә ваҡытында түләйбеҙ, балаларыбыҙ ҙа башҡалар араһында кәм-хур булманы.**



ИНТЕРНЕТТАН



# АЛЮМИН ҺАУЫТТАН...

## баш тарт

■ Хәҙерге химия ҙур тиҙлектә үҫешә, бөгөн кеше тарафынан синтезланған әйберҙәр уратып алған беҙҙе. Бензол, этилбензол, формальдегид, фенол, ксилол, толуол иң ағыулаусы матдәләр иҫәпләнә һәм улар бөгөн һәр йортта ла бар. Фенол линолеум, буяуҙар составында, ДВП һәм ДСП-нан яһалған осһоҙло йорт йыһаздарында бар. Фенол бауырға ултыра һәм уның эшмәкәрлеген боҙоуы ихтимал. Формальдегид - канцероген, өҫкө тын юлдары ауырыуҙарына, баш ауырыуына, аллергияға килтереүе бар. Ул осһоҙло уйынсыҡтарҙа ла бар. Шуға ла балала астма башланһа, йорттағы әйберҙәрҙе ҡарап сығырға кәрәк. Винил обойҙары винилхлорид бүлеп сығара, шуға ла иң зарарһыҙы булып ябай ҡағыҙ обойҙар иҫәпләнә. Елем крахмалы ҡулланырға кәңәш ителә. Сағыу, матур тәрилкә, сынаяҡтар ҙа хәүеф төркөмөндә. Һауыт-һаба ныҡ булһын өсөн уларҙың составына меламин тигән пластик ҡушыла. Алюмин кәстрүлдәрҙән дә баш тартыу яҡшыраҡ. Алюмин ярайһы әүҙем металл. Ул организмда тупланып, Альцгеймер ауырыуына алып килеүе бар. Тефлон таба урынына керамика менән ҡапланғанын, сөгөнөн ҡулланырға кәрәк. Көнкүреш химияһы ла көслө аллерген. Составында лаурил сульфаты булған шампунь-гелдәр, шулай уҡ һауыт-һаба йыуыу өсөн тәғәйенләнгән саралар зыянлы. Гәрсис порошогы, аш содаһы ла һауыт-һабаны яҡшы таҙарта.

■ Күҙҙәр - күңел көҙгөһө тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Кешенең хис-тойғоһо күҙҙәрҙә сағыла. Кемдеңдер ҡарашы асыҡ, яғымлы, кемдер ауыр ҡарашлы. Күҙҙәр - кешенең эске донъяһын да сағылдыра. Күреү һәләте психика менән бәйле, ти ғалимдар. Германияла психосоматика офтальмологияһына нигеҙ һалыусы доктор Вольфганг Шульц-Цеден әйтеүенсә, күҙ ауырыуҙарының 40 процентының психологик нигеҙе бар. Мәҫәлән, кеше ҡурҡҡанда уның күҙ ҡараһы ҙурая, асыуланғанда, киреһенсә, ҡыҫыла. Ныҡ тулҡынланғанда күҙ ҡараһы киңәйә, күреү һәләте түбәнәйә. Кеше тынысланғас та күреү һәләте кире ҡайта. Күҙҙәргә иң ҙур зыянды ҡурҡыу тойғоһо килтерә. Ул ҡан баҫымы һәм күҙ эсе баҫымын күтәрә, әгәр ҡурҡыу гел ҡабатланып торһа, глаукома барлыҡҡа килеүе бар. Эске конфликт, тойғоларҙы "баҫыу" - күреү һәләте насарайыуының төп сәбәптәре. Был организмдың һаҡланыу реакцияһы.

■ Ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда күпкә хислерәк, тип белдерә Вашингтон университеты менән Джорж Мейсон университеты белгестәре. Һәр хәлдә, беренсе ҡараштан улар йышыраҡ ғашиҡ була, тип раҫлай улар. Төрлө илдәрҙә йәшәгән 70 мең кешенән һорау алғандан һуң, улар тап ир-егеттәрҙең көтөлмәгән ярһыулыҡҡа һәләтле икәне асыҡлаған. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы ир-аттарҙың 48 проценты тәү ҡараштан ғашиҡ булған, ҡатын-ҡыҙҙар араһында бындайҙар иҫәбе 28 процент ҡына. Ир-егеттәр яратҡан кешеһенә йышыраҡ хыянат та итә, ситкә йөрөүселәр һаны улар араһында 33 процент, ҡатын-ҡыҙҙарҙа - 19.

ҮҘ ӨЙӨМДӘ - ҮҘ КӨЙӨМ

# ҠАЛАНЫ МАКТА ЛА,

## ауылда йәшә...



**Ауылда етештерелгән ризыҡ ҡаланыҡынан, йәғни магазиндыҡынан күпкә тәмлерәк. Быны хәҙер ғүмер буйы ҡалала йәшәгәндәр ҙә белә. Ҡайһы берҙә магазиндыҡы ла танһыҡ булып китә, әммә уның бер бәрәкәте юҡ.**

Миҫалға колбасаны ғына алайыҡ: бер килограмы бер ултырып ашарға ла етмәй бит уның, туҡлыҡлы ла түгел. Унда әллә ит бар, әллә юҡ тигәндәй. Ә бына үҙең әҙерләгән тултырма, ҡаҙы оло ҡунаҡҡа етә, тәмле лә. Ауыл тауығын ашап ҡарағандар магазиндыҡын үҙ итмәгәнен дә беләм, сөнки һатып алғандың һурпаһын эсерлек тә түгел.

Элегерәк, әле инкубаторым булмаған ваҡытта, тауыҡтарҙы бер нисә йәшкә тиклем йәшәтә инем. Бер тауығым хатта ете йыл йәшәне. Ҡара яҙҙан баҫа ла, ҡайһы йылды ике тапҡыр себеш сығарғаны булды, һыуыҡ еткәнсе бер сепейен дә үлтермәй, матур итеп ҡарап, ҡышҡы һыуыҡта бирешмәҫлек итеп үҫтерә ине. Ә хәҙер тәүге партия себештәр араһында тауыҡтары күп күренһә, уларҙы һуйҙыра башлайым. "Атай-олатай йолаһы, мәнфәғәтеңде күрҙек, балаларыма һурпа бешерермен..." - тип һамаҡлап, иремдең алдына аяғы бәйләнгән тос ҡына тауыҡтарымды килтереп тә һалам.

Өй тауығы һурпаһы бик тәмле бит. Үҙең йәйеп ҡырҡҡан туҡмасты, ҡорот һалып эсһәң, телеңде йоторлоҡ, файҙалы ла. Магазиндағы иң юғары сифатлы маркалы ҡош ите лә уға тиңләшә алмай. Күптән түгел бер еңгә менән шул хаҡта һөйләшеп ултырабыҙ.

- Ат урынына эшләгәнгә ауылда бөтөн ризыҡ тәмле...- ти ул.

- Еңгә, һин ҡалала эшләгән кешене белмәйһең. Унда ат түгел, трактор һымаҡ эшләүселәр бар. Әллә бөтәһе лә биҙәнеп-төҙәнеп, рәхәт кенә аҡса ҡайырып ала тип уйлайһыңмы? Юҡ шул. Ҡалала йәшәр өсөн дә ныҡышмаллыҡ, егәрлелек, түҙемлек кәрәк. Үҙем эшләп ҡайтҡас, беләм инде... - тигән булам.

Ҡайһы берҙә ауыл мәшәҡәттәренән арып китһәм, эшең булып, ҡалала йәшәһәң ине, тигән уй миңә лә килә ул. Эштән һуң ял итәһең, отпускыла ауылға ҡайтып ятаһың, тип хыялланам. Ә үҙем хыял менән ысынбарлыҡ араһында иртән башҡарасаҡ мәшәҡәттәремде барлайым: балалар уянғансы ҡоймаҡ ҡояһы, кистән ҡалған түтәлдәргә һыу һибәһе бар. Орлоғо бешеп ҡойолғансы картуф араһындағы алабутаны йолҡоп сығырға ла кәрәк, тағы ҡош-ҡортҡа бешерәһе... Шулай бөгөн эшләнәһе эшемде сиратлап башыма теҙеп ҡуйям да, иртәнән кискә тиклем баш баҫып эшләп тик йөрөйөм. Юғиһә, ауылда эш юҡ, тип аптырайҙар. Ул эшһеҙлек арҡаһында ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та ваҡиғаларға тарып бөттөм инде. Күптәр, икеһенең дә тәғәйен генә эш урыны юҡ, тимәк, аҡса төҫө күрмәй, тип уйлай, ахыры.

Бер ун биш йыллап бармы икән, бер инәй магазинда осратып, "Йомортҡа һатмайһыңмы, килен?" тип һораны. Мин ни, йомортҡаларымды ҡайҙа ҡуйырға белмәй йөрөгән кеше, һатам, һатам, тип ҡыуанып киттем. Утыҙҙы һанап, бәләкәй күнәккә һалып, өйөнә үк алып барып та еткерҙем. Инәйем сәй ултыртты, алдыма бутҡа ҡуйҙы. Сәй табынында иплəп кенә һораша был:

- Ирендең дә эшләгән урыны юҡ шикелле, дүрт балаға нимә ашатаһығыҙ, нисек кейем еткерәһегеҙ? - ти.

- Ярай, инәй, ҡайта һалайым әле, ҡамырым ташалыр, билмән дә эшләргә кәрәк, туҡмас ҡырҡаһы ла бар, - тип һүҙҙе икенсегә борҙом да, ҡайтырға ашыҡтым...

Инәйем ашығып, ҡалған бутҡаһын полиэтилен моҡсайға тултырып торған еренән шып туҡтаны ла:

- Йә инде, күмәк бала менән шулай бирешмәй донъя көтөүеңде әйт, - тип уйлағанын әйтеп һалды.

Йомортҡа һатып, аҡса эшләйем тип йөрөйҙөр, тип йәлләгәндер инде. Эш урыныбыҙ булмаһа ла, беҙ бит үҙебеҙгә, шәхси хужалығыбыҙға эшләйбеҙ. Мал аҫрайбыҙ, баҡсабыҙҙа бил бөгәбеҙ, шуға ла итһеҙ, майһыҙ, картуф-йәшелсәһеҙ ултырғанибыҙ булманы, шөкөр. Түләүҙәрҙе лә ваҡытында түләйбеҙ, йомарлап аҡса тотоп йөрөмәһәк тә, балаларыбыҙ ҙа башҡалар араһында кәм-хур булманы. Һәр береһе тырышып уҡып, үҙ юлын тапты. Бына шулай, йәмәғәт. Ауылда эш тә бар, аш та бар. Белмәһәгеҙ, һөйләмәгеҙ, белгегеҙ килһә, килегеҙ, күрегеҙ. Һеҙгә лә һыйым етер...

**Айгөл МИҢЛЕБАЕВА.**
**Күгәрсен районы.**

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# ЕРКӘҮЕК



**Көн кискә тартып, һауа һиләҫ кенә була башлаһа, танауға нескә генә еҫ бәреләә. Нескә генә, шул уҡ мәлдә көслө лә. Нисәмә еҫтәр араһынан уны айырып була. Әскелтем дә һымаҡ, нимәһе менәндер муйыл сәскәһе еҫенә лә тартҡан кеүек. Күпме еҫкәһәң дә туйҙырмаҫ, күҙҙе матурлығы менән иркәләр сәскә ул. Киптергәндә тәме һаҡлана. Йәйҙең бар йәмен, тәмен тойоп була унда.**

Уны башҡа сәскә менән бутап булмай. Нәҙек кенә, шул уҡ ваҡытта ныҡлы һабаҡта үҫә ул. Туғай буйҙары, урман ситтәрендә ҡуйы үлән араһынан ҡул болғаған кеүек аҡ ҡына башы менән бейеккә ынтылған. Мине күрегеҙ, һиҙегеҙ, һулағыҙ, йыйығыҙ, тигәндәй, һөйкөмлө генә итеп нескә сәскәләре менән күҙгә ташлана.

Еркәүек тураһында булыр был яҙмам. Русса атамаһы- лабазник, таволга вязолистная. Бынан өс йыл элек ошо үлән менән танышырға тура килде. Ошондай йәй ваҡыты ине. Бер ваҡыт күршеләр көнө-төнө триммер менән тирә-яҡтарын геүелдәп саба башланы. Иртән дә геүләү, кисен дә геүләү. Аһ, былар ҡайһылай егәрле, тигән булам. Шунан, саба торған ерҙәре улай күп түгел дә инде, ул туҡтауһыҙ сабыу буламы ни, тип аптырай башланым.Тик был геүләү минең ҡолағым булып сыҡты. Ге-ү-ү... Теге ҡолаҡ тынғы бирмәй шаулап тик тора. Тау артынан килгән йөк машинаһының геүләүенә оҡшап китә ине.

Апайыма шылтыраттым. Шулай-шулай, ҡолаҡ шаулай, ни эшләйем икән, тигән булам. Ул мине әрләп ташланы. Өләсәйем һымаҡ һаңғырау ҡалырһың иң еңел осраҡта, кеше баш менән шаярамы ни, ти. Йәһәт кенә неврологка бар. Тикшерел, тигән фарман яңғыраны.

Ярай, киттем неврологка. Барғайным, томографияһыҙ бер ни әйтә алмайым, тәүҙә шуны үт, ти. Әйтеүе рәхәт. Эргәңдә аҡсаң бармы ла, булһа ла, етеп килгән бесәнде уйлайым. Аҡса шуға кәрәк, быға...Бер ниндәй дауа яҙҙырмайынса, ҡайтып киттем. Ҡолаҡ геүләйме геүләй. Ҡалайтырға? Үҙем белгән үләндәрҙең ҡайһыһы миңә тура килер икән, тип, Рим Әхмәдовтың китаптарын уҡый башланым. Таптым бит. Еркәүек! Нервынан, ҡолаҡ шаулауынан, гепатиттан, йөрәк ауырыуы менән бәйле шешенеүҙән (отеки сердечного происхождения), псориаз, рактың төрлөһөнән, ашҡаҙан-эсәк полиптарынан, бөйөр, бәүел ҡыуығы ауырыуынан, гриптан, ҡатын-ҡыҙ түлһеҙлегенән, герпестан килешә, тигән бит.

Йыйҙым да, төнәтеп эстем дә. Килеште бит әй. Төнәткәндә хуш еҫе тәменә күскәндәй була. Эсеп туйғыһыҙ тәмле. Ҡыҫҡаһы, минең үлән булып сыҡты. Шунан бирле еркәүек менән дуҫмын. Бына бөгөн дә йыйып ҡайтыуға ваҡыт бүлдем. Бүлмәмдә хуш еҫле, үҙе әйтеп бөтөргөһөҙ файҙалы үлән кибеп ята. Һеҙ ҙә йыйығыҙ, дуҫтар! Бушҡа ғына ялпылдап ултырмайҙарҙыр улар "ҡул болғап".

Әйткәндәй, Рим Әхмәдовтың китабында, был үлән гипотония, йәғни түбән ҡан баҫымы, колит менән ауырығандарға ярамай, тигән тыйыу ҙа бар.

**Фирүзә ХӨСӘЙЕНОВА.**
**Күгәрсен районы.**

✓ *Их, элегерәк белһәмсе ошо шифалы һүҙҙәрҙе! Күпме юлым асылыр, ашаған ашым таҙарыр, эшләнмәгән эшем эшләнер, өйөмә ҡот ҡуныр, балам да тынысыраҡ йоҡлар, ғаиләнә-тирәм бысраҡ энергиянан таҙарыр ине.*



ҺАБАҠТАР

**Ихлас, матур итеп һөйләй белгән кешеләрҙе яратам. Үҙенә генә ҡаратып, юҡ ҡына хәбәрҙе тәмләп, еренә еткереп, уйға ҡалдырып һөйләй белеү үҙе бер талаттыр ул. Ундай кешеләрҙең хәбәрен ғәжәпләнеп тыңлайһың, ышанаһың, уға эйәреп китеп үҙеңдекен дә һөйләйһең. Һүҙ артынан һүҙ, хәбәр артынан хәбәр китә - ваҡыттың ғына булһын. Форсат сығып, беҙ, уҡытыусылар, шулай бер йыйылғанда бала саҡ тураһында һүҙ сыҡты. Лилиәнең һөйләгән иҫтәлектәре беҙҙе бер егерме йылдар элек булған ваҡиғаларға алып ҡайтты.**



# ЗАМАН ИКЕНСЕ,

## ләкин тәрбиә мәктәбе икенсе була аламы?

"Ул саҡта матур ҡағыҙҙарға төрөлгән һағыҙҙың яңы ғына сыҡҡан сағы, - тип башланы Лилиә һүҙен. - Нишләптер ауылыбыҙға һағыҙ магазинға түгел, ә почтаға килде. Сәйнәп ҡарағыҙ, тиеп, әсәйем барыбыҙға ла берәр һағыҙ һатып алып бирҙе. Урамға сыҡтыҡ та, шапшоп һағыҙ сәйнәйбеҙ. Әҙерәк сәйнәгәс, уның тәме бөттө. Ауыҙға ҡарап торған һағыҙһыҙ балалар араһынан дуҫыраҡ тип һанағандар менән һағыҙыбыҙҙы бүлешәбеҙ. Гигиена тигән нәмәне белмәйбеҙ ҙә. Атай-әсәйҙәр бөтмәҫ-төкәнмәҫ ауыл эше менән мәшғүл. Әсәйем ашнаҡсы. Әле лә төшкө аш әҙерләргә йүгерәсәк, ә беҙ үҙебеҙгә үҙебеҙ хужа булып, йәһәт кенә ҡапҡылап алып, йәйге оҙон көндө үҙебеҙ уйлап тапҡан уйындар менән дауам итәбеҙ. Минең елкәлә ҡусты. Елкәлә тигәс тә, елкәмә ултырта алмайым, үҙем дә әле ҙур түгел. Әммә ҡустымдан ете йәшкә оло булғас, уны апайым түгел, ә мин ҡарарға тейеш икәнен миңә аңлатып ҡуйғандар. Уның өсөн мин яуаплымын. Апайымдың үҙенең өй эсендә һәр саҡ эштәре бар.

Әле ҡустым минән рөхсәт һорап, һыу буйына китте. Оҙаҡламай әсәйем дә ҡайтты. Йөҙө асыулы. Нимә булды икән? Ул да булмай, ишек алдына ҡустым да килеп инде. "Ҡайҙа аҡса?" тип һорай әсәйем ҡустымдан. Ә мин әсәйемә ҡарайым, ниндәй аҡса таптыра ул? Аҡсаның ҡайҙа ятҡанын беләбеҙ, әммә уға тейергә ярамағанын да онотмайбыҙ. Әсәйем усал. Ҡустым ҡарашын йәшереп, аҫҡа ҡараны. Баҡһаң, әсәйем эштән ҡайтышлай почтаға ингән икән. Почтальон апай ҡустымдың биш йөҙ һум аҡса тотоп ингәнен, һағыҙ һорағанын, әммә бирмәй сығарыуын әйткән. Ул саҡтағы биш йөҙлөктө хәҙерге менән тиңләштерһәң, биш меңлек хаҡ була бит инде. Бына шул аҡсаны таптыра икән әсәйем.

- Ҡайҙа?- әсәйемдең тауышы тағы ла ҡатыраҡ яңғырай.

-Мин уны һыу буйында ҡалдырғанмын... Онотоп ҡайтып киткәнмен...

- Үәт әй! Һорауһыҙ алырға ярамағанын беләһең бит, ни эшләп алдың! Атайыңа әйтәм! - Ул беҙҙе һәр саҡ шулай тип ҡурҡытҡан була. - Ҡайҙа ҡалдырҙың, шунан табып алып ҡайт!

Беҙ аҡса эҙләргә йүгерҙек. Саҡ таптыҡ аҡсаны, ҡустым һыу инә барған да, бер таш аҫтына йәшереп һалып ҡуйған икән. Кире йүгерҙек өйгә. Хәл бөтөп ҡайтып индек. Әсәйем аҡсаны алды ла: "Мин ҡайтҡансы уйнарға сыҡмайһың, бынан һуң белерһең аҡсаны һорауһыҙ алырға ярамай икәнен", - тип, ҡустымды йәйге һыуыҡ, тәҙрәһеҙ, ҡараңғы келәткә бикләп, апайыма асҡысын биреп, асмаҫҡа ҡушып эшенә йүгерҙе.

Ҡустымды йәлләйем. "Апай, мин ҡурҡам, мине сығарығыҙ", - тип ул келәттең ишек төбөндә генә ултыра. Ишек тулыһынса ябылмай, ҡайырып асып, уны саҡ ҡына күреп була. Мин апайымдан үтенәм: "Апай, сығарайыҡ инде", - тием. Юҡ, апай нык тора, әсәй ҡушты, ти ҙә ҡуя. Унан ҡустым: "Исмаһам, миңә бесәйҙе булһа ла индерегеҙ, өшөйөм", - тип ялбара башланы. Апайым да түҙмәне, йәлләне, йәһәт кенә өйгә инеп китеп, йылы әйберҙәр алып сыҡты. Мин бесәй тотоп алып килдем, ишекте асып, йәһәт кенә ҡустыбыҙҙы кейендереп, бесәй тотторол ултыртып ҡуйҙыҡ. Кире бикләп, үҙебеҙ тыштан ҡарап торабыҙ. Бер аҙҙан апайым эше менән аласыҡҡа инеп китте. Мин әсәйем ҡайтҡансы тыш яҡтан ҡараулап ултырҙым. Ҡустым ҡурҡмаһын өсөн нимәләр генә һөйләп бөтмәнем: әкиәт, шиғыр, бар белгәнемде теҙеп һалдым... Әсәй ҡайтҡас, йәһәтләп ишекте асты, ҡустымды сығарып, ҡулын тотоп ҡараны ла, нык өшөмәгәнһең, ярай, барығыҙ, һарыҡтарҙы ҡаршылағыҙ тине. Үҙе йүгергәнебеҙҙе артыбыҙҙан ҡарап ҡалды.

Атайым кисен ҡайтҡас, ҡустым менән кәртә яғында нимә һөйләшкәндәрҙер - миңә билдәһеҙ, әммә аш алдынан атайымдың: "Улай бәләкәй баланы ҡурҡытаһың, малай бит ул", - тигәнен, ә әсәйемдең: "Урлашырға өйрәнмәһен", - тип, тағы әллә нимәләр тип шыбырлашҡандарын ишетеп ҡалдым. Ә беҙгә нимә, донъя түңәрәк, апайыбыҙ икебеҙгә икмәккә ҡаймаҡ һылап, әсәйҙән йәшереп кенә күп итеп шәкәр һибеп бирҙе. Киске ашты ла көтмәйенсә, тәмләп ашап ултырабыҙ. Хәҙер киске ашҡа саҡырасаҡтар, шунан ҡумәкләп ултырып аш ашайбыҙ. Әсәйгә үпкәләү тураһында уй ҙа юҡ, тимәк, шулай кәрәк, тигәнбеҙҙер инде...

Хәҙер инде үҫтек. Апайым Себер яғына кейәүгә сығып китте, шунда йәшәй. Ғаиләһе менән йылына бер ҡайтып китә. Ә бына ҡустым менән беҙ йышыраҡ осрашабыҙ. Уның үҙенең ғаиләһе, балалары бар, ата-әсәйем менән бергә йәшәй. Шул саҡтағы биш йөҙ һумға һағыҙ һатып алырға маташҡан малайҙың хәҙер инде үҙ магазины бар", - тип көләп һүҙен тамамланы Лилиәбеҙ.

Бына шулай, һәр кем үҙенең бала сағын иҫкә төшөрөп, өйҙәргә таралыштыҡ. Ысынлап та, һәр өй, ғаилә үҙенсә шул, үҙ ҡалыбы менән йәшәй. Һәр бала ғаиләһендә үҙенсә тәрбиә ала, һәр замандың үҙ талабы. Беҙ бала саҡта, бәлки, шулай келәткә ябыу һымаҡ ҡаты тәрбиә лә ярап ҡалһа, хәҙерге заманға тап килмәй. Хәҙерге көндә ата-әсәләр балаларына бигерәк тә иғтибарлыраҡ булһын ине. Элек муллыҡ етмәһә, бөгөн бер нәмәлә лә ҡытлыҡ кисермәйбеҙ, әммә матур кейендереп, ашатыуҙа ғына эш тормай. Балаға күңел йылыһы, иғтибар һәм дә изге йөрәк кәрәктер тием. Донъя көтөшөбөҙ элекке тормоштан бик нык айырыла. Яманлыҡ менән яҡшылыҡты айырып, әхлаҡи яҡтан, психик яҡтан боҙолмай үҫкән балалар ҡулына ҡала бит киләсәк тормош. "Бына ошо тәрбиә буйынса үҫтер баланы", - тиеп, берәү ҙә аныҡ ҡына ҡағиҙәләр йыйылмаһын ҡулыңа тоттора алмай. Әммә ғаиләлә дөрөҫлөк, эшһөйәрлек, дуҫлыҡ, тырышлыҡ, балаларға тейешенсә иғтибар һәм башҡа яҡшы төшөнсәләр буйынса йәшәйҙәр икән - бала бик тиҙ отоп ала. Ул ата-әсәһенән үрнәк алып үҫәсәк тә. Уйланырға урын бар.

**Зимфира ҠАСҠЫНОВА.**
**Хәйбулла районы**
**Йәнтеш ауылы.**

СӘЙЕР ҒӘҘӘТ

# ҺАНАЙЫМ...



**Бала саҡтан ҡыҙыҡ ғәҙәтем булды. Нимә эшләһәм дә һананым. Атлағанда - аҙымымды, һыйыр һауғанда, ҡамыр баҫҡанда, аш болғатҡанда, бала бәүеткәндә ҡул хәрәкәтемде иҫәпләйем. Бер, ике, өс...Меңдәрҙе ашып китәм, яңылышһам, яңынан башлайым. Хатта сират көткәндә, автобуста барғанда тынлығымды һананым.**

Хәҙер ҙә һанайым. Тик... иман һүҙҙәрен. Ҡабатлана торған хәрәкәттәремә аңым үҙенәнүҙе ҡушыла: "Әлхәмдүлилләһ", "Сүбхәнәллаһ", "Аллаһу әкбәр"...

Их, элегерәк белһәмсе ошо шифалы һүҙҙәрҙе! Күпме юлым асылыр, ашаған ашым таҙарыр, эшләнмәгән эшем эшләнер, өйөмә ҡот ҡуныр, балам да тынысыраҡ йоҡлар, ғаиләнә-тирәм бысраҡ энергиянан таҙарыр ине. Күңелемә, йөрәгемә иртәрәк нур ҡуныр ине. Иман нуры.

Әле лә һанайым, иренмәйем, сөнки ғәҙәтемә ингән. Ниәтем - Исмиәгәзәм доғаһын өйрәнеп, Аллаһы Тәғәләнең 99 нурлы, шифалы исемен ҡабатлап йөрөү. Быға айырым ваҡыт, урын кәрәкмәй, ә ғәҙәт итеп алыу ғына мөһим. Әгәр ҙә барыбыҙ ҙа ҡумәкләп ошо изге исемдәрҙе ҡабатлап йөрөһәк, күҙгә лә күренмәҫ, үлсәүҙәрҙә лә үлсәнмәҫ яҡшы ғәмәл ҡылыр инек. Күпме бысраҡ уйҙан арыныр, асыулы, үпкәле мәлдәр онотолор, яҡшы һүҙҙәр генә әйтелер ине. Һәр кемгә еңеллек килер, рухы, күңеле таҙарыр ине...

**Вазифа АҠНАЗАРОВА.**
**Сорғот ҡалаһы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

**33-сө идея**
**Булһа - булыр, булмаһа - юҡ, тип йәшәмә**

Эшләргә кәрәкле эшенде яҡшыраҡ итеп башҡарырға, алда торған бурыстарыңды уңышлыраҡ хәл итергә ынтылаһыңмы? Әллә, нисек тә аҙағына еткерәйем, тип, мөмкинлегенә ҡарап эшләргә йыйынаһыңмы?

Был турала мин бер көндө урам буйлап китеп барғанда уйландым. Мин бер кешенең баҫҡысҡа баҫып, стена буяғанын ҡарап торҙом. Ул бумалаһын алға-артҡа йөрөтөп, шап та шоп буяй, үҙе эшләгән эшенә әйләнеп тә ҡарамай, күрәһең, нимә тураһындалыр уйланалыр.

"Ҡалай күңелһеҙ, ялҡыткыс шөғөл", тип уйланым. Бер нисә минуттан офисҡа килеп индем, унда бер ҡатын иҫке генә машинкала туҡылдатып баҫып ултыра. Машинкаының туҡылдауы ыңғайына үҙе ниҙер көйләй, әйтерһең, был машинка уның йырын ритмға һалыусы бер метроном. Бер аҙ ҡарап торғас, уның эш ритмын метроном түгел, ә йөрәгенең ритмы көйләүен аңланым. Уйым менән урамда эшләгән малярға әйләнеп ҡайттым да: "Йәл, ошо мәлдә ул эргәлә торһон ине лә, шундай уҡ эш менән шөғөлләнеүсе был ҡатынды күрһен ине", тип уйланым. Был ҡатын үҙ эшенән ысын ҡәнәғәтлек табып эшләй.

Беҙ эштән, уға нимә һалабыҙ, шуны ғына алабыҙ кеүек тойола миңә. Әгәр беҙ унан яҡшы һәм файҙалы нимәләр алырға йыйынһаҡ, эште ҡыҙыҡһынып, бирелеп башҡарыу мотлаҡ. Яҡшы һәм файҙалы эштәрҙе энтузиазм менән башҡарырға кәрәк. Әгәр эш бурыс кеүек башҡарылһа, уның емеше менән файҙаланған кешеләр беҙҙең һәләкәтле һалҡынлығыбыҙҙы тоясаҡ. Мин ҡатынын һәм балаларын ашатыу өсөн эшләгән маляр хаҡында уйландым - уның "булһа - булыр, булмаһа - юҡ", тип эшләү стиле мотлаҡ ғаиләһенә лә күсәсәк бит.

Нимә генә эшләһәгеҙ ҙә, уны тырышып, яратып башҡарығыҙ. Әйтәйек, көмөш ҡалаҡ-һауыттарҙы ялтыратаһығыҙ икән, улар, короллдәргә әҙерләгән кеүек, ялтлап торһон. Көндәлек эшең менән дә теләп, ҡыуанып, күңелеңдә һалып шөғөлләнеп. Кемгәлер бүләк бирәһең икән, уға һөйөүеңде һалып бүләк ит. Аят-доға уҡыйһың икән, ауыҙ эсендән мығырҙама, еренә еткереп доға ҡыл.

Үҙебеҙҙән тыш йәшәүсе ниндәйҙер изге көскә ышанмай тороп, беҙ бер ваҡытта ла йәшәйешебеҙҙең файҙаһыҙлығы соҡоронан сыға алмаясаҡбыҙ. Миңә бөгөн иҫке донъябыҙ өҫтөндә эленеп торған өмөтһөҙлөк тойғоһо насар ғәҙәттәребеҙ һәм "булһа - булыр, булмаһа - юҡ" тип йәшәүебеҙ арҡаһында барлыҡҡа килгән томанға оҡшаған кеүек тойола.

Ғүмерендә "булһа - булыр, булмаһа - юҡ" тип йәшәп үткәрәһеңме, әллә уны эске ҡыуаныстан йыр-моң менән тулыландыраһыңмы - барыһы ла үҙеңдән тора. Тормошоңда һәм эшеңдә нимә өҫтөнлөк аласағын һин үҙең күреп, билдәләргә тейешһең.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 10 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.45 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40, 1.25 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Желтый глаз тигра". [16+]
23.30 Т/с "Тот, кто читает мысли" ("Менталист"). [16+]
2.15 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Осиное гнездо". [12+]
1.50 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 22.00, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 23.00, 2.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Пофутболим". [12+]**
**18.00 "Бай баҡса". [12+]**
**19.00 Бизнес-обзор. [12+]**
**19.20 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Трактор" (Челябинск). Кубок РБ.**
**22.30 Тайм-аут. [12+]**
**23.30 "Теге өсәү!" [12+]**
**0.00 Спектакль "Сваха". [12+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 "Мои крылья - мои сыновья". Вечер памяти Амира Абдразакова. [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 Теге өсәү. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 11 АВГУСТА ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.45 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40, 1.25 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Желтый глаз тигра". [16+]
23.30 Т/с "Тот, кто читает мысли" ("Менталист"). [16+]
2.15 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Осиное гнездо". [12+]
1.50 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 22.00, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 23.00, 1.15 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Ради добра. [6+]**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Тайм-аут. [12+]**
**19.00 Бизнес-обзор. [12+]**
**19.20 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Нефтехимик" (Нижнекамск). Кубок РБ.**
**22.30 По сути дела... [12+]**
**23.30 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.00 Спектакль "Моя звезда". [12+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Вой волчицы". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 Күстәнәс. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 12 АВГУСТА СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.45 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40, 1.25 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Желтый глаз тигра". [16+]
23.30 Т/с "Тот, кто читает мысли" ("Менталист"). [16+]
2.15 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Осиное гнездо". [12+]
1.50 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.00, 22.00 Дела и люди. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Спектакль "Таштуғай". [12+]**
**2.15 Спектакль "Слуга двух господ". [12+]**
**4.15 Автограф. [12+]**
**4.45 Уфа. Живое. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 13 АВГУСТА ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 2.45, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Желтый глаз тигра". [16+]
23.30 Т/с "Тот, кто читает мысли" ("Менталист"). [16+]
1.20 Премьера. "Гол на миллион". [18+]
2.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Осиное гнездо". [12+]
1.50 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 22.00, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 23.00, 2.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 3.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай баҡса". [12+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00 Бизнес-обзор. [12+]**
**19.20 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Северсталь" (Череповец). Кубок РБ.**
**22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Спектакль "Дальше тишина..." [12+]**
**4.00 Спектакль "Свояки". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 14 АВГУСТА ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50, 3.10 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.55 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.35 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 Международный музыкальный фестиваль "Жара". Лучшее. [12+]
23.25 Х/ф Премьера. "Плывем, мужики". [16+]
1.10 Большие гонки. [12+]
2.30 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 "Юморина". [16+]
23.30 Х/ф "Цена любви". [12+]
3.10 Шоу Елены Степаненко. [12+]
4.04 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Д/ф "Колыбель искусства-пещера Шульган-Таш". [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30, 2.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00, 17.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.30 Автограф. [12+]**
**17.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.00, 5.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Уфа. Живое. [12+]**
**0.15 Концерт Расуля Карабулатова. [12+]**
**3.00 Спектакль "Среда, среда". [12+]**
**5.30 Историческая среда. [0+]**
**6.00 "Наука 102". [12+]**

## 15 АВГУСТА СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Виктор Цой. Группа крови". [16+]
11.20, 12.20 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Премьера. "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
15.10 Т/с "А у нас во дворе..." [12+]
17.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00 "Сегодня вечером". К 75-летию Екатерины Васильевой. [16+]
19.50, 21.20 "30 лет спустя. Вечер памяти Виктора Цоя". [12+]
21.00 Время.
1.00 Х/ф "Вид на жительство". [16+]
2.40 Наедине со всеми. [16+]
3.25 Модный приговор. [6+]
4.10 Давай поженимся! [16+]
4.45 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 "Сто к одному".
11.00, 20.00 Вести.
11.30 "100ЯНОВ". [12+]
12.30 "Доктор Мясников". [12+]
13.40 Х/ф "Запах лаванды". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Там, где нас нет". [12+]
1.20 Х/ф "Отпечаток любви". [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Йәйләү". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**13.15, 20.15 Земляки. [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00, 5.15 "Млечный путь". [12+]**
**17.45, 3.45 "Все песни о прекрасном". Концерт. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Ради добра. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 Концерт Айгуль Сагинбаевой. [12+]**
**0.15 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.00 Спектакль "Отчаянная". [12+]**
**4.30 Әлләсе... [6+]**
**6.00 "Наука 102". [12+]**

## 16 АВГУСТА ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30, 6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.25 Моя мама готовит лучше! [0+]
7.25 Т/с "Тонкий лед". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.20 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.20 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Премьера. "На дачу!" с Ларисой Гузеевой. [6+]
15.10 Т/с "А у нас во дворе..." [12+]
17.15 Русский ниндзя. [12+]
19.15 Три аккорда. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Налет". [16+]
23.30 "КВН". Премьер-лига. [16+]
1.00 Большие гонки. [12+]
2.25 Наедине со всеми. [16+]
3.05 Модный приговор. [6+]
3.50 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.30 Х/ф "Маша". [12+]
6.00 Х/ф "Оазис любви". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Устами младенца".
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 "Сто к одному".
11.00, 20.00 Вести.
11.30 Т/с "Чужая жизнь". [12+]
21.45 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
23.45 Д/ф "Курск. Десять дней, которые потрясли мир". [12+]
0.55 Х/ф "Испытание верностью". [12+]
4.11 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Книга сказок". [0+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**15.30 Башҡорттар. [6+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00, 1.45 "Айда на оперу!" [12+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30, 4.00 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 Спектакль "Касатка". [12+]**
**4.30 "Млечный путь". [12+]**

**ВСЕ ЛУЧШЕЕ ПРИХОДИТ К НАМ ВОВРЕМЯ!**




**Вода минеральная Лазаревская**, целебная, высокого стандарта **«Халяль»** поддержит иммунитет с первых дней жизни. Не имеет аналогов питьевых и минеральных вод. Повышает иммунитет благодаря антивирусным свойствам, способствует профилактике и лечению синдрома компьютерной усталости и синдрома утомляемости от сотовой связи, корректирует нарушения иммунного и биохимического статуса. Отвечает духовным запросам верующих мусульман. **Тел.+79191515887**.

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ДУҪЛЫҠ ЕБЕ ҠЫЛДАН НЕСКӘ, ҠЫЛЫСТАРҘАН ҮТКЕР




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**31-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тышау. Аҡмулла. Нуҡта. Фараз. Торба. Алатуба. Архаизм. Лампа. Ассоль. Урт. Али. Санта. Лүшә. Ваба. Сарыҡ. Ион. Итек. Юрға. Әрмән. Елпеүес. Алпауыт.

**Вертикаль буйынса:** Абдуллин. Фәхретдин. Интервью. Алла. Ракета. Заман. Төмән. Алама. Лена. Ҡотлогилдина. Терпе. Урама. Сит. Тал. Сәскә. Алға. Порт. Ата. Арҡан.

КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ

## БАЛ ҠОРТО, ҺАҒЫҘАҠ САҠҺА...

Йәйен күп төрлө бөжәк араһында бал ҡорто, һағыҙаҡ кеүек саға торғандары ла күп. Ауыртыуға ғына түҙергә була, әммә уларҙың ағыуы аллергия рекцияһы ҡуҙғытыуы менән ҡурҡыныс. Аллергияның төп билдәләре: баш ауырта, тәнгә сабыртма сыға, быуын ауырта, бит, муйын тирәһе шешә, баш әйләнә, температура күтәрелә, ҡорошҡаҡ тота. Ағыуға реакция көслө булғанда хатта аңды юғалтыу, анафилактик шок, Квинке шеше күҙәтелергә мөмкин.

Нимә эшләргә? Саҡҡан урынды ҡарағыҙ, ҡаяуы булһа, уны алығыҙ. Яраға инфекция индереүҙән һаҡланығыҙ. Бармаҡ менән һығып сығарырға тырышмағыҙ, пинцет ҡулланығыҙ. Ҡул осонда антисептик булһа, тиҙ генә яраны эшкәртегеҙ, булмаһа - тоҙло һыу ҙа ярай. Ауыртыуҙы баҫыу өсөн һыуыҡ әйбер һалығыҙ, күберәк һыу эсегеҙ, аллергияға ҡаршы дарыу ҡабул итегеҙ ("Супрастин", "Зодак", "Тавегил", "Кларитин"). Аллергия көслө булған осраҡта "Ашығыс ярҙам" саҡырығыҙ. Айырыуса, ауыҙ, муйын, күҙ алмаһын саҡҡан осраҡта медицина ярҙамына тиҙерәк мөрәжәғәт итегеҙ.

## ИНСУЛЬТ ЭҘЕМТӘЛӘРЕНӘН...

Ҡан ағыҙыу - инсульттан һаҡланыуҙың традицион булмаған сараһы. Бының өсөн аңын юғалтып йығылған кешене, мөмкин булһа, һаҡ ҡына һөйәп ултыртығыҙ. Шприц булмаһа, энә йәки булавканы утта тотоп алығыҙ һәм ҡулдың ун бармағына ла ҡан сығырлыҡ итеп сәнсегеҙ. Ниндәйҙер махсус нөктәләр юҡ, шулай ҙа тырнаҡтан бик йыраҡ китмәгеҙ. Әгәр ҙә ҡан күренмәһә, бармағығыҙ менән һығып сығарығыҙ. Ун бармаҡтан да ҡан ағырға тейеш. Һөйләштереп ҡарағыҙ, ауыҙы ҡыйшайғанын күрһәгеҙ, ҡолағы ҡыҙарғансы тартығыҙ, ышҡығыҙ. Бер ике тамсы ҡан күренгәнсе ҡолаҡ йәрпесәктәрен дә энә менән тишегеҙ. Был сараларҙың икеһе лә мейене ҡан һауыуҙан һаҡлай. Ауырыу аңына килгәс, медицина ярҙамына мөрәжәғәт итегеҙ.

## АЯҠ ҺЫҘЛАҒАНДАН...

Аяҡ һыҙлауынан түбәндәге ысул менән ҡотолорға мөмкин: тасҡа йәки күнәккә 2-3 литр йылы һыу ҡойоғоҙ. Һыу һөт төҫөнә ингәнсе, йәғни ағарғансы кер һабынын ебетегеҙ. Берәр ус сода, тоҙ (диңгеҙ тоҙо) ҡушып, үҙегеҙ түҙә алғансы ҡайнар һыу өҫтәгеҙ, 10 тамсы йод тамыҙығыҙ һәм 15 минутҡа аяғығыҙҙы тығып ултырығыҙ. Таҫтамал менән ҡоротоп, массаж хәрәкәттәре менән крем йәки берәй мазь (зәйтүн майы) һөртөгөҙ, йөн ойоҡ кейегеҙ. Был иретмәне өс тапҡыр ҡулланғандан һуң, түгеп, яңынан эшләгеҙ, аяҡты тығыр алдынан ҡайнар һыу өҫтәгеҙ. Процедураны 10-12 тапҡыр көн һайын эшләргә кәңәш ителә. Бер аҙ туҡтап торғандан һуң тағы ҡабатлағыҙ. Тромбофлебит, варикоз кеүек ҡан тамырҙары сире булғандарға эҫе һыу ярамай.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Август (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 10 (20) дүшәмбе | 4:14 | 5:44 | 13:30 | 19:27 | 20:57 | 22:27 |
| 11 (21) шишәмбе | 4:16 | 5:46 | 13:30 | 19:24 | 20:54 | 22:24 |
| 12 (22) шаршамбы | 4:18 | 5:48 | 13:30 | 19:22 | 20:52 | 22:22 |
| 13 (23) кесе йома | 4:20 | 5:50 | 13:30 | 19:20 | 20:50 | 22:20 |
| 14 (24) йома | 4:22 | 5:52 | 13:30 | 19:18 | 20:48 | 22:18 |
| 15 (25) шәмбе | 4:24 | 5:54 | 13:30 | 19:16 | 21:46 | 22:16 |
| 16 (26) йәкшәмбе | 4:25 | 5:55 | 13:30 | 19:13 | 20:43 | 22:13 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

## ЙӘШӘҮ ӨСӨН АШАРҒА...



**Һаулыҡты һәм йәшлекте нисек һаҡларға? Ҡытай диетологтары түбәндәгеләрҙе кәңәш итә:**

**Тоҙҙо аҙыраҡ ашарға.** Эске ағзалар эшмәкәрлеге өсөн тоҙ кәрәк, әммә уны саманан тыш ҡулланыу организмға ҙур зыян. Көнөнә 12-15 грамм тоҙ етә, әммә беҙ уны өс тапҡырға күберәк ҡулланабыҙ. Был бөйөргә, йөрәккә, артерияларға зарарлы. Матдәләр алмашыныуы боҙолһа, организмда артыҡ шыйыҡса барлыҡҡа килә, был шешенеүгә, һимереүгә, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуына килтерә.

**Химик составы еңел үҙгәргән аҙыҡ ҡулланырға.** Уға арахис, ит, балыҡ, ҡуҙаҡлылар инә. Иң мөһиме, яңы булырға тейеш. Иҫкергән, боҙолған ризыҡтарҙы ҡулланырға ярамай. Улар ашҡаҙан-эсәк кенә түгел, яман шеш сирҙәренә юлыҡтырырға һәм организмды иртә ҡартайыуға килтерергә мөмкин. Ҡытай ғалимдары юшҡындың зыянлы булыуын асыҡлаған. Шуға күрә сәй эскәндән һуң сәйнүкте яҡшылап йыуырға кәңәш ителә. Ҡомағы оҙаҡ таҙартылмаған һауыттан эсеү ашҡаҙандың аҙыҡ эшкәртеүенә, нервылар системаһына, ҡан әйләнешенә кире тәьҫир итә, ҡартайыуға килтерә.

**Эҫе майҙан баш тартырға.** Балыҡ, ит һәм башҡа аҙыҡ ҡурған майҙы башҡа ҡулланмағыҙ. Шулай уҡ эш процесында май составы үҙгәргән ҡаҡланған ит, балыҡ зарарлы. Ҡулланыу ваҡыты үткән печенье, пирожный, макарон ризыҡтарын да ташлағыҙ. Майлы кислоталар организмдың кислота-һелте балансын, иммунитетты ҡаҡшата. Былар - ҡартайыуға илткән сәбәптәрҙең иң мөһиме.

**Майҙа ҡайнап бешкән ризыҡ ярамай.** Ныҡ ҡыҙған майҙа бутадиен барлыҡҡа килә. Айырыуса ҡайнаған саҡта үҫемлек майы уны күп бүлеп сығара. Арахис һәм кукуруздыҡында аҙыраҡ булыуы билдәле.

**Алкоголле эсемлектән тыйылырға.** Иҫерткес эсемлектәр бауыр ауырыуына, ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ түлһеҙлегенә, дөрөҫөрәге, ҡартлыҡҡа килтерә.

**Ошо ябай ғына алты кәңәште тотһағыҙ, күп ауырыуҙан азат булырһығыҙ һәм ғүмерегеҙҙе оҙайтырһығыҙ.**

✓ *Туҡыусылыҡ, ҡул эштәре әйберҙәрендә башҡорт милли йолалары, көнкүреше, уҙаһы көүҙәләнгән. Улар халыҡтың матди мәҙәниәте менән генә түгел, рухи мәҙәниәте менән дә тәбиғи бәйләнештә тора.*



*БАШҠОРТСА ҺҮҘЛЕК*

# АҒРАМАТ НИМӘ БУЛА?

**Һуңғы йылдарҙа республикала "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының әүҙем эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә йәмғиәтебеҙҙә башҡорт халҡының кейем-һалымына, ҡатын-ҡыҙҙарҙың боронғо ҡул эштәренә, кәсептәренә иғтибар бермә-бер арта. Шуға ла, замандаш оҫтабикәләр элекке шөғөлдәргә тотонғанда халҡыбыҙҙың борондан килгән туҡыусылыҡ, ҡул эштәре өлкәһендәге терминдарҙы ла хәтеренә төшөрһөн, тигән маҡсатта Рәсәй Фәндәр Академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының кесе ғилми хеҙмәткәре Рәмилә Ниғмәтйән ҡыҙы Кәримованың "Башҡортса-урыҫса туҡыусылыҡ һәм ҡул эштәре терминдары һүҙлеге" китабынан онотола башлаған, һирәк ҡулланылған ҡайһы бер һүҙҙәрҙе тәҡдим итәбеҙ.**

"Туҡыусылыҡ һәм ҡул эштәре - башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының боронғо һөнәрҙәренең береһе,- ти китаптың баш һүҙендә автор.- Ул халыҡтың көндәлек тормошо талаптарынан сығып барлыҡҡа килгән, үҫешкән, камиллашҡан. Туҡыусылыҡ, ҡул эштәре әйберҙәрендә башҡорт милли йолалары, көнкүреше, уҙаһы көүҙәләнгән. Улар халыҡтың матди мәҙәниәте менән генә түгел, рухи мәҙәниәте менән дә тәбиғи бәйләнештә тора. Бөгөнгө көндә был һөнәр төрө башҡорттарҙа традицион рәүештә һаҡланған.

Башҡорттар борон-борондан хужалыҡтарында көнкүреш әйберҙәре, кейем-һалым етештергән. Кейем тегеү өсөн йөн, тире, күн ҡулланғандар, кесерткәндән, ҡырҙа үҫкән киндерҙән эске кейем теккәндәр. Етен эшкәртеү сағыштырмаса һуңғараҡ барлыҡҡа килгән. 1785 йылдағы документтар буйынса, киндер, етен, бик аҙ күләмдә булһа ла, бөтә Башҡортостан территорияһында үҫтерелгән. Кейем-һалым, көнкүреш әйберҙәрен етештереү, ҡағиҙә булараҡ, ҡатын-ҡыҙҙар бурысы булған.

Ғалимә С.Н. Шитованың китаптарында ҡатын-ҡыҙҙарҙың өйҙә етештергән әйберҙәре менән танышырға, туҡыусылыҡ, кейеҙ баҫыу, ҡул эштәре тураһында системалы мәғлүмәттәр табырға була. Автор туҡыусылыҡ төрҙәре, материалдар, оҫта туҡыусы ҡатын-ҡыҙҙар ҡулланған төрлө алымдар, ысулдар, орнаменттар төрө, әйберҙәр ассортименты үҙенсәлектәре тураһында яҙа, "бөтә башҡорт һөнәрҙәре лә (беренсе сиратта - ҡатын-ҡыҙҙар һөнәре) биҙәү, матурлау ижады менән бәйле" тигән һығымтаға килә.

Мин дә туҡыусылыҡ, ҡул эштәре буйынса күп кенә материалдар тупланым һәм терминдарҙы дөйөм бер системаға һалыу ихтыяжы тыуҙы. "Башҡортса-русса туҡыусылыҡ һәм ҡул эштәре терминдары һүҙлеге" ошо маҡсаттан төҙөлдө. Һүҙлеккә әҙәби, дөйөм туҡыусылыҡ, ҡул эштәре терминдары менән бер рәттән, һүҙҙәрҙең диалект варианттары ла алынды..."



**Абурка** *(ҡариҙел һөйләше)*, **балитәк**

**Ағас талҡы** *(ҡыҙыл)*, **талҡыуыс**

**Ағрамат** *(һаҡмар)*, **сәсәк**

**Ажурлау** - выполнять ажуром, сквозным узором

**Айҙандырыу** - нашивка по контуру рисунка цветных полос (простая техника аппликации)

**Аймылыш** *(ҡариҙел)* - узлы ниток, соединённых в основе

**Айсыҡ** *(дим)* - узор на вязаных шалях, в вышивке в виде полумесяца

**Айсыҡлау** - вывести узор в виде полумесяца

**Аҡбуҙ** *(дим)*, **бәз**

**Аҡыҡ** - сердолик

**Алаҡ-йолаҡ** - полосатый; в полоску

**Алаланыу** - становиться пёстрым; сделаться пёстрым, пестрить (напр., ткань после набивки)

**Алалау** - делать пёстрым

**Аламыс** *(һаҡмар)*, **сепрәк балаҫ**

**Ала-сола** - пятнистый (о цвете ткани)

**Ала-сыбар** - пятнистый, пёстрый

**Алача** *(ғәйнә)* - холщовая ткань

**Албаҕана** *(мейәс, урта)* - передние стойки ткацкого станка, на которых крепится вал для наматывания сотканного материала

**Рәмилә КӘРИМОВА.**

**"Башҡортса-урыҫса туҡыусылыҡ һәм ҡул эштәре терминдары һүҙлеге" китабынан.**

*ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!*

# ИКМӘКТЕ ҮҘЕҢ БЕШЕР



**"Икмәкте үҙем һалам, тиһәң, сүпрәне лә ҡомалаҡтан үҙең әҙерлә инде, - тип әйтте йәш сағынан уҡ унған, тәмле икмәк бешереү менән даны сыҡҡан Нәсибә апай. - Ә йәш ҡомалаҡтан бешерелгән икмәк бигерәк тә тәмле була".**

Сүпрәне кипкән ҡомалаҡтан әҙерләгәндә бер өлөш ҡомалаҡҡа ике өлөш һыу ҡойоп, уны яртыһына тиклем кәмегәнсе ҡайнатырға кәрәк. Ә йәш ҡомалаҡтан әҙерләгәндә тутыҡмай торған тимерҙән йәки эмаль кастрүлгә ҡомалаҡты тығыҙ итеп тултырып, эҫе һыуҙы өҫтө күмелгәнсе ҡойоп, бер сәғәт ҡайнатаһың. Эҫеләй һөҙөп алғас, ярты балғалаҡ тоҙ, бер балғалаҡ шәкәр ҡомо ҡушып, бер стакандай он һалып болғатып, йылы урынға бер тәүлеккә ҡуяһың. Сүпрә әҙер булғас, банкаға һалып, өҫтөн ябып, һалҡын урында һаҡлайһың.

Сүпрә тиҙ арала әҙер булһын тиһәң, алты ҡалаҡ ҡур (әҙер сүпрә) өҫтәргә кәрәк. Былай эшләгәндә, кис ҡуйһаң, сүпрә иртәнсәккә әҙер була.

Картуф бешергән һыуҙы йылы көйө ҡушып ебәргәндә, сүпрә оҙаҡ иҫкермәй, хатта ике ай буйына һаҡлана.

Ҡомалаҡты һабағы менән ҡайнаталар, ләкин япрағынан таҙартырға кәрәк, сөнки ул сүпрәне ныҡ боҙа.

Мейес тултырып икмәк һалам тиһәң, дүрт таба икмәк өсөн 3 килограмм он, 6 ҡалаҡ сүпрә, ярты ҡалаҡ тоҙ кәрәк.

Сүпрәне эмаль табаҡҡа һалып, он, йылымыс һыу өҫтәп, йылы урынға ҡуйырға. Ҡамыр әсегәс, тоҙ һалып, тағы ла он өҫтәп баҫып, йәнә йылы урынға ҡуйырға. Ҡамыр ҡабарып сыҡҡас, тағы ла бер ҡат баҫып, май һөртөлгән табаларға бүлеп һалып, ҡабарып сыҡҡас, бешерергә ҡуйырға. Ауыл мейесендә бер сәғәт 50 минут самаһы ваҡыт үтеүгә, икмәк бешеп сыға. Икмәктең ҙурлығына һәм мейестең ҡыҙыулығына ҡарап, һәр хужабикә үҙенсә бешереп ала инде. Духовкала 200 градуста бешерәләр. Бешкән икмәктәрҙе алғас та, өҫтәрен һыу менән һөртөп, таҙа ашъяулыҡҡа теҙеп, баҫырып ҡаплап һыуыталар.

Икмәк иҫкермәһен өсөн уны һалған һауытҡа аҙ ғына итеп тоҙ ҡуйырға кәрәк.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӨЛӨР ЙОРТТА...

## буйҙаҡ баш булыр

Ат менән ҡатындың башын ҡаты тот.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бай кеше - ул аҡсалы бахыр кеше.

**(Уильям Филдс).**

Ҡомһоҙға бар донъяны бүләк ит - ул уны төрөп алыр өсөн ҡағыҙ таптыра башлаясаҡ.

**(Жюльен де Фалкенаре).**

Ағым ыңғайына йөҙгәндәр бер ваҡытта ла инеш башын күрмәйәсәк.

**(Петер Тилле).**

Тәнҡит - файҙаһыҙ шөғөл: китапты башҡаларҙы аңлар өсөн түгел, үҙеңде аңлар өсөн уҡырға кәрәк.

**(Эмиль Сьоран).**

"Бүр!" тип ҡысҡыр - барыһы ла әйләнеп ҡарар, "Кеше!" тип ҡысҡыр, берәүҙең дә ҡолағы ла һелкенмәҫ.

**(Влодзимеж Счисловский).**

Көнөңдө йылмайыу менән башла, йылмайыу менән тамамла.

**(У. Филдс).**

**Шулай итеп, бер аҡыл: "Ҡала уртаһындағы йорто һүтеп алынған бер ташландыҡ баҡсала ҙур йөҙөм ағасы үҫеп ултыра. Кешеләр йыш ҡына уның эргәһендә туҡтап, емешен өҙөп ҡаба, күләгәһендә ултырып ял итә. Бер саҡ был ағас янына бер ҡарт килеп баҫа ла, уға текләп ҡарап тора. Эргәһенән үтеп барған бер үҫмер, ҡарт емеш өҙөп ала алмай тора икән, тип уйлап, уға ярҙам итмәксе була һәм тиҙ генә ағасҡа үрмәләп, ҡартҡа йөҙөм өҙөп тоттора. Ҡарт үҫмергә бик ихласлап рәхмәт уҡый, үҙе ағас күләгәһенә ял итергә ултыра. Шул саҡ ағас телгә килә һәм ҡарттан былай тип һорай: "Әйт әле, һеҙ, кешеләр, ниңә һәр ваҡыт бер-берегеҙгә рәхмәт уҡыйһығыҙ. Ә бына минең емешемде ашаһағыҙ, күләгәмдә ял итһәгеҙ ҙә, миңә берегеҙ ҙә рәхмәт әйтмәй". Ҡарт шулай тип аңлатып бирә: "Ә бит был малай мине шәйләмәй ҙә эргәмдән үтеп китә ала ине. Ләкин ул улай итмәне, ул изгелек эшләүҙе үҙ ирке менән һайланы. Шуға ла ул минең рәхмәтемә лайыҡ булды. Ә бына һин емеш бирергәме, емеш бирмәҫкәме, тигән һайлау алдында тормайһың. Шуға ла кешеләр һинең емешеңде тәмләһә лә, күләгәңдә ял итһә лә, быны өсөн һиңә рәхмәт уҡымай. Улар шулай уҡ был донъяла йәшәүе, күкрәктәрендә йөрәк тибеүе өсөн Хоҙайға рәхмәт уҡырға икәнен дә башына ла индереп сығармай, был шулай тейеш тип ҡабул итеlә..." "Рәхмәт һиңә, аҡһаҡал, - ти ағас, - һин дә минең рәхмәтемә лайыҡһың, сөнки һин минең һорауымды ишеттең. Ә бит ишетмәҫкә лә мөмкин инең..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.

Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**

E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

**Баш мөхәррир** 253-25-44

**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24

**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 6 август 17 сәғәт 00 мин.

Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007

Заказ - 625/08